ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

29-4
март - апрель
(буранай - алағарай)
2024
№ 12 (1105)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

*Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! "Киске Өфө" (индексы ПР905) гәзите менән бергә булыусы аңлы, зыялы дуҫтарыбыҙҙы 2024 йылдың икенсе яртыһы өсөн дә баҫмабыҙға ваҡытынан алда 873 һум 12 тингә яҙылып ҡуйырға саҡырабыҙ. Ә 1 апрелдән, ғәҙәттәгесә, почта хаҡтарҙы тағы арттырасаҡ икәнен дә белеп ҡуйығыҙ. Ошо арауыҡта гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер бүләккә бик шәп китаптар аласағы тураһында ла онотмағыҙ. Бергә булайыҡ!*

*МӨХӘРРИРИӘТ.*

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Көслөнән үсле яман



3

Башҡортлоҡто

һаҡлар өсөн килдек...



8

Ер рухынан...




9

Ҡыйыуҙар һөнәре



11

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

ҺӨЙӨНСӨ!

# КӨТӨП АЛЫНҒАН ЮЛ



**Өфөлә "Хәүефһеҙ сифатлы юлдар" милли проекты сиктәрендә төҙөлгән ҙур инфраструктура объекты - Көнсығыш сығыу юлы асылды. Проект дәүләт-шәхси партнерлыҡ принциптары буйынса тормошҡа ашырылды һәм 1276 метрға һуҙылған тоннель, Ҡариҙел аша 2,7 саҡрым оҙонлоғондағы күпер һәм М-5 федераль трассаһына тиклем 10 саҡрым автомобиль юлы төҙөлөштәрен үҙ эсенә алды. Төҙөлөш эштәренең тағы ла бер этабы булып яңы юлды М-7 федераль трассаһына тоташтырыу торасаҡ - быныһы киләсәк эше.**

Тантаналы сарала Рәсәй Хөкүмәте рәйесе урынбаҫары Марат Хөснуллин менән Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ҡатнашты. "Был Башҡортостан халҡы өсөн көтөп алынған объект. Өс яҡтан йылға менән уратып алынған Өфө өсөн Көнсығыш сығыу юлы стратегик әһәмиәткә эйә", - тине Радий Фәрит улы үҙенең сығышында һәм Рәсәй Президенты менән ил Хөкүмәтенә иғтибары һәм ярҙамы өсөн рәхмәтен белдерҙе.

Марат Хөснуллин иһә был үҙенсәлекле транспорт проектының тотош Рәсәй өсөн мөһимлеген билдәләне: "Ул төбәктең социаль-иҡтисади үҫешенә лә йоғонто яһап, Өфө агломерацияһының ҡала төҙөлөшө мөмкинлектәрен дә арттырасаҡ. Әлеге мәлдә Өфө торлаҡ төҙөлөшө буйынса лидерҙар рәтендә, бының өсөн, Радий Фәрит улы, һеҙҙең идара итеүсе командағыҙға ҙур рәхмәт. Яңы юл ҡала үҫешен ошо юғары темптарҙа алып барырға булышлыҡ итер, тип ышанам".

Башҡортостандың ҡала төҙөлөшө һәм логистик потенциалын артабан да камиллаштырыу өсөн М-12 автомагистрале төҙөлөшө сиктәрендә Дүртөйлө-Әшит автомобиль юлы участогы ла һалына. Уның дөйөм оҙонлоғо - 140 саҡрым. Тимәк, республика Көнсығыш сығыу юлы менән бер рәттән, тағы ла бер заманса транспорт объектына эйә буласаҡ. Был иһә Өфө тирәһендәге яңы территорияларҙа төҙөлөш эштәре башланыуға ла старт бирәсәк. Радий Хәбиров билдәләүенсә, был ерҙәрҙә яҡынса 5-6 миллион кв.м торлаҡ төҙөргә мөмкин, унда уңайлы шарттарҙа яҡынса 20 мең кеше йәшәй аласаҡ.

Көнсығыш сығыу юлы - Волга буйы федераль округында тормошҡа ашырылған иң эре проекттарҙың береһе иҫәпләнә. 2017 йылда Башҡортостан Хөкүмәте менән "ВТБ Инфраструктура холдингы"на ингән "Башҡорт концессион компанияһы" яуаплылығы сикләнгән ойошма араһында концессион килешеү төҙөлгәйне. Төҙөлөш-монтаж эштәре яҡынса 40,3 миллиард һум, уның 4,5 миллиард һумы - республика, 26,7 миллиард һумы федераль саралар, 9,1 миллиард һумдан ашыуы - концессионер сығымдары.

Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, 2024 йылдың 1 апреленә тиклем трасса буйлап үтеү бушлай. Аҙаҡтан уның хаҡы еңел автомобилдәр өсөн төнөн - 20 һәм көндөҙ 100 һум, йөк машиналары өсөн - 50 һәм 250 һум буласаҡ.

УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ




# ҮҘАҢЫБЫҘҘА БУЛЫР ӨСӨН...

**Бөгөнгө көндә ваҡытлы матбуғатҡа ҡарата ниндәй генә төрлө фекерҙәр йәшәмәһен, уларҙың авторҙары гәзит-журналдарҙың, бигерәк тә туған телдә донъя күргән баҫмаларҙың әһәмиәтен инҡар итә алмай. Милли матбуғат, исеменән үк аңларға була, миллилеккә баҫым яһай, халыҡты борсоған мәсьәләләрҙе күтәрә, халыҡты ҡыҙыҡһындырған һорауҙарға яуап бирә, халыҡты берләштерә, уға үҙаңынан ситләшмәҫкә булышлыҡ итә.**

(Дауамы 2-се биттә).

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ҠЫҪҠА ВАҠЫТҠА...

**Рәсәйҙә ОСАГО-ның йыллыҡ полистарына өҫтәп, ҡыҫҡа ваҡытлы - бер көндән өс айға тиклем өҫтәмә барлыҡҡа килә.**

Быға тиклем ОСАГО килешеүҙәре бер йылға ғына төҙөлгән һәм был ваҡыт эсендә полисты ҡулланыу осорон - кәм тигәндә өс айҙан бер йылға тиклемге осорҙо һайларға мөмкин булған. Мәҫәлән, йәйге страховка. Ҡыҫҡа ваҡытлы полистар машинаны һатып алғас, уны даими теркәлеү урынына килтергәндә һәм сит илдә теркәлгән автомобилде Рәсәйҙә ваҡытлыса файҙаланғанда ғына алырға була ине. Бындай ҡыҫҡа ваҡытлы страховкалар һәм уларҙың хаҡы кемгә кәрәк булыуы мөмкин - Башҡортостандың Милли банкында шул хаҡта һөйләнеләр. "Ҡыҫҡа ваҡытлы яңы полистар транспорт менән һирәк файҙаланған автомобиль хужалары өсөн отошло булыуы ихтимал. Мәҫәлән, йәйгеһен дачаға күсәләр, ә көҙөн - кире ҡалаға", - тип аңлатты идарасы Марат Кашапов. - Әммә ҡыҫҡа полисты рәсмиләштерер алдынан, уның күпмегә төшәсәген асыҡларға кәрәк. Эш шунда, сикләнгән осор менән йыллыҡ полистар өсөн берҙәм коэффициенттар ҡулланыла. Мәҫәлән, өс айлыҡ страховка өсөн коэффициент 0,5 тәшкил итә, йәғни ул йыллыҡ ОСАГО-нан ике тапҡырға арзаныраҡ тора. Ә яңы ҡыҫҡа килешеүҙәр өсөн страховка компаниялары коэффициенттарҙы үҙ ҡарамағына билдәләйәсәк. Шул уҡ ваҡытта ҡыҫҡа полистарҙың хаҡы йыллыҡ ОСАГО-ныҡынан артмаҫҡа тейеш. Шуға күрә һеҙҙең өсөн ҡайһы варианттың отошлораҡ булыуын алдан асыҡлау яҡшыраҡ. 2023 йылдың 9 айы йомғаҡтарынан күренеүенсә, Башҡортостанда ОСАГО полисының уртаса хаҡы 6,8 мең һум булған. Был Рәсәй буйынса уртаса күрһәткестән 13 процентҡа түбәнерәк, унда ул 7,8 мең һум тәшкил иткән", - тип аңлатма бирҙе эксперт.

**Элина ӘХМӘТОВА.**

12+

УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ



# ҮҘАҢЫБЫҘҘА БУЛЫР ӨСӨН...

(Башы 1-се биттә).

Гәзит-журналдарҙың көнө бөтөп бара, тиһәләр ҙә, беҙҙең ваҡытлы матбуғат йәшәй, көндәлек тормошто яҡтыртта, тарихты "һөйләй", киләсәккә өмөт бирә. Шулай ҙа күп төрлө ваҡытлы матбуғат араһында ла һәр кемдең күңеленә яҡын, көтөп алған баҫмаһы була. Минең өсөн ошондай баҫма - "Киске Өфө".

Ысынлап та, мәғлүмәт таратыу, йәшен тиҙлегендә хәбәрҙәр еткереү - интернет, телевидение һәм радио ҡулында. Уларҙың эшмәкәрлегенең девизы: тиҙ, актуаль, иң беренсе. Ә гәзит һәм журналдар ошо мәғлүмәтте "булдыүтте", тип кенә түгел, ә һәр теманың төбөнә төшөп, уны төрлө яҡтан тикшереп, айышын "тәмләп" кенә еткерә халыҡҡа. Ошоноң менән дә көслө ул ваҡытлы матбуғат һәм айырыуса "Киске Өфө".

Миңә бигерәк тә гәзиттең этник йүнәлеште һәр саҡ беренсе урынға ҡуйыуы оҡшай. Ҡайҙа әле беҙ тағы халҡыбыҙҙы ҡайғыртҡан, маҡтаған, уның үткәне хаҡында ҡыҙыҡлы факттар еткергән, бай тел менән яҙылған, бай мәғлүмәти сығанаҡ табабыҙ! Бөгөнгө көндә Рәсәй һәм сит ил матбуғатында күҙәтелгән тенденция - бер йүнәлеште йәки теманы алыу һәм шуларҙы бик төплө итеп халыҡҡа еткереү. "Киске Өфө" лә ошо тенденцияны бик уңышлы ҡуллана һәм милләтебеҙ тормошон төрлө яҡлап яҡтыртырға ынтыла.

Гәзит биттәрендә Өфөлә, республикала һәм һирәк осраҡта Рәсәй төбәктәрендә йәшәгән милләттәштәребеҙ тураһында уҡырға мөмкин. Редакция хеҙмәткәрҙәренә ошо теманы киңәйтергә кәңәш итер инем. Башҡорттар донъяның төрлө урынында йәшәй, эшләй. Мәҫәлән, Силәбе, Ҡурған, Һамар өлкәһендә йәшәүсе милләттәштәр тормошо тураһында уҡыуы бик ҡыҙыҡлы булыр ине, тип уйлайым. Шулай уҡ бөтә донъя буйлап таралған башҡорттар хаҡында ла мәҡәләләр күрергә теләүселәр әҙ түгелдер. Уларҙың йәшәйеше, тыуған ерҙәре менән бәйләнеше тураһында ла мәҡәләләр бирһәгеҙ, яҡшы булыр ине.

Баҫмалағы материалдарҙың бирелеше оҡшай миңә. Әлбиттә, һандарға, рәсми сығыштарға ҙур урын бүлгән гәзиттәр менән сағыштырырға ярамайҙыр, бәлки, ләкин "Киске Өфө" битендәге материалдар күңелгә үтеп инә. Мәҡәләләрҙең теле һутлы, уҡымлы, һәр һөйләм фекерле.

Психолог менән әңгәмәләрҙе көтөп алам. Ҡайһы бер аңлай алмаған хәл-ваҡиғаларға белгес күҙлегенән сығып ҡарау ярҙам иткәне бар. Шулай уҡ мине мәҙәниәт темаһы ҡыҙыҡһындыра, социаль мәсьәләләрҙе, йәштәр тормошон, иҡтисадҡа ҡағылған мәҡәләләрҙе яратып уҡыйым. Әленән-әле яңы хикәйәләр тәҡдим итеүе менән дә ота баҫма, башынан аҙағына тиклем уҡып барам. Гәзитте йыйып туплап барыуым ныҡ оҡшаған хикәйәләрҙе бер аҙҙан тағы ла бер тапҡыр уҡып сығырға мөмкинлек бирә. Әйткәндәй, хикәйәләрҙе генә түгел, ҡышҡы оҙон кистәрҙә гәзит тупланмаһын ҡабат-ҡабат ҡарап сығам һәм үҙем өсөн һәр ваҡыт ниндәйҙер яңы әйбер табам. Тимәк, "Киске Өфө" битендә донъя күргән мәҡәләләрҙең актуаллеге ваҡыт үтһә лә юғалмай.

Яратҡан гәзитемә, журналистарға рәхмәтле уҡыусылар исеменән ижад ҡомарҙары һүнмәүен теләп ҡалам.

**Зөлфиә МЫРҘАБАЕВА.**
**Белорет ҡалаһы.**

БЫЛ АЙҘА...

**Алағарайҙы беҙ тыныс һәм көләс яҙ айы булараҡ, айырыуса тулҡынланыу менән көтәбеҙ. Тәбиғәттең күҙ алдында төрлө һүрәткә инеп, көндән-көн йәмле һәм ҡояшлы миҙгелде яҡынайтыуға булышлыҡ итеүе, сыйырсыҡ йыры, тал бөрөһө, умырзаяның ҡар аҫтынан ҡалҡып сығыуы - бөтәһе лә йәшәйешебеҙҙең яңырыуын, дауамлылығын, эҙмә-эҙлеклеген раҫлап тора бит. Миҙгелдәр алмашыныуына күптән күнегелгән булһа ла, яҙҙың һәр килеүе беҙҙе һоҡландырыуҙан, яҡтыға-яҡшыға өмөттән төңөлдөрмәй. Бәхеткә, тәбиғәттең кешелек донъяһы ығы-зығыһына ҡыҫылышы юҡ, ниндәй генә замандарҙа ла яҙ үҙенең тормошто раҫлаусы, тирә-йүнде йәшәртеүсе, күңелдәрҙе йылытыусы эшен башҡарыуҙан туҡтамай.**

# БӨТӘҺЕ ЛӘ ИМЕНЛЕК ХАҠЫНА

Тыныс ай, нурлы ай. Уның тәүге көнө үк уйын-көлкө, ҡоштар йыры менән башланып китә; быйыл уның изге байрамы - Ураҙаһы бар; Сәләмәтлек, Мәҙәниәт көндәре, Ер көнө, Йәштәр, Ҡыҙ балалар көндәре, хатта Бейеү байрамы ла бар. Ләкин ошо донъябыҙ бөгөн тыныс түгел, яҙғы күк йөҙөн ҡара һөрөм ҡаплай, йәп-йәш ғүмерҙәр шәһит китә; бомба һәм ракеталар шартлай, ул ғына етмәгән, дошман илебеҙ күгенән туҡтауһыҙ рәүештә шартлатҡыс дрондар осора, улар илдең эсенә үк үтеп инергә, Рәсәйҙең нефть эшкәртеү заводтарын, нефть базаларын, башҡа төр төп инфрастуктура объекттарын сәпкә алырға маташа. Әле бында, әле тегендә шартлауҙар, шул арҡала янғындар сығып тора.

Украина осорған пилотһыҙ аппараттар һөжүменең хронологияһынан күренеүенсә, март урталарында Түбәнге Новгородтағы "Лукойл" заводына, Орел нефть базаһына, Рязань, Ростов һәм Ленинград өлкәһе заводтарына һөжүм булды. Бәхеткә, һуңғы ике объект әллә ни зыян күрмәһә лә, башҡаларында янғын сыҡты һәм улар зыян күрҙе. Ҡыҙғанысҡа, 16 мартта пилотһыҙ аппараттар Һамар өлкәһенә лә килеп етте һәм ундағы Сызрань һәм Новокуйбышевск нефть заводтарына ут ҡапты. 17 мартта тағы ла Мәскәүгә төбәп осоролған ике пилотһыҙ аппаратты Домодедово күгендә беҙҙең Һауа оборонаһы көстәре бәреп төшөрҙө. Тәбиғи, дошман Рәсәйҙә Президент һайлауҙары осоронда айырыуса ҡоторондо, ләкин уларҙың яуыз ниәттәре ана шул аппараттары менән һауала уҡ шартлап юҡҡа сығып торасаҡ, сөнки бындай һөжүмгә ҡаршы Рәсәйҙең Һауа оборонаһы системалары көнтөн уяу һаҡта тора. Новости Рәсәй мәғлүмәт агентлығының 16 марттағы хәбәренә ҡарағанда, Рәсәй һауа һөжүменә ҡаршы оборона көстәре бер тәүлек эсендә генә лә 108 Украина дронын һәм 17 снарядын бәреп төшөрә. Рәсәй хәрби көстәре Украинаның Чернигов өлкәһендәге пилотһыҙ аппараттар йыйыу һәм әҙерләү цехын, шулай уҡ 127 районда Украина Ҡоралды көстәренең техникаһын һәм тере көстәрен утҡа тотто, тип хәбәр итә мәғлүмәт сығанаҡтары.

Ә ғөмүмән, махсус операция башланғандан алып, дошмандың 577 хәрби самолеты, 269 вертолеты, 15 681 осоусы аппараты, 486 зенит ракета комплексы һәм башҡа бик күп техникаһы юҡ ителә. Хәрби эксперт, капитан Василий Дандыкин һүҙҙәренә ҡарағанда (lenta.ru), Рәсәй һауа оборонаһы системалары Украинаның реактив пилотһыҙ осоу аппараттарын юҡ итеүҙә һөҙөмтәле көрәшә. Шул уҡ 16 мартта, мәҫәлән, Рәсәй ПВО системалары Белгород өлкәһе өҫтөндә 10 реактив снарядты бәреп төшөрә. Ошондай шарттарҙа Рәсәй һауа оборонаһы ғәскәре иңенә икеләтә яуаплылыҡ ята, сөнки бер осорға снарядһыҙ тороп ҡалған Украина һәр төрлө дрондар, шул иҫәптән видеокамера ҡуйылған FPV осоу аппараттарын, сәпкә алыу мөмкин булмаған ағас, хатта ҡатырғанан эшләнгән һәм ваҡ ҡына дрондарҙы әүҙем файҙаланыуға күсте.

Уларҙың барыһының да сәпкә эләкмәү ихтималлығы ла бар. Шуға күрә беҙҙең Һауа оборонаһы системалары ла яңыртыла, камиллаштырыла. Мәҫәлән, "Шилка-М-4", "Тунгуска" ҡоролмалары ана шундайҙар иҫәбенән. Ә инде "Тайфун-ПВО" яңы хәрби машинаһының мөм-

МИН ЯРАТҠАН ҺҮҘ

# РӘХМӘТ ӘЙТЕГЕҘ!



**Төрлө һүҙҙәр бар беҙҙең телебеҙҙә. Матурҙары, ягымлылары, күңелде төшөрә торғандары, асыуландырғаны, уйға һалғаны. Көлдөргәне, илатҡаны, күккә сөйгәне. Һүгенеү һүҙҙәре лә бар ҡулланылышта.**

Үҙем кешене кәмһеткән, ҡайғыртҡан, асыуландырған һүҙҙәрҙе әйтмәҫкә тырышам. Әйтергә тейеш булған урында иһә насарҙың, ямандың исемен әйтмәй генә еткерәм. Шуға ла бер ҡасан да әйткән һүҙем өсөн үкенгәнем булманы.

Ә шулай ҙа иң яратҡан һүҙем "рәхмәт". Был һүҙҙе шул тиклем әйтергә яратам. Әйтә торған кешеләрем дә күп. Кешеләргә генә түгел, ә үткән көнгә, иртән уянғанға, ейгән ризығыма, күргән, осраштырған кешеләремә, мине тап ошондай итеп яралтҡан әсәй-атайыма, туғандарыма, хеҙмәттәштәремә рәхмәт әйтәм. Хатта мине ул тиклем үҙ итеп бөтмәгәндәргә лә рәхмәт әйтәм. Сөнки тап уларҙың булғаны арҡаһында мин яҡшыраҡ булырға тырышам.

Был һүҙҙе әйтеүҙән бер ҡасан да ялҡмайым. Шундай матур һүҙ ул. Шундай яғымлы! Уны тик ихласлыҡ һәм ысын күңелдән генә әйтеп була. Уны асыуланып әйтеп ҡарағыҙ әле. Килеп сыҡмай, шулай бит!

Рәхмәт һүҙе яҡшылыҡҡа ҡарата белдерелгән ризалыҡ, ҡәнәғәтлек тойғоһон аңлата. Һеҙҙең дә, дуҫтар, рәхмәт әйтә торған кешеләрегеҙ, мәлдәрегеҙ күп булыуын теләйем!

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓22 март кисендә Красногорскиҙа Рәсәй тарихындағы иң ҙур теракт ҡылына: террорсылар "Крокус Сити Холл"да атыш ойоштора, һуңынан ут төртә. Ғәйепләнеүселәр ҡулға алынған. 32 йәшлек Далерджон Мирзоев, 30 йәшлек Рачабализода Саидакрами Муродали, 25 йәшлек Шәмсетдин Фәридуни һәм 19 йәшлек Мөхәммәтсобир Файзов теракт ҡылыуҙа ғәйепләнә (Рәсәй Енәйәт кодексы 205-се статьяһының 3-сө өлөшө). Уларға ғүмерлеккә иркенән мәхрүм ителеү янай. Тәфтиш комитеты мәғлүмәттәре буйынса, "Крокус Сити Холл"дағы терактта 137 кешенең ғүмере өҙөлгән, уларҙың өсәүһе - балалар. 182 кеше зыян күргән.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Рәсәйҙең Үзбәкстандағы Сауҙа вәкиллеге ҡарамағындағы республика вәкиле тураһында указға ҡул ҡуйҙы. Документ республиканың рәсми хоҡуҡи мәғлүмәт интернет-порталында баҫылған. "Аҫҡаров Азат Әфхәт улын өс йылға Рәсәй Федерацияһының Үзбәкстандағы Сауҙа вәкиллеге ҡарамағындағы Башҡортостан Республикаһы вәкиле итеп тәғәйенләргә", - тип билдәләнә Радий Хәбировтың указында.

✓Башҡортостан Рәсәйҙә тәүге пилотһыҙ осоусы аппараттар кластерын теркәне, тип хәбәр итте республика Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаров. Реестрға индереү предприятиеларға берлектәге импортты алмаштырыусы проекттарҙы тормошҡа ашырыу өсөн федераль һәм төбәк ярҙам сараларынан файҙаланырға мөмкинлек бирәсәк. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, әлеге ваҡытта Башҡортостанда туғыҙ кластер иҫәпләнә. Башинформ хәбәр итеүенсә, 2024 йылда республикала дүрт мең пилотһыҙ осоусы аппарат сығарыласаҡ.

✓Тиҙҙән Башҡортостанда юлдағы соҡорҙарҙы ремонтлау башлана. Башҡортостан Башлығы Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә шундай йөкләмә бирҙе. Радий Хәбиров фекеренсә, ҡар иреп бөткәс тә юлдағы соҡорҙарға бәйле проблема килеп тыуа, шуға күрә әле үк иҫкәртеү сараларын күрергә кәрәк. "Хәҙер соҡорҙарҙы ямау проблемаһы киҫкен торасаҡ. Юлдар асылды, яйлап ошо эште башлағыҙ", - тине республика етәксеһе. Ул шулай уҡ ҡыштан һуң республикала тәртип урынлаштырырға ҡушты.

✓ *Үткән аҙна ахырында Красногорскиҙың "Крокус Сити Холл" концерт залындағы теракт бөтөн донъя йәмәғәтселеген тетрәтте, хатта ки Рәсәйгә дуҫ булмаған илдәрҙе лә ҡайғы уртаҡлашырға мәжбүр итте.*





кинлектәре тағы ла киңерәк: радиотехник разведка иҫәбенә был система операторҙарға дрондарҙы бик тиҙ эҙәрлекләп, юҡ итеү мөмкинлеген бирә. Һауа оборонаһы сараларына радиоэлектрон көрәш комплексын (РЭБ) да эшкә ҡушыу ҡарала, уның бурысы - радиотулҡындар һәм тотҡарлыҡтар ярҙамында оператор менән дрондарҙың элемтәһен юҡҡа сығарыу. Был осоусы аппараттарҙың һөҙөмтәлелеген бермә-бер кәметәсәк, ти белгестәр.

Шулай итеп, апрелдә билдәләнеүсе Һауа һөжүменә ҡаршы оборона ғәскәрҙәре **(14)** һәм Радиоэлектрон көрәш буйынса белгестәр **(15)** көндәре айҡанлы уларҙың фиҙаҡәр һәм тынғыһыҙ хәрби бурыстары хаҡында бер кәлимә һүҙ булды был. Ошо ике подразделение ла РФ Һауа-космос көстәре ғәскәрен тулыландырып тора. Рәсәй хәрби көстәренең был төрө тыуған көнөн 12 августа билдәләһә лә, уның нигеҙен космонавтика ҡаҙаныштары тәшкил итә. **12 апрель -** Космонавтика көнө. Ғөмүмән, беҙ тыныс ай тип нарыҡлаған алағарайҙа, ысынлап та, тыныслыҡҡа, именлеккә өндәүсе көндәр байтаҡ ҡына: Халыҡтар берҙәмлеге **(2)**, Үҫеш һәм тыныслыҡ хаҡына спорт **(6)**, Донъя йәштәренең теләктәшлек, Тыныслыҡ хаҡына күп яҡлылыҡ һәм дипломатия **(24)** көндәре тап бөгөнгө көн ауазы булараҡ яңғырай һәм бөтәбеҙҙә оҙаҡ көткән именлек көнөн яҡынайта барғандай...

Был ай иҫтәлекле көндәргә бик бай булып, шуларҙың ҡайһыларын атап китергә лә була: Көлкө көнө, Халыҡ-ара ҡоштар **(1)**, Балалар китабы **(2)** көндәре, Халыҡ-ара әхлаҡлылыҡ **(5)**, Геолог, Бөтөн донъя һаулыҡ, Һәләк булған һыу аҫты диңгеҙселәренең хәтер көндәре **(7)**, Һалдатҡа яҙғы саҡырылыу **(8)** көнө, Ураҙа байрамы **(10)**, Фашист концлагерҙары тотҡондарын халыҡ-ара азат итеү **(11)**, Космонавтика **(12)**, Халыҡ-ара мәҙәниәт **(15)**, Һәйкәлдәрҙе һәм тарихи урындарҙы халыҡ-ара һаҡлау **(18)** көндәре, Рәсәй полиграфияһы, Умырзая, БР халыҡтарының милли кейеме, Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында нацистар һәм уларҙың ҡуштандары тарафынан совет халҡының күпләп юҡ ителеүе айҡанлы хәтер **(19)** көндәре, Урындағы үҙидаралыҡ, Баш бухгалтер, Бөтөн донъя ижад һәм инновация эшмәкәрлеге **(21)** көндәре, Халыҡ-ара Ер **(22)**, Китап һәм авторлыҡ хоҡуғы **(23)** көндәре, Бөтөн донъя иммунизация аҙналығы **(24)**, Ҡыҙ бала көнө **(25)**, Рәсәйҙә радиация фажиғәләре эҙемтәләрен бөтөрөүҙә ҡатнашыусылар көнө һәм шул фажиғәләр ҡорбандарының хәтер көнө **(26)**, Вахтасылар **(27)**, Химия хәүефенә ҡаршы көрәш өсөн кеше хоҡуғы, Ашығыс медицина ярҙамы хеҙмәткәрҙәре көндәре **(28)**, Халыҡ-ара бейеү **(29)**, Янғын һағы **(30)** көндәре.

**Алағарайҙа тыуғандар:**

**3 -** йырсы, М.Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры артисы, Башҡортостандың халыҡ артисы **Сәғиҙулла Байегетовҡа - 50 йәш** (1974).

**7 -** дәүләт эшмәкәре, яҙыусы, иҡтисад фәндәре кандидаты, Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан, Рәсәйҙең атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Ленин, 2-се дәрәжә Ватан һуғышы һәм "Почет билдәһе" ордендары кавалеры **Рамаҙан Өмөтбаевтың тыуыуына - 100 йыл** (1924-1997).

**8 -** күренекле ғалим, инженер-механик, физика-математика фәндәре докторы, профессор, Рәсәй Фәндәр академияһы ағза-мөхбире, Башҡортостандың атҡаҙанған халыҡ мәғарифы хеҙмәткәре, Халыҡтар дуҫлығы, "Почет билдәһе", Салауат Юлаев ордендары кавалеры **Марат Илһамовҡа - 90 йәш** (1934).

**-** хирург, Ғ.Ғ.Ҡыуатов исемендәге Республика клиник дауаханаһының бүлексә мөдире, Рәсәйҙең атҡаҙанған табибы, Салауат Юлаев ордены кавалеры **Салауат Хәсәновҡа - 60 йәш** (1964).

**11 -** педиатр, медицина фәндәре докторы, БДМУ профессоры, Башҡортостандың атҡаҙанған табибы **Айрат Моталовҡа - 70 йәш** (1954).

**13 -** йырсы, Башҡортостандың - халыҡ, Рәсәй һәм Татарстандың атҡаҙанған артисы, Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты, Халыҡтар дуҫлығы ордены кавалеры **Нәзифә Ҡадироваға - 70** йәш (1954).

**22 -** ғалим, яҙыусы, журналист, философия фәндәре кандидаты, Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан, Ҡыҙыл Йондоҙ, 2-се дәрәжә Ватан һуғышы ордендары кавалеры **Рамаҙан Ҡотошовтың тыуыуына - 100 йыл** (1924-2020).

**24 -** сәнғәт эшмәкәре, режиссер, А.Мөбәрәков исемендәге Сибай башҡорт драма театрының художество етәксеһе, Рәсәйҙең атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре **Дамир Ғәлимовҡа - 80 йәш** (1944).

**25 -** прозаик, журналист, дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре, Рәсәйҙең атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы һәм Ш.Хоҙайбирҙин исемендәге журналистар премияһы лауреаты **Ғәлим Хисамовҡа - 75 йәш** (1949).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*ДОНЪЯ ШАНДАУЫ*



# КӨСЛӨНӘН ҮСЛЕ ЯМАН

**Көслөнән ҡурҡма, үсленән ҡурҡ, тигән халыҡ. Рәсәйгә үсле аҫтыртын хаиндар ана шулай көтмәгәндә арҡаға бысаҡ ҡаҙай һәм, өҫтәүенә, бер ниндәй ғәйепһеҙ, ҡоралһыҙ тыныс халыҡҡа ябырылыусан. Был террористарҙың һыналған алымы. Тик ни өсөн гонаһһыҙ халыҡ - бала-саға, ҡатын-ҡыҙ, ҡарт-ҡоро уларҙың ҡорбаны булырға тейеш һуң?.. Был ҡылыҡтары уларҙың ҡурҡаҡлығын, ике йөҙлөлөгөн, ҡара эслеген фашлай ҙа инде.**

Үткән аҙна ахырында Красногорскиҙың "Крокус Сити Холл" концерт залындағы теракт бөтөн донъя йәмәғәтселеген тетрәтте, хатта ки бөгөнгө сәйәси шарттарҙа НАТО составындағы Рәсәйгә дуҫ булмаған илдәр һәм уларҙың етәкселәрен дә ҡайғы уртаҡлашырға һәм терророға ҡаршы нәфрәт белдерергә мәжбүр итте. "Эстония терророҙың бөтөн төрҙәренә ҡарата ла нәфрәт белдерә. "Крокус-Сити"лағы теракт үҙенең ҡанһыҙлығы менән һушты алды",- тине был илдең президенты Алар Карис. Германияның Эске эштәр министры Фазер: "Беҙ күп һанлы ғәйепһеҙ ҡорбандарҙың яҡындары, ғаиләләре менән бергә ҡайғырабыҙ". Израиль президенты Ицхак Герцог бөтөн донъя илдәрен терроризмға ҡаршы бергәләп ҡаршы торорға һәм көрәшергә саҡырҙы. НАТО-ның матбуғат секретары, Европа дипломатияһы башлығы Жозеп Боррель, Еврокомиссия етәксеһе Урсула дер Ляйен, шулай уҡ АҠШ лидерҙары һәм илселәре, башҡа бик күп илдәр ҡайғы уртаҡлашыуҙарын белдерҙе.

Беҙгә теләктәш илдәр был фажиғәне күңелдәренә айырыуса яҡын алды: Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәренең Дубай ҡалаһындағы иң бейек башняһында теракт ҡорбандары иҫтәлеге билдәһе итеп Рәсәй флагы төҫөндә уттар яҡтыртылды. Абхазия менән Никарагуа Рәсәй менән теләктәшлек белдереп, үҙ илдәрендә 24 мартта матәм көнө иғлан итте. Бразилия музыканты Фабиано беҙҙең илселек бинаһы янында ҡорбандар иҫтәлегенә бағышлап, торбала Рәсәй гимнын башҡарҙы. Эйе, дуҫ та, дошман да бәлә килгәндә һынала. АҠШ лидерының тауышы айырым-асыҡ ҡына ишетелмәһә лә, уның вице-президенты Камала Харрис теракт ҡорбандары ғаиләләренең ҡайғыһын уртаҡлашыуын белдерҙе һәм Американың был фажиғәлә Украина ҡатнашлығын раҫлаусы дәлилдәр хаҡында хәбәрсе һорауына яуап итеп, "дөйөм фекер буйынса" ИГИЛ (Рәсәйҙә тыйылған) террористик ойошмаһын ғәйепләне. Әйткәндәй, "Хезболла" менән ХАМАС палестиндар хәрәкәте "Крокус Сити Холл" терактын бер тауыштан ҡырҡа ғәйепләп сығыш яһаны. Артабан тағы ла шуныһы иғтибарҙы йәлеп итте: Аҡ йорттоң Милли хәүефһеҙлек советы вәкиле Эдриенн Уотсон был фажиғәлә Украинаның ҡатнашлығы юҡ, тип белдерҙе. Дөрөҫ, 8 мартта АҠШ-тың Рәсәйҙәге илселеге Мәскәүҙә теракт ихтималлығы хаҡында хәбәр итә, ләкин, РФ Йәмәғәт палатаһының комиссия рәйесе Владимир Рогов әйтеүенсә, аныҡ ҡына бер ниндәй ҙә мәғлүмәте булмағанлыҡтан, был сигнал йәмәғәтселектә ҡурҡыу тыуҙырыуға маташыу тип ҡабул ителә, тип яҙа АиФ.ру сайты. Үҙ сиратында Рәсәйҙең АҠШ-тағы илсеһе Анатолий Антонов әйтеүенсә, Вашингтондағы беҙҙең илселек был турала бер ниндәй ҙә хәбәр алмаған булып сыҡты. Ошо нигеҙҙә Антонов "Новости Рәсәй агентлығы"на интервьюһында, терроризмға ҡаршы көрәш Рәсәй менән АҠШ-тың төп хеҙмәттәшлек өлкәһе булыуы, ләкин Красногорск фажиғәһенән һуң был мөнәсәбәттәрҙең юҡҡа сығыу ихтималлығы хаҡында белдерҙе.

Дөрөҫ, терактың башҡарыусылары тиҙ арала тотолған хәлдә лә был мәсьәләгә асыҡлыҡ индереп бөтмәй әле, был ҡанһыҙ ғәмәлде бойомға ашырыуҙың бойороусылары кемдәр һуң? РФ Эске эштәр министрлығының рәсми вәкиле Мария Захарова ошо айҡанлы Украина президенты Зеленскийҙың терактта Рәсәйҙең үҙен ғәйепле итеп күрһәтергә маташыуын башҡа һыйғыһыҙ уйҙырма тип ғәйепләне һәм "Бурҙың бүрке яна",- тип ҡапма-ҡаршы ишара яһаны.

... Ә тап ошо ваҡытта үҙ күләгәһенән үҙе ҡурҡып, бүрәнә аша бүре күреп өйрәнгән "ут күрше" Польшаға кеше ҡайғыһы - төштән һуң булып сыҡты. Уның президенты Анджей Дуда тырышып-тырмашып Белоруссия менән сик һыҙығындағы армияһын көсәйтеү яйын ҡарай һәм көн һайын Рәсәйҙең НАТО-ға һөжүмен төшөндә күреп, һаташа, имеш. Әйткәндәй, Франция президенты Макрон да, байтаҡтан бирле хәҙер шул бер үк бәйләнсек сиргә тарыған һәм Украинаға ғәскәр давайлап, евроәшнәләренең башын ҡатыра, ти; Рәсәй еңмәһен өсөн "Франция барыһын да эшләйәсәк", тип күкрәк һуға икән, етмәһә. Тик бына ошо юҫыҡта уны "еңел аҡыллыҡта" ғәйепләүсе ватандаштары менән һөйләште микән ул?..

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Дәүләт Думаһы депутаттары барлыҡ белем биреү учреждениеларына флаг элеп ҡуйыу бурысын йөкмәтте. Документҡа ярашлы, 2024 йылдың сентябренән балалар баҡсалары, мәктәптәр, колледждар, техникумдар һәм юғары уҡыу йорттарында йәки уларҙың биләмәләрендә Рәсәй Федерацияһының Дәүләт флагы даими эленеп торорға тейеш. БыҒаса Дәүләт флагын даими урынлаштырыу дөйөм белем биреү мәктәптәренә генә ҡағыла ине.

✓1 апрелдән 31 октябргә тиклем Башҡортостан пенсионерҙары ҡала яны тимер юл транспортында 50 процент ташлама менән йөрөргә мөмкин. Был хаҡта республиканың Транспорт һәм юл хужалығы министрлығы хәбәр итә. Ташлама менән файҙаланыу өсөн билет һатып алған ваҡытта паспорт менән граждандың льготалы статусын раҫлаған документты (пенсия танытмаһы, хеҙмәт ветераны танытмаһы, хәрби хеҙмәт ветераны танытмаһы һәм башҡалар) күрһәтергә кәрәк.

✓Башҡортостандың панкратион буйынса йыйылма командаһы төрлө дәрәжәләге 66 миҙал яулап, Волга буйы федераль округы чемпионатының һәм беренселегенең дөйөм команда зачетында еңеүсе булды. Башҡортостан спортсыларының еңеүе тураһында республиканың спорт министры Руслан Хәбибов хәбәр итте. "Яҡташтарыбыҙҙың йәмғеһе 24 алтын, 16 көмөш һәм 26 бронза миҙалы бар. Ә 66 спортсы Рәсәй беренселегендә республикабыҙ исеменән сығыш яһаясаҡ", - тип яҙҙы Руслан Хәбибов үҙенең телеграм-каналында. Панкратион буйынса округ турниры Ырымбурҙа уҙҙы. Унда 400-ҙән ашыу спортсы ҡатнашты.

✓Рәсәйҙә Берҙәм дәүләт имтиханын ваҡытынан алда биреү осоро башлана, тип хәбәр итә Мәғариф министрлығы. 22 апрелгә тиклем 3000-гә яҡын уҡыусы һынау тотасаҡ. 26 мартта - рус теленән, 29 мартта - база һәм профилле кимәлдәге математиканан, 2 апрелдә - биология, физика һәм сит телдәрҙән (яҙма өлөш), 5 апрелдә - сит телдәрҙән (телдән), 9 апрелдә - йәмғиәтте өйрәнеү һәм информатиканан, 12 апрелдә тарихтан һәм химиянан. 15 апрелдән 22-нә тиклем - барлыҡ предметтар өсөн резерв көндәр. Популяр дисциплиналар иҫәбендә - рус теле, база һәм профилле кимәлдәге математика, йәмғиәтте өйрәнеү, биология һәм инглиз теле.

***✓ Владимир Савичев иҫәпләүенсә, бөгөн конкуренция хәрби хәрәкәттә генә түгел, ә иҡтисадта ла, идеялар кимәлендә лә бара. Йәмғиәт илгә көслө иҡтисад, көслө армия кәрәклеген аңлай.***



ҠЫҪҠАСА

# ТЕЛЕФОНҺЫҘ ҒЫНА...

**Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары "Мәғариф тураһында" төбәк законына үҙгәрештәр индерергә йыйына. Был федераль ҡануниәттәге үҙгәрештәргә ярашлы эшләнә. Уға ярашлы, уҡыусыларға дәрестәрҙә телефон ҡулланыу тыйыла, тип хәбәр итә парламенттың матбуғат хеҙмәте.** Хәҙер мәктәп директорҙары дәрестә телефон ҡулланыуҙы тыйыуҙы белем биреү ойошмаһында үҙендә тотоу ҡағыҙәләренә индерә ала. Мәктәпкә мобиль ҡоролма алып килеү тыйылмай, тәнәфестә уның менән ҡулланырға ярайсаҡ. Класта иһә телефонды уҡытыусыға тапшырырға йәки потрфелгә һалып ҡуйырға кәңәш ителә. Көтөлмәгән хәлдәрҙә телефон ҡулланыу мөмкин буласаҡ. Башҡортостан ҡануниәтселәренең күп кенә тәҡдимдәре Дәүләт Думаһы тарафынан иҫәпкә алынған, мәҫәлән, баланың беренсе типтағы шәкәр диабеты һәм уға помпа ҡуйылған икән, ул телефон ярҙамында шәкәр кимәлен үлсәй ала. Шулай уҡ эпилепсия менән сирләүселәр ҙә телефон ҡуллана ала. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, үткән йылдың аҙағында Рәсәй Президенты смартфон һәм сим-картаһы булған башҡа гаджеттарҙы дәрес барышында ҡулланыуҙы тыйған федераль ҡанунға ҡул ҡуйҙы.

✓ **Рәсәйҙең Һаулыҡ һаҡлау министрлығы төбәктәрҙән килгән тәҡдимдәр нигеҙендә "Ауыл табибы" һәм "Ауыл фельдшеры" программалары буйынса аҡса алырға хоҡуҡлы медицина хеҙмәткәрҙәре вазифаларының яңы исемлеген раҫланы.** Яңыртылған исемлектә аллерголог-иммунолог, балалар онколог-гематологы, табип-остеопат, йөрәк-ҡан тамырҙары хирургы, стоматолог-ортопед, торакаль хирург, физик һәм реабилитация медицинаһы табибы, эпидемиолог бар. Табип амбулаторияларының, шулай уҡ дөйөм табип практикаһы (ғаилә медицинаһы) үҙәктәренең акушерҙары, шәфҡәт туташтары ла түләү алырға тейеш. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, "Ауыл табибы" программаһы 2012 йылдан эшләй һәм ауылдарға, бәләкәй ҡалаларға күсеп ҡайтҡан табиптарға аҡса түләүҙе күҙ уңында тота. Әйткәндәй, улар дауаханала биш йыл эшләргә бурыслы. Фельдшерҙар, акушерҙар һәм шәфҡәт туташтары өсөн "Ауыл фельдшеры" программаһы 2018 йылдан ғәмәлдә. Программа сиктәрендә табиптарға - 1-2 миллион һум, урта медицина персоналына иһә 0,5-1 миллион һум матди ярҙам күрһәтелә.

✓ **Башҡортостан буйынса Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы бинаһында 2024 йылдың ташҡын һәм янғын хәүефе миҙгелендә ғәҙәттән тыш хәлдәрҙе иҫкәртеү буйынса ведомство-ара эшсе төркөм ултырышы үтте.** Башгидрометтың яҡынса фаразына ярашлы, быйыл ташҡындың уртасанан юғарыраҡ булыуы көтөлә. Ташҡынға әҙерлек ваҡиғалар үҫешенең иң насар вариантын иҫәпкә алып барыла. Һыу баҫыу зонаһында 86 мендән ашыу кеше йәшәгән 44 муниципалитеттә 313-тән ашыу тораҡ пункт булыуы ихтимал. Башҡортостанда 62 хәүефле участка билдәләнгән, шартлатыу эштәрен үткәреүгә килешеүҙәр төҙөлгән. Тәүге шартлау эштәре 18 марттан башланды ла инде. Ташҡын осоронда 276 ваҡытлыса урынлаштырыу пункты әҙерләнгән, тип хәбәр иттеләр ведомствоның матбуғат хеҙмәтенән.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# БАҺАЛАР ЫҢҒАЙ



**Политолог Сергей Семенов "Рәсәй президентын һайлау - 2024" йәмәғәт матбуғат үҙәгендә тауыш биреүҙең яңы форматын баһаланы. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, дәүләт башлығы вазифаһына кандидаттар өсөн тауыш биреү беренсе тапҡыр өс көн барҙы. Эксперт фекеренсә, бындай формат тәү сиратта һайлаусылар өсөн уңайлы.**

"Миненсә, яңы форма үҙен аҡланы. Сөнки ул кешеләргә үҙҙәре өсөн ҡулай ваҡытты һайларға мөмкинлек бирә, тимәк, был һайлаусыларға ҡарата ихтирам күрһәтеп, халыҡтың әүҙемлеген арттырырға тейеш. Дәүләт өсөн һәр кемдең тауышы, ваҡыты һәм граждандыҡ позицияһы бик мөһим", - тип ышана Сергей Семенов.

Башҡортостан дәүләт хеҙмәте һәм идара итеү академияһы ректоры Данияр Абдрахманов "Рәсәй президентын һайлау-2024" йәмәғәт матбуғат үҙәге эше барышында йәштәрҙең сәйәсәткә битараф булыуы тураһында мифты кире ҡаҡты. "Коронавирус ваҡытында уҡ беҙҙә бик күп ирекмәндәр һәм йәштәр йәмәғәт ойошмалары барлыҡҡа килде. Йәштәребеҙ күңеленең бер өлөшөн башҡаларға бирергә әҙер. Егет-ҡыҙҙар бөгөн беҙгә йәмғиәткә, илгә берҙәм булырға кәрәклеген аңлай. Улар Рәсәйҙең киләсәге менән ҡыҙыҡһына, фекерҙәрҙе тыңларға һәм әүҙем эшләргә әҙер", - тине эксперт.

Рәсәй политологтары йәмғиәтенең башҡарма директоры, Ломоносов исемендәге Мәскәү дәүләт университеты профессоры Игорь Кузнецов Башҡортостанды Рәсәй Президентын һайлауҙа әүҙемлеге буйынса илдең өлгөлө төбәктәренең береһе икәнен әйтте. "Республика ошо йәһәттән ныҡ айырылып тора, һайлаусылар участкаларға ғаиләһе менән бергәләп бара", - тине эксперт Өфөнөң йәмәғәт матбуғат үҙәгенә тура бәйләнеш ваҡытында. Уның фекеренсә, 2024 йылғы һайлау кампанияһы дуҫ булмаған илдәр яғынан бығаса күрелмәгән мәғлүмәт баҫымы һәм провокациялар күҙлегенән уникаль булыуын билдәләне. "Был Рәсәй йәмғиәте өсөн ысын стресс-тест. Халыҡ-ара баҫым, санкциялар һәм махсус хәрби операция үткәреү шарттарында процесс ысын сағырыуға әүерелде. Әммә Рәсәйҙең уны уңышлы үтәсәгенә шик юҡ. Сөнки был илдең алдағы 6 йылға йүнәлешен билдәләй", - тине ул.

# МАШИНАҢ ТӘРТИПТӘМЕ?



**Башҡортостанда ЮХХДИ яңы оператив-профилактик сара башланы. Ул "Дәүләт теркәүе билдәһе" тип атала һәм ялған номерлы, эҙләүҙә булған машиналар менән идара итеү, шулай уҡ ваҡыты сыҡҡан теркәү эшмәкәрлеге менән бәйле административ хоҡуҡ боҙоуҙарҙы иҫкәртеүгә арналған.**

"Дәүләт теркәүе билдәһе яҡшы күренергә тейеш. Бужауы юйылмаһын, бысраҡ, саң сәсрәүҙән уҡып булмаслыҡ хәлгә килмәүен һәр кем күҙәтеп торорға бурыслы. Бының өсөн иҫкәртеү, йәки 500 һум күләмендә административ штраф ҡаралған. ГОСТ буйынса эшләнмәгән билдәләр ҡуйылған, номеры бөтөнләй булмаған автомобилдәр менән идара итеүгә штраф күләме 5 мең һум. Шулай уҡ водителде 1-3 айға машина менән идара итеү хоҡуғынан мәхрүм итәсәктәр. Ошондай уҡ яза белеп тә ялған номер менән йөрөгән өсөн бирелә - алты айҙан бер йылға тиклем", - тип белдерҙе Башҡортостандың төп дәүләт инспекторы Владимир Севастьянов.

Машина тейешле тәртиптә теркәлмәгән икән, 500 һумдан 800 һумға тиклем административ штраф ҡаралған. Ҡабаттан ҡанун боҙған өсөн штраф 5 мең һум йәки 1 айҙан 3 айға тиклем водитель танытмаһынан мәхрүм ителә.

# ЯҢЫ ТУЛҠЫН КӨТӨЛМӘЙМЕ?



**БР Фәндәр академияһының Стратегик тикшеренеүҙәр институты директоры, сәйәсәт фәндәре кандидаты Владимир Савичев фекеренсә, Владимир Путиндың һайлауҙарҙа енеүенән һуң мобилизацияның яңы тулҡыны булмаясаҡ.**

"Бының кәрәге лә юҡ, сөнки ил Львовҡа тиклем барып етеүҙе маҡсат итеп ҡуймай, беҙҙең бурыс бөтөнләй икенсе. Беҙҙең менән сәйәси яҡтан килешә белергә кәрәклеге, әгәр ҙә беҙҙең менән һуғышырға теләйһегеҙ икән, барыбер еңелеүегеҙ хаҡында бөтөн донъяны ышандырырға тейешбеҙ. Быны миллионлы ғәскәрҙәрҙә бер-береһенә ҡаршы ҡуйып та дәлилләп була, әммә беҙ бөгөн эшләгәнсә лә күрһәтеп була. Төп бурыс - юғалтыуҙар аҙыраҡ булырға тейеш, шуға ла мобилизацияның яңы тулҡыны кәрәкмәйәсәк", - тип билдәләне сәйәсмән.

Владимир Савичев иҫәпләүенсә, бөгөн конкуренция хәрби хәрәкәттә генә түгел, ә иҡтисадта ла, идеялар кимәлендә лә бара. Йәмғиәт илгә көслө иҡтисад, көслө армия кәрәклеген аңлай, шуға ла улар лозунгыларға ҡарап түгел, ә ысынбарлыҡта башҡарылған эштәргә ҡарап тауыш бирҙе.

# ҮҘЕБЕҘ ЕТЕШТЕРӘБЕҘ!



**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Өфөлә "РВ-1 радиоэлектрон технопаркы" төҙөлөшөнә старт бирҙе.**

Унда юғары технологиялы һәм инновацион продукция: пилотһыҙ осоу аппараттары (БПЛА) һәм уларҙың комплекттары, баҫма электроника: сенсорҙар, платалар, датчиктар етештерелә башлай. Проектҡа инвестициялар күләме - 1,2 миллиард һум, шуның 504 миллионын федераль ҡаҙнанан субсидия ҡаплай. Электрон сәнәғәт өлкәһендәге технопарк ҡаланың Киров районында 30 мең квадрат метрлыҡ участкала төҙөлә, потенциаль резиденттар булып Өфө, Минск һәм Санкт-Петербург компаниялары сығыш яһай, улар менән тейешле килешеүҙәр төҙөлгән дә инде. 2030 йылға республика властары технопаркта 370 эш урыны булдырылыр тип көтә, ә радиоэлектрон сәнәғәт продукцияһын тулайым сығарыу 3,6 миллиард һумдан ашып китәсәк.

Яңы технопарктың идара итеү компанияһының генераль директоры Рөстәм Дәүләтов һөйләүенсә, төп резиденттар - элемтә системалары етештереүгә махсуслашҡан "Астраком" компанияһы, "Башҡортостан Республикаһының мәғлүмәт-коммуникация технологиялары үҙәге" предприятиеһы. "Пилотһыҙ авиацияның киләсәк икәнен яҡшы аңлайбыҙ. Бөгөн беҙ сәнәғәт үҫешенең яңы битен асабыҙ. Сентябрҙә уҡ бында ике етештереү бинаһы торорға тейеш", - тип билдәләне Радий Хәбиров.

## Б А Ш   Ҡ А Л А   Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфө хакимиәте башлығы мәктәптә бушлай туҡланыуҙың яңы хаҡтарын раҫланы. Ҡарар Өфө мэрияһы сайтында баҫылған. Башланғыс класс уҡыусылары өсөн бушлай иртәнге аш - 69,57 һумдан да кәм түгел, төшкө аш хаҡы - 78,02 һум, төшкө аш 45 һум, икенде ашы 45 һум тора. Өфө хакимиәте 2022 йылдың февралендәге ҡарарында башланғыс класс уҡыусылары өсөн иртәнге аш хаҡы - 64,4 һум, төшкө аш - 72,5 һум, икенде ашы 45 һум тәшкил иткән. 5-11-се класс уҡыусыларының туҡланыу хаҡы үҙгәрмәгән: иртәнге аш - 60 һумдан кәм түгел, төшкө аш - 70 һум, икенде ашы - 45 һум.

✓Башҡортостан спортсыһы Александра Тарасова 21-23 йәшлектәр араһында ауыр атлетика буйынса Беларусь Республикаһы беренселегендә еңеү яуланы. Был хаҡта республиканың спорт министры Руслан Хәбибов хәбәр итте. Александра Тарасова Рәсәй йыйылма командаһы составында сығыш яһай. Яҡташыбыҙ 59 килограмм ауырлыҡ категорияһында еңеүсе булды. Бынан алда Башинформ Белорет спортсыһы Александра Иманғолованың Ырымбурҙа 17 йәшкә тиклемгә егеттәр һәм ҡыҙҙар араһында ауыр атлетика буйынса Рәсәй беренселегендә еңеүе тураһында хәбәр иткәйне.

✓Өфө балаларын "Төп-Модель Өфө-2024" республика дефиле турнирында ҡатнашырға саҡыралар. Сараны ойоштороусы Айгөл Үтәғәнова хәбәр итеүенсә, турнир 24 апрелдә "Алтын һыуһар" матурлыҡ һәм һаулыҡ индустрияһы конкурсы сиктәрендә уҙғарыла. Ике йәш категорияһындағы малайҙар һәм ҡыҙҙар саҡырыла: 5-10 йәш,11-17 йәш.Ике йәш категорияһында ла еңеү яулаған ҡыҙҙарға 10 һәм 50 мең һумлыҡ аҡсалата бүләктәр тапшырыла. Ә малайҙарға - фотосессия сертификаттары. Баш ҡаланың 450 йыллығына арналған сара Өфө хакимиәте булышлығында үткәрелә.

✓Башҡортостан юлдаш телеканалында тура эфирҙа "Рәхмәт" акцияһының суперпризлары уйнатылды. Уйын йомғаҡтары түбәндәгеһе: Башҡортостан шифаханаһына сертификат - БА-133339 билеты, Сочиҙа ғаилә менән ял итеү сертификаты - БА-113814 билеты, "Нива" автомобиле - АШ-130108 һәм АС-022322 билеттары, "Novaland" торлаҡ комплексындағы фатир - АФ-021333 билеты. Шулай уҡ өҫтәмә бүләктәр ҙә уйнатылды: Сочиға бер юллама, республика шифаханаларында ял һәм башҡа бүләктәр.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ӨФӨ - ТӘРТИПТӘ!



# СПОРТ ФОРУМЫ БЕҘҘӘ!

**Республика Башлығы Радий Хәбиров үҙенең телеграм-каналында 2024 йылдың көҙөндә баш ҡалабыҙҙа тағы ла бер ҙур халыҡ-ара спорт сарайы уҙғарыласағы хаҡында хәбәр итте:**

- Хәҙер рәсми рәүештә "Рәсәй - спорт державаһы" тигән халыҡ-ара форум быйыл Башҡортостанда үтәсәк. Рәсәй Президенты ошо хаҡта күрһәтмә бирҙе. Илебеҙҙең спорт өлкәһендәге ошо бик ҙур сараһын Өфө ҡалаһының 450 йыллығы айҡанлы тап беҙҙең ҡалала уҙғарыу тураһында республика тәҡдим иткәйне. Беҙҙе хуплағаны һәм хөрмәт күрһәткәне өсөн Владимир Владимирович Путинға рәхмәт белдерәм, - тине республика етәксеһе.

Ил Президентының бойороғона ярашлы, Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәтенә форумды ойоштороуҙы тәьмин итеү бурысы йөкмәтелде. Башҡортостан хөкүмәтенә "Рәсәй - спорт державаһы" халыҡ-ара спорт форумына әҙерләнеүҙе һәм уны үткәреүҙе тәьмин итеү, шул иҫәптән республика бюджетынан ошо маҡсат өсөн сығымдарҙы финанслау буйынса саралар күрергә тәҡдим ителде.

# ИҪКЕ КҮПЕР... ЯҢЫРА

**Баш ҡалабыҙҙа "Хәүефһеҙ сифатлы юлдар" милли проекты сиктәрендә ғәмәлгә ашырылған иң ҙур проекттарҙың береһе - Өфө (Ҡариҙел) йылғаһы аша һалынған Шакша күперенә капиталь ремонт эшләү.**

Төҙөлөш-монтаж эштәре һөҙөмтәһендә ныҡ иҫкергән күперҙең айырым балкаларҙан торған ҡоролмалары урынына айырым киҫәктәргә бүленмәгән тотош металл конструкциялар ҡуйыласаҡ, терәк өлөштәре, деформация йөйҙәре һәм күпер бағаналарының конструктив элементтары ремонтланасаҡ. Заказ биреүсенең мәғлүмәттәре буйынса, 2024 йылдың 18 мартына беренсе сиратҡа ҡараған эштәрҙән күперҙең уң яҡ йүнәлештәге тороҡтары алып ташланған, беренсе таяуҙан дүртенсеһенә тиклем 24 м оҙонлоғондағы аҫылмалы тораҡ ҡоролмалары йыйылып бөткән. Хәҙерге ваҡытта Өфө моторҙар төҙөү заводында эстакада өлөшөнөң тороҡ ҡоролмаларының металл конструкциялары эрелән йыйыу, таяуҙарҙы (бағаналарҙы) үҙгәртеп ҡороу эштәре бара. Март айы аҙағына уң яҡ йүнәлештәге тороҡтарҙың металл конструкцияларын эрелән йыйыу тамамланасаҡ. 2024 йылдың июнь айында күпер аша автомобилдәр хәрәкәтен һул яҡ йүнәлештән унға күсереү күҙаллана. Муниципаль контрактҡа ярашлы, төҙөлөш-монтаж эштәре 2025 йылдың февраленә тулыһынса тамамланырға тейеш.

ӘЙТКӘНДӘЙ...

# САЛАУАТ ЮЛАЕВҠА АРНАП

**Быйыл башҡорт халҡының милли геройы, шағир-импровизатор Салауат Юлаевтың 270 йыллыҡ юбилейын билдәләйбеҙ. Үҙенең мәшһүр улын халыҡ онотмай һәм уның образы аша йәш быуында илһөйәрлек, ирек һөйөүсәнлек тәрбиәләй, тыуған ил, туған тәбиғәт, туған тел матурлығын күрә белеү һәм яратыу, уларҙы һаҡлау тойғоһон һеңдерә. Салауат Юлаевҡа, уның тормошона һәм ижадына арналған конкурс һәм башҡа төрлө саралар йыл дауамында барасаҡ. Ошондай проекттарҙың береһе Башҡортостан Милли музейы тарафынан ойошторолған "Салауат - мәңге батыр" конкурсы. Уның хаҡында музейҙың этнография бүлеге мөдире Лилиә Барлыбаева һөйләй.**

- 160 йыллыҡ тарихҡа эйә булған Башҡортостан Милли музейы төбәктең бай тарихын һаҡлаусы һәм уны быуындан-быуынға еткереүҙә ҙур роль уйнаған мәҙәни усаҡ. Унда төбәктең бөйөк шәхестәре тураһында күп мәғлүмәт һаҡлана. Музейҙа шулай уҡ Салауат Юлаевҡа арналған айырым экспозиция ла эшләй, уға арналған төрлө саралар ҙа ойоштоа. Шундай мөһим сараларҙың береһе - Салауат Юлаев образын хәҙерге заман сәнғәтендә сағылдырыуға йүнәлтелгән "Салауат - мәңге батыр" Төбәк-ара конкурсы. Ул һынлы сәнғәт өлкәһендә ижад иткән таланттарҙы асыуға, уларҙың ижади эшмәкәрлеген дәртләндереүгә, эштәрен киң йәмәғәтселеккә күрһәтеүгә, милли герой образына художестволы интерпретация биреүгә йүнәлтелгән.

Конкурста милли батырыбыҙ образын һынлы сәнғәттә, графика, скульптура, авторлыҡ һәм биҙәү-ҡулланма техникаһында сағылдырыуға йүнәлтелгән проектта Рәсәйҙең төрлө төбәгендә йәшәгән оҫталар ҡатнаша ала. Йәш сикләүе 16 йәштән алып.

Ниндәй йүнәлештә ижад иткән оҫталар конкурсҡа үҙ эштәрен тәҡдим итә ала һәм эштәр ҡасанға тиклем ҡабул ителә?

Конкурста биҙәү-ғәмәли сәнғәте (кейеҙ, гобелен, аппликация һ.б.), скульптура сәнғәте (әүәләү, әкиәти һәм фантастик скульптура формалары, пластилиндан эшләү, скульптура портреты, рельеф һ.б.), һынлы сәнғәт һәм графика (ҡәләм, һөрмә, күмер, гуашь, майлы буяу, акрил һ.б.) һәм сувенир әйберҙәр эшләү кеүек бер нисә номинация ҡаралған. Һәр ҡатнашыусы, теләге буйынса, 1-5 эш тәҡдим итә ала. Конкурсҡа заявканы ағымдағы йылдың 8 апреленә тиклем бирергә мөмкин, ә эштәрҙе ҡабул итеүҙең һуңғы көнө - 26 май.

"Салауат - мәңге батыр" конкурсына ебәрелгән эштәрҙе билдәле сәнғәт һәм ижад әһелдәренән торған жюри баһаласаҡ. Бөтәһе 13 иң яҡшы эш һайлап алынасаҡ. Конкурс буйынса йомғаҡлау күргәҙмәһен асыу һәм еңеүселәрҙе бүләкләү тантанаһы Башҡортостандың Милли музейында 2024 йылдың 11 июнендә уҙасаҡ.

Тарихыбыҙға битараф булмаған, ижад яратҡан һәр кемде конкурста ҡатнашырға саҡырабыҙ. Милли геройыбыҙ тураһында хәтирәләрҙе бергәләп һаҡлайыҡ.

**Гөлназ МАНАПОВА.**

ҠЫҪҠАСА

# ҮҘЕБЕҘ ТАҘАРТАЙЫҠ!

**Өфөлә ҡаланы санитар таҙартыу, төҙөкләндереү һәм йәшелләндереү буйынса яҙғы айлыҡ 1 апрелдән башлана. Ул 26 майға тиклем дауам итәсәк. Дөйөм ҡала өмәләре 6, 10 һәм 27 апрель көндәрендә уҙғарыла.** Айлыҡта йәшелләндереү, юлдар, тротуарҙар, ҡоймалар, кәртәләр, парапеттар, биналарҙың алғы күренештәрен яңыртып төҙөү, юлдарҙың, урамдарҙың кешеләр йөрөгән өлөшөн, кварталдар араһындағы территорияларҙы йыйыштырыу, гараж кооперативтары, баҡсасылыҡ ширҡәттәре, йырын битләүҙәрен, йылға һәм күлдәрҙең ярҙарын сүп-сарҙан таҙартыу, ҡала сиктәрендәге шишмәләрҙе төҙөкләндереү буйынса эштәр алып барыласаҡ. Предприятие, ойошма һәм учреждениеларҙың етәкселегенә, милек төрө ниндәй булыуға ҡарамаҫтан, биналарҙың алғы күренештәрен һәм яҡын-тирәһен тейешенсә төҙөкләндерергә тәҡдим ителгән. Шәмбе өмәләрен үткәргән саҡта ҡаланың ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтары полигоны бөтә предприятие һәм ойошмаларҙың сүп-сарын бушлай ҡабул итеүҙе тәьмин итәсәк. Муниципалитет ҡала халҡын да төҙөкләндереү, урамдарҙы һәм йорт ихаталарын санитар таҙартыуҙан ситтә ҡалмаҫҡа, яҙғы эштәрҙә ҡатнашырға саҡыра.

✔ **Өфөләге "Агрокомплекс-2024" халыҡ-ара махсуслаштырылған күргәҙмә барышында Саҡмағош районында "Сәрмәсән" көшсөлөк фабрикаһының яңы етештереү корпусы эшенә старт бирелде.** 2023 йылда инвестор бөлгөнлөккә төшкән предприятиены тергеҙеүгә өлгәште. Предприятие директоры Булат Рафиҡов билдәләүенсә, хәләл ҡош ите етештереү күләме йылына 480 тоннаға тиклем артасаҡ. 70 яңы эш урыны булдырыласаҡ. "Күргәҙмә барышында Бүздәк районында тағы бер агрокласс астыҡ. Ул Бүздәк ауылының 1-се мәктәбендә райондың "Авилат" агрокомплексы булышлығында барлыҡҡа килде. Был мәктәптә - 617 уҡыусы, күптәре тормошон тап ауыл хужалығы менән бәйләргә теләй. Башҡортостандың 39 районында 126 агрокласс бар. Күреүебеҙсә, агросәнәғәт комплексының киләсәге өмөтлө. Ә быйылғы ҡаҙаныштарҙы "Өфө ЭКСПО" күргәҙмә комплексында 29 мартҡа тиклем баһаларға мөмкин", - тип яҙа Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров социаль селтәрҙәге сәхифәһендә.

✔ **Рәсәйҙә яңынан грипп һәм ОРВИ менән сирләү осраҡтары көсәйә. Белгестәр һүҙенә ҡарағанда, һуңғы алты аҙнала В грипп вирусы өлөшө арта, ә А (H3N2) төрөнөң өлөшө кәмей бара. В грипп вирусының бер аҙ әүҙемләшеүе А грипп төрө эпидемияһының кәмеү осорона тап килә.** Ковид иһә һаман да беҙҙең менән хушлашырға ашыҡмай: марттың тәүге аҙнаһында ғына ла 23 мең осраҡ теркәлгән. Шулар араһында күбеһе "омикрон"дың йоғошло варианты өҫтөнлөк итә. Тажзәхмәт ОРВИ менән грипп һымаҡ уҡ миҙгел ауырыуы булып ҡала. Етмәһә, бер юлы бер нисә төр инфекция менән зарарланыусылар теркәлә. Әлеге көндә күпселек уртаса ауыр төр менән сирләй ә ауыр осраҡтар һирәгерәк осрай. Бөтөн ораҡтарҙа ла сир еңелерәк үтә. Тын ҡыҫылыу, еҫ-тәм юғалыу, биҙгәк кеүек һәм башҡа билдәләр һирәк. Сирлеләрҙә тын юлы инфекцияһы билдәләре: хәлһеҙлек, баш ауырыу, тымау, сөскөрөү, тамаҡ ауыртыу кеүек билдәләр күҙәтелә. Һәм шуныһы бар: күпселектең сире оҙаҡҡараҡ һуҙыла һәм хәле яҡшырҙы тигәндә, сир билдәләре яңынан ҡайта.

## ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклеге онотмағыҙ.**

### Ҡауын

Ҡауын шәкәргә бай, ул ҡарбузға ҡарағанда файҙалыраҡ һәм тимер күп. Дауаланғанда бешкәс йыйылған емешен файҙаланалар. Ҡауынды һимереү, холестерин һәм май алмашыныуы боҙолғанда ҡулланырға була. Уның һуты ағыуланғанда, мочекислый диатез, ашҡаҙан-эсәк юлы ауырыуҙары, артрит һәм шәкәр диабеты булғанда файҙалы.

❖ Быуындар һыҙлағанда иртәле-кисле 3-әр телем ҡауын ашарға. Бер аҙнанан еңеллек килә.

❖ Диатез, артрит, бөйөр ауырыуҙары, үт сығарыу юлдарының хәрәкәтләнеү әүҙемлеге боҙолғанда, эс ҡатҡанда көн дауамында 1,5-2 кг яңы ҡауын йомшағын (бер юлы 300-400 грамм) ашарға. Ә эс ҡатҡанда - 500-әр грамм.

❖ Радикулиттан көнөнә 3 тапҡыр 1/3 стакан ҡауын һуты эсергә. Һыҙланыу бер тәүлектә баҫылыуы ихтимал.

❖ Аллергиянан ваннаға 1 сткан ҡауын һуты ҡойоп, йәки емеш киҫәктәрен һалып ятырға. 7 тапҡыр шулай дауаланырға.

❖ Һытҡыларҙы бөтөрөү өсөн бит тиреһен тирләтеп, ҡауын һутын һөртөргә. Бер аҙнанан һытҡылар юҡҡа сыға, бит тиреһенең төҫө яҡшыра.

❖ Тән күгәргәндә, янғанда ауыртҡан урынға ҡауын ҡабығын эс яғы менән ҡапларға. Тирене яндырған осраҡта күперткене һытырға, һыуыҡ һыу менән сайырға һәм шунан ғына ҡауын ҡабығын ҡапларға кәрәк.

### Ҡыҙыл көртмәлe

❖ Цистит, нефрит, шешенеүҙәрҙән 1 ҡалаҡ ваҡланған ҡыҙыл көртмәле япрағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, йә ауыҙын ябып 1 сәғәт, йә термоста 30 минут төнәтергә. Шунан һөҙөргә һәм көнөнә 2 тапҡыр ашарҙан 30 минут алда яртышар стакан эсергә. Тағы бер ысулы бар: 1 ҡалаҡ киптереп ваҡланған ҡыҙыл көртмәле япрағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, ҡапҡас ябып 30 минут төнәтергә. Шунан 5 минут утта ҡайнатырға һәм һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр 3-әр ҡалаҡ эсергә.

❖ Тире яман шешенән көн һайын 1-2 тапҡыр ярты йәки бер стакан ҡыҙыл көртмәле ашарға.

**Гәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✔ *Хәҙер йәш хеҙмәткәр тигән категория индерелә. Беренсе тапҡыр эшкә урынлашыусы ҡыҙҙар һәм үҫмерҙәр уға ҡарай. Улар ҙа тәүге өс йылда эш биреүсенән һәм үҙе йәшәгән төбәктән ярҙам һорай ала.*



ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

**Кәлмәргән, балыҡсы һары**
**(Скопа)**



Был ҡош менән ыласын һымаҡтар отрядының кәлмәргәндәр ғаиләһенә ҡараған ҡоштар төркөмөн башлап ебәрәбеҙ. Кәлмәргән тышҡы ҡиәфәте менән башҡа эре йыртҡыс ҡоштарҙан айырылып тора. Ситтән ҡарағанда уҡ уның ике төҫтә булыуы күренә - ҡауырһын ҡатламы тығыҙ, арҡаһы ҡара һоро, ҡорһағы аҡ төҫтә. Боғаһында ғына күренерәк таптар бар. Башы аҡ, күҙҙәре буйынан ҡара һыҙат үтә. Күҙҙәренең төҫө һары, суҡышы ҡара, осо аҫҡа бөгөлөп тора. Боттары кәсләү, тырнаҡтары ҡара, оҙон. Инә ҡоштар ҙа ата ҡоштан айырылмай тиерлек, бары тик бәләкәйерәк кәүҙәле.

Рәсәйҙә һирәгерәк осрай, шуға ла Ҡыҙыл китапҡа индерелгән. Башҡортостанда иһә ул юғалып барған төрҙәр исемлегендә. Антарктиданан башҡа бөтөн континенттарҙа ла йәшәй. Көньяҡ Уралда P. h. haliaetus төрөнә ҡараған осрай.

Кәлмәргән йылға, һыуһаҡлағыстар, күлдәр буйында көн итә, сөнки уның төп ризығы - балыҡ. Төрлө йылдарҙа кәлмәргән Ағиҙел, Һаҡмар, Оло Ыҡ, Нөгөш менән Өрөк йылғалары араһында, Нөгөш һыуһаҡлағысында, Оло Талпаҡ күлендә күренгәне булды.

Кәлмәргән - ихтиофаг. Балыҡ күренеп ҡалыу менән уға өҫтән ташлана, тик аҡсарлаҡ кеүек уны суҡыштары менән түгел, ә тәпәйҙәрҙәре менән эләктерә. Тәлмәрйен, кимереүселәр, ҡоштар менән дә туклана. Ояһын да һыу яткылыктары тирәһендә үҫкән ағастарға ҡора. Ергә ултырмай, ағаста ултырған көйө ял итә, кеше йәки башҡа берәй йән эйәһе яҡынлашыу менән осоп та китә. Әгәр ҙә һыу ятҡылығы эргәһендә ағастар булмаһа, кәлмәргән ул ерҙе һайламаясаҡ. Бер ояны күп йылдар тотона, яҙын осоп ҡайтҡас уны бер аҙ йүнәтеп алалар. Инә ҡош төрлө төҫтәге таптары булған зәңгәрһыу 2-3 йомортҡа һала, 35 тәүлек баҫа. Бәпкәләрҙе икәүләп ҡарайҙар, улар көнөнә 4-5-шәр балыҡ ашай. Июнь аҙағында - июль башында йәш ҡоштар оса башлай. Сентябрь аҙағында йылы яҡтарға осоп китәләр.

Мәғлүмәттәргә ярашлы, кәлмәргәндең һаны йылдан-йыл кәмей. Был төбәктең бөтөн йыртҡыс ҡоштарына ла хас күренеш. Кәлмәргән тәбиғи экосистемала ҙур роль уйнай. Шуға ла ҡорой башлаған эре ағастарҙың барыһын да ҡырҡып бөтөрергә ярамай, улар башлыса шунда оя ҡора.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов, "Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан. (Дауамы бар).**

ҺИНЕҢ ХОҠУҒЫҢ...

# АЛДАҠҠА ҠАПМА!



**Рәсәйҙә финанс пирамидаларына йәлеп иткән өсөн яуаплылыҡ көсәйтелә. Депутаттар Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһында кодексҡа физик шәхестәргә инвестицияларҙы законһыҙ йәлеп иткән өсөн яуаплылыҡ билдәләү хаҡында төҙәтмәләрҙе беренсе уҡыуҙа хупланы.**

Документҡа ярашлы, Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһында кодексты "Физик бөрмәктәрҙең инвестицияларын законһыҙ йәлеп итеү" статьяһы менән тулыландырырға тәҡдим ителә. Закон тулыһынса ҡабул ителһә, граждандарға - 50 мең, вазифалы кешеләргә һәм эшҡыуарҙарға - 100 мең, юридик берәмектәргә 1 миллион һумғаса штраф һалыныуы мөмкин. "2018 йылдың ғинуарынан 2022 йылдың ноябренә тиклем Рәсәй банкына граждандарҙан финанс пирамидаһы билдәләре булған компанияларҙың эшмәкәрлегенә ялыу менән алты меңдән ашыу мөрәжәғәт килгән, ә коллектив ялыуҙар менән бергә һигеҙ меңдән ашыу кеше зыян күргән. Ошо мөрәжәғәттәргә ярашлы, уларҙың килтергән зыяны 4,5 миллиард һумдан ашыу тәшкил итә", - тиелә аңлатмалы яҙыуҙа.

# КЕМ ЙӘШ БЕЛГЕС?



**Дәүләт Думаһы беренсе уҡыуҙа эшкә урынлашыусы йәштәргә ярҙам тураһында закон проектын ҡабул итте.**

Дәүләт Думаһының телеграм-каналында билдәләнеүенсә, йәш белгес тип 35 йәшкә тиклемге граждандар иҫәпләнә. Улар беренсе тапҡыр һөнәре буйынса эшкә урынлашҡанда ярҙамға ла дәғүә итә аласаҡ. Әлеге ҡануниәткә ярашлы, һөнәр үҙләштергәндә йәш кеше бер юлы эшләп тә йөрөй икән, льготаға дәғүә итә алмай. Яңы закон ошо ҡаршылыҡты алып ташлаясаҡ. Бынан тыш, хәҙер йәш хеҙмәткәр тигән категория индерелә. Үҙ һөнәре буйынса түгел, ә беренсе тапҡыр эшкә урынлашыусы ҡыҙҙар һәм үҫмерҙәр уға ҡарай. Улар ҙа тәүге өс йылда эш биреүсенән һәм үҙе йәшәгән төбәктән ярҙам һорай ала. Тимәк, үҙ һөнәрең буйынса эшләмәгәндә лә ярҙам күрһәтелә аласаҡ.

# ЯЛДА ЭШЛӘҺӘҢ...



**РФ Хеҙмәт министрлығы ял, байрам һәм эшләмәгән көндәрҙә эшләгән өсөн компенсация түләүҙе аныҡлау өсөн Хеҙмәт кодексына төҙәтмәләрҙе йәмәғәтселек тикшереүенә тәҡдим итте.**

Төҙәтмәләр эш биреүселәргә эштән бушатылғанда ял һәм байрам көндәрендә эш хаҡын ҡаплау бурысын нығытырға булышлыҡ итәсәк. Хеҙмәткәр, үҙ сиратында, компенсацияның иң ҡулай вариантын, атап әйткәндә йә ял көнө итеп, йә аҡсалата өҫтәмә түләү булараҡ алырға хоҡуҡлы. Ғәмәлдәге нормалар буйынса байрамда һәм ял көндәрендә эшләгән өсөн икеләтә түләнә. Хеҙмәткәр теләге буйынса түләү урынына ял көнө бирелә. Аңлатыу яҙмаһында күрһәтелгәнсә, айырым осраҡтарҙа эш биреүселәр байрамдарҙа һәм ял көндәрендә эш хаҡы йәки тариф ставкаһы күләмендә эш хаҡы түләп, ял көнө биреү тураһында ҡарар ҡабул итмәгән һәм эштән бушатылғанда уны компенсацияламаған. Төҙәтмәләр Конституция судының позицияһын иҫәпкә алған һәм хеҙмәткәрҙең ял, байрам һәм эшләмәгән көндәрҙә эшләгән өсөн компенсацияһыҙ эштән бушатылыуы мөмкин булған хәлдәрҙе булдырмаҫҡа мөмкинлек бирә.

# БҮЛӘК ИТӘМ, ТИҺӘҢ...



**Күсемһеҙ милекте бүләк итеү тураһында нимә белергә кәрәк? "Росреестр"ҙың Башҡортостан Республикаһы буйынса идаралығы белгестәре аңлата.**

Бүләк итеү - мөлкәтте икенсе кешегә бүләккә бушлай биреү. Күсемһеҙ милек объекты яҡтар ҡул ҡуйған килешеү нигеҙендә "Росреестр"ҙа хоҡуҡ теркәлгәндән һуң ғына бүләк алыусының милкенә әйләнә.

Бүләк итеү тураһындағы килешеүҙе ябай яҙма һәм нотариаль формала рәсмиләштерергә мөмкин. Әгәр күсемһеҙ милек (фатир, милек хоҡуғындағы өлөш, торлаҡ йорт) бүләк ителһә, документта: объекттың урынлашҡан адресын; майҙанын; кадастр номерын; бүләк итеүсенең милек хоҡуғы барлыҡҡа килгән көндә; ниндәй нигеҙҙә барлыҡҡа килеүен; бүлмәләр һанын; ниндәй ҡатта урынлашыуын күрһәтергә кәрәк.

Күсемһеҙ милек объектын бүләк итеүсе мәрхүм булғандан һуң тапшырыуҙы күҙ уңында тотҡан килешеүҙең әһәмиәте юҡ тип һанала.

Милек хоҡуғы бүләкләнеүсегә күскәндән һуң бүләк итеү килешеүен суд тәртибендә генә өҙөргә мөмкин. Әгәр бүләк алыусы бүләк биреүсенең, уның ғаилә ағзаларының йәки яҡын туғандарының ғүмеренә һөжүм итһә йәки бүләк итеүсегә аңлы рәүештә тән йәрәхәттәре эшләһә, бүләк итеү эшен (шулай уҡ суд тәртибендә) юҡҡа сығарырға мөмкин.

Бүләк ителгән фатир өсөн һалым түләргә кәрәкме? Әгәр бүләк биреүсе һәм бүләк алыусы ғаилә ағзалары йәки яҡын туғандар: ир менән ҡатын, ата-әсә һәм балалар (шул иҫәптән уллыҡҡа алыусылар һәм уллыҡҡа алынғандар), олатай, өләсәй, ейән-ейәнсәрҙәр, туғандар булһа, һалым түләргә кәрәкмәй.

Әгәр күсемһеҙ милекте яҡын булмаған туған кеше бүләккә алһа, закон буйынса ул объекттың кадастр хаҡының 13 проценты күләмендә килем һалымы түләргә тейеш.

Килешеүҙе рәсмиләштереү өсөн документтарҙы "Росреестр"ға тапшырырға кәрәк. Быны:

- нотариус;
- Күп функциялы үҙәк офисы;
- "Роскадастр" офисы;
- "Росреестр" сайтындағы шәхси кабинет сервисы аша эшләргә мөмкин.

# ПСИХОЛОГ ЯРҘАМЫ - МОТЛАҠ



**Рәсәйҙә психолог хеҙмәте мотлаҡ медицина страховкаһы полисына инә. Тимәк, психологик ярҙам бушлай күрһәтелә. Башҡортостанда психологҡа нисек мөрәжәғәт итергә - республиканың Һаулыҡ һаҡлау министрлығы белгестәре аңлата.**

Йәшәгән урыныгыҙ буйынса поликлиникала медицина психологына теләһә ниндәй табип-белгес - терапевт, невролог, гинеколог, кардиолог аша яҙыла алаһығыҙ. Башҡортостанда Өфө ҡалаһы, Рихард Зорге урамы, 73/3 адресы буйынса республика клиник психотерапия үҙәге эшләй. Берҙәм регистратура: 8 (347) 285-77-07. Эш ваҡыты: дүшәмбе - йома - иртәнге туғыҙынсы яртынан киске 8-гә тиклем. Ашығыс психологик ярҙам алыу өсөн тәүлек әйләнәһенә ышаныс телефонына шылтыратырға мөмкин: 8 (347) 241-62-85.

Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, медицина психологына йәки табип-психотерапевтҡа мөрәжәғәт итеү иҫәпкә ҡуйыу һәм хеҙмәтте сикләү йәки транспорт сараһы менән идара итеүҙе сикләү тигәнде аңлатмай.

# КРЕДИТ АЛЫУҘЫ ТЫЙ



**2025 йылдың 1 мартынан кредит алыуҙы тыйыуҙың яңы ысулы ҡулланыла башлаясаҡ. Был кеше исеменә кредит алырға йыйынған мутлашыусыларҙан һаҡланырға ярҙам итә. Яңы ысулдың нисек эшләйәсәген Рәсәй Банкының Башҡортостан Республикаһы буйынса бүлексәһе - Милли банк белгестәре аңлата.**

Тыйыу үҙ көсөнә инһен өсөн Дәүләт хеҙмәттәре аша 2025 йылдың 1 мартынан ғариза бирергә мөмкин, ә Күп функциялы үҙәк офистары ғаризаларҙы 2025 йылдың 1 сентябренән дә һуңға ҡалмайынса ҡабул итә башлаясаҡ.

Тыйыуҙың төрлө шарттарын һайларға мөмкин:

- кредитор төрө буйынса: банк йәки микрофинанс ойошмаһы;
- кредит йәки заем алыу өсөн мөрәжәғәт итеү ысулы буйынса: офиста һәм дистанцион рәүештә йәки дистанцион рәүештә генә.

Әгәр ысынлап та кредит кәрәк булһа, теләгән ваҡытта тыйыуҙан баш тарта алаһығыҙ. Тыйыу кредит тарихы составына тейешле мәғлүмәт индерелгәндән һуң бер көн үткәс көскә сығарыла.

Банктар һәм микрофинанс ойошмалары кешенең кредит тарихында тыйыу тураһында мәғлүмәт бармы-юҡмы икәнен тикшерергә тейеш. Әгәр булһа, кредитор кредит биреүҙән баш тарта.

Әгәр, тыйыу булыуға ҡарамаҫтан, килешеү төҙөлгән булһа, кредитор заемсынан кредит буйынса йөкләмәләрен үтәүҙе талап итә алмаясаҡ. Әлеге көндә рәсмиләштерелгән кредитығыҙ булһа, тыйыу индерергә мөмкин. Әммә был кредит түләү бурысынан азат итмәй.

**✓ Был комплекстан 1-2 саҡрым алыҫлыҡта тағы ла өс ҡаласыҡ урынлашҡан: береһе "Йәшел сауҡалыҡ" санаторийы биләмәһендә, икенсеһе - Өфө йылғаһындағы "Таш кисеү" янында, ә өсөнсөһө - Салауат Юлаев һәйкәле торған моронда.**



ХӘҠИҠӘТИ ҺҮҘ

# БОРОНҒО БАШҠОРТОСТАН

## Икенсе киҫәк. Урта быуаттар.

### Алтынсы бүлек. Башҡорт - урта быуаттарҙағы Башҡортостандың баш ҡалаһы.



**Өфө ҡалаһы территорияһындағы ҡәлғә-ҡаласыҡтар.**

Был бүлектә һүҙ, башлыса, Өфө ҡалаһы үҙәгендә урынлашҡан Өфө-II ҡаласығы хаҡында барасаҡ, әммә беҙ уны билдәле бер ихтималлыҡ кимәлендә Башҡорт ҡалаһы тип атайбыҙ. Ағиҙел йылғаһы буйындағы ошо исемле ҡала йыш ҡына урта быуаттарға ҡараған сығанаҡтарҙа иҫкә алына. Алдағы бүлектең йөкмәткеһе V-VIII быуаттар арауығында Көньяҡ Урал халҡы тормошоноң ижтимағи-иҡтисади һәм этномәҙәни өлкәләрендәге етди прогресс хаҡында һығымта эшләргә мөмкинлек бирә. Төбәккә күп һанлы дала күсенселәренең килеүе һәм ерләшеүе, уларҙың урындағы ҡәбиләләр менән ҡушылыуы арҡаһында халыҡ составының сифатлы яңырыуын ошо прогрестың хәл иткес факторҙарының береһе итеп ҡарап була. Археологик материалда асыҡ сағылыш тапҡан ошондай процестарҙың быуаса һаҡланып килгән ырыу-ҡәбиләләргә хас локаль-территориаль ябыҡлыҡтан сығыуға, Көньяҡ Урал ҡәүемдәрен әүҙем рәүештә халыҡ-ара сауҙа-иҡтисади һәм сәйәси бәйләнештәргә индереүгә һәм уларҙың иҡтисади һәм рухи-мәҙәни үҫешенә булышлыҡ итеүе хаҡында фекер йөрөтөргә мөмкин.

Төбәктә барған үҙгәрештәрҙең сағыу күрһәткесе - тимер, баҡыр һәм бронза металлургияһының сағыштырмаса юғары кимәлдә булыуы, был стандарт формалы һәм үлсәмле хеҙмәт һәм һуғыш ҡоралдарының, биҙәүестәрҙең бик киң таралыуынан беленә. Халыҡ тормошоноң барса өлкәләрендәге етди үҙгәрештәрҙең тағы бер күрһәткесе - ошо осорҙа Көньяҡ Уралдың әүәл кеше йәшәмәгән урманлы дала һәм дала зоналарында йөҙҙән ашыу ҡаласыҡтарҙың һәм тораҡтарҙың барлыҡҡа килеүе. Ҡомартҡыларҙың был төркөмө әлегә аҙ өйрәнелгән, әммә ҙур булмаған 5-10 ҡаласыҡтың монументаль оборона ҡоролмалары булған ҙур ҡаласыҡ тирәләй төркөм-төркөм булып урынлашыуы күҙгә ташланып тора. Был күләме ағынан ҙур булған ҡаласыҡтарҙың сәйәси, сауҙа-иҡтисади һәм мәҙәни тормош үҙәктәре булыуы, ә уларҙың ҡайһы берҙәренең ул саҡта уҡ ҡала статусына тиклем үҫешеп, иң һуңғы урта быуаттарҙың яҙма сығанаҡтарында теркәлеп ҡуйылыуы бер ниндәй ҙә шик тыуҙырмай. Улар иҫәбенә Өфө ҡалаһының Киров районындағы Өфө-II ҡаласығын индереү фарыз. IV-V быуаттарҙа ул хәҙерге "Дуҫлыҡ монументы" торған йылға морононда йәнәш урынлашҡан икенсе ҡаласыҡ менән берҙәм тарихи-археологик комплексты - ҙур тораҡ пунктын хасил иткән. Киңлеге 100 метр, оҙонлоғо 200 метрҙан артығыраҡ булған тар ғына морондағы тораҡ та шул уҡ комплексҡа ингән (шартлы рәүештә Өфө-III тип йөрөтөлә), ул Ағиҙел йылғаһының уң яҡ яры һәм Өфө-II ҡаласығы сигендәге тәрән йырын араһында урынлашҡан. Морон Ырымбур күперенән 200 метрға өҫтәрәк Ағиҙел йылғаһына ҡойған инеш тамағында тамамлана. 60 йылдар уртаһына тиклем ошо моронда күп йортло урам була, әммә Ағиҙел аша һалына башлаған күперҙә илтеүсе юлдар төҙөү өсөн әлеге морон урамы менән бергә тулыһынса юҡҡа сығарыла.




Һүрәттә: Өфө ҡалаһының 1745 йылғы топографик планы фрагменты, унда Өфө-II ҡаласығы урынлашҡан морон төшөрөлгән.

Фән өсөн Өфө-II ҡаласығы асҡан крайҙы өйрәнеүсе П. Ф. Ищериков ошо морон территорияһында Өфө-II ҡаласығындағына тулыһынса оҡшаш булған бай керамика коллекцияһын йыйып өлгөрә. Мороndоң үҙенсәлеге бында үҙаллы археологик ҡомартҡы булыуы хаҡында фараз итергә мөмкинлек бирә. Был комплекстан 1-2 саҡрым алыҫлыҡта тағы ла ошо осорға ҡараған өс ҡаласыҡ урынлашҡан: береһе "Йәшел сауҡалыҡ" санаторийы биләмәһендә, икенсеһе - Өфө йылғаһындағы (уның тамағында) "Таш кисеү" янында, ә өсөнсөһө - Салауат Юлаев һәйкәле торған моронда. Ағиҙел, Өфө йылғалары, Дим йылғаһының иҫке үҙәне буйындағы ҡаласыҡтар тирәһендә тиҫтәләгән асыҡ тораҡтар була, уларҙа, башлыса, V-XIV быуаттарға ҡараған керамик материал табылған.

**Нияз МӘЖИТОВ.**
**Әлфиә СОЛТАНОВА.**

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**

**(Дауамы. Башы 2022 йылдың 28-се һанында).**

ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ

# МӘХМҮТ ҠАШҒАРИҘАН



**"Аја" - ус".**

Был боронғо төрки һүҙе башҡорт телендә әлегә тиклем ҡулланыла. Шуныһы ҡыҙыҡлы, беҙ борон устың аңлатҡан ошо "ая" һүҙенә "ус" һүҙен ҡушып һөйләйбеҙ: "ус аяһы". Күрәһең, тәү мәғәнәһендә "ая" һүҙе бик бәләкәй үлсәмде аңлатҡандыр: башҡорт телендә шул уҡ һүҙ дүрт бармаҡ киңлегендәге үлсәү берәмеге тигәнде белдерә. Мәҫәлән, Һәҙиә Дәүләтшина әҫәренән: "Итенең ҡыркмаға ҡараһы юҡ. Ҡабырға һырттары бер ая май, байғоштоң".

Йәнә бер ҡыҙыҡлы аналогия: бармаҡтарҙы бергә ҡыҫып уҡмаштырһаң, ус аяһы, йәғни кескәй генә ҡул һауыты хасил була. Һәр беребеҙҙең шишмәнән услап алып һыу эскәне бар. Шуға күрә лә тәү кешеләр ус формаһын биреп, һауыт-һаба яһай башлаған. Боронғо башҡорттар һауыт-һабаны "аяҡ" һүҙе менән юҡҡа ғына атамағандыр ул. Кешеләр ағастан юнып-соҡоп яһаған ҡалаҡ (ҡашыҡ) шул уҡ ус аяһын хәтерләтә. Башҡорттар элек-электән ашау-эсеү өсөн ҡулланылған һауыт-һабаны ҡашығаяҡ (һөйләштәрҙә: ҡашыяҡ), тип атағанын беләбеҙ.

Шул уҡ "ая" һүҙе дебетте таҙартыу, тетеү өсөн ҡулланылған энә тараҡлы ҡоралды ла аңлата, был осраҡта ошо атаманың "айырып алыу", йәғни йөндә сүбенән айлау мәғәнәһе күҙгә бәрелеп тора. Ошондай ҡорал булмағанда йөндө ҡул-бармаҡ менән таҙарталар, тимәк, "ая" һүҙе тәү мәғәнәһендә, ғөмүмән, кеше ҡулының атамаһын белдергәндер. Тәү тормош кешеләре ҡулдары - аялары (йоҙроҡтары) менән һуғышҡан: "аяу", "аяуһыҙ" һүҙҙәренең этимологияһын ошолай итеп тә аңлатып була.

**"Өләс", "өләс көз" - моңһоу күҙҙәр, улар иҫергәндең [кешенең] күҙҙәренә оҡшаш. Әйтелгән: "Булнар мени өләс көз Ийе кара мениз кизил йүз Андин тамар түкәл түз Булнар йана ол качар". [Бында] әйтелә: мине әсир итә ошо моңһоу күҙҙәр һәм миңле бик матур йөҙ. Уның яңаҡтарынан матурлыҡ тамып торған кеүек. Ул мине әсир итә лә шунан ҡасып китә".**

Хәҙерге башҡорт телендә ошо лирик шиғырҙы ошолайыраҡ итеп биреп була:
"Әсир итер мине моңһоу күҙҙәре
Һәм ҡара миңле һылыу йөҙҙәре.
Унан тамыр теүәллектең үҙе.
Әсир итер ҙә йәнә ҡасып китер үҙе".

**Бәҙри ӘХМӘТОВ әҙерләне.**
**(Дауамы. Башы 42-се һанда).**

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 78



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Варшава-Познань һөжүм итеү операцияһында

Немецтар Польша территорияһында 7 рубеждан торған көслө оборона системаһын төҙөп өлгөрә. Дошман Висла, Варта, Одер һәм башҡа йылға ярҙарында нығына, уларҙы үтеп сығып булмаҫлыҡ оборона һыҙығы итергә ниәт ҡора. 1945 йылдың 10 ғинуарына "А" армиялар төркөмөндә һалдат һәм офицерҙарҙың дөйөм һаны 560 меңгә етә, 5 мең тирәһе орудие һәм миномет, 1220 танк һәм штурм орудиеһы туплана. Дошман көстәренә һауанан 6-сы һауа флотының 630 самолеты ярҙам итә. Совет ғәскәрҙәренең Магнушев, Пулава һәм Сандомир плацдармдарына ҡаршы немецтар күп һанлы, яҡшы ҡоралланған частарын ҡуя. Совет Юғары Башкомандованиеһы ла бында ҡеүәтле ғәскәрҙәр төркөмөн туплауға өлгәшә. Операцияға 33,5 мең орудие һәм миномет, 7 мендән ашыу танк һәм САУ, 5 мең боевой самолет йәлеп ителә. Фронт һәм армияларҙың хәрби советтары Польша ерендә совет һәм поляҡ яугирҙарының хәрби хеҙмәттәшлеген нығытыуға ҙур иғтибар бирә. Һалдат һәм офицерҙар ошо үтә мөһим хәрби операцияға көслө рух менән инә.

12 ғинуарҙа 1-се Украин фронты һөжүмгә күсә һәм дошман оборонаһын өҙә: фронттың 250 саҡрымлыҡ арауығында беҙҙең яугирҙарыбыҙ, дошманды туктауһыҙ эҙәрлекләй барып, алға ынтыла. 14 ғинуарҙа операцияға 1-се Белорус фронты ҡушыла. Пулавы плацдармынан һөжүм башлаған частар (69-сы һәм 33-сө армиялар) кискә табан 20 саҡрымға тиклем алға үтә. 15 ғинуарҙа 7-се гв. атлы корпусы Висла йылғаһы аша сыға, ә 16 ғинуарҙа 33-сө армия биләгән позициялар арауығындағы Борки, Казанув рубежынан алға табан 100 саҡрымдан ашыу марш яһай. Уларҙың төп хәрби бурысы: беҙҙең һөжүмгә барыусы частарҙы уҙып китеп, дошманға ябырылырға, уның сигенеү юлдарын ябырға. 16-сы гв. атлы дивизияны 16 ғинуарҙа Радом ҡалаһын көньяҡтан урап уҙа. 9-сы һәм 11-се танк корпустары ошо уҡ көндә Радом ҡалаһын ала. Дивизияның 60-сы гв. атлы полкы Каханув ауылынан көнбайыштараҡ урманда позиция биләй. 62-се гв. атлы полкы Вулька-Лаговска, Машадла, Бобин, Шеленза маршруты менән хәрәкәт итеп, 16 ғинуарҙа Юлянув ауылынан төньяҡ-көнбайыштараҡ урманда туплана. 7-се гв. атлы корпусына 18 ғинуарға ҡаршы төндә яңы хәрби бурыс еткерелә: таң атыуға Пилица йылғаһы аша сығырға һәм Томашув-Мазовецки ҡалаһын алырға.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

✓ *Кәмәлек буйы башҡорттары йәшәгән төбәк Волганың һул яҡ ярында урынлашҡан. Ул ерҙәр менән Башҡортостан аралығында хәҙерге ваҡытта Һамар, Һарытау, Ырымбур өлкәләре урынлашҡан.*



ӨФӨЛӘРҘӘ БАР БЕР АУЫЛ

**Беҙҙең эраға тиклем V быуатта "тарих атаһы", грек тарихсыһы Геродот Кәрәлек, Кәмәлек, Сәҙе, Ырғыҙ, Селекле буйҙарында күргән һәм яҙып ҡалдырған башҡорттар менән аралашҡан мәшһүр рус яҙыусыһы Лев Толстой уларҙан "Геродотлыҡ аңҡыуы" хаҡында киң билдәле һүҙҙәрен тарихҡа теркәгән. Боронғо йылъяҙмаларҙа "Тышҡы Башҡорт иле" тип нарыҡланған Волганың һул ярында, Рәсәй Федерацияһының хәҙерге Һамар, Һарытау өлкәләрендә йәшәгән милләттәштәребеҙҙең рухи халәте нисек һуң? Быға тиклем беҙ ошо яҡта тыуып үҫкән мәшһүр әҙиптәр Рәшит Ниғмәти, Һәҙиә Дәүләтшина, Ғөбәй Дәүләтшин ижадтары аша төбәктә йәшәгән халҡыбыҙҙың тормошо хаҡында танышып белһәк, иш янына ҡуш тигәндәй, әҙәбиәтебеҙҙә тағы ла бер ҙур күләмле әҫәрҙең яҙылыуына шаһитбыҙ. Ул да булһа Бишева Ғәфиәнең "Кәмәлек" роман-хроникаһы. Автор 1942 йылдың 18 декабрендә Һарытау өлкәһенең Пугачев районына ҡараған Ҡондоҙло ауылында тыуған. Һөнәре буйынса ул һатыусы. Ғәфиә апай тәүҙә яҙғандары хәтернамә-хроника рәүешен алыр тип тә күҙ алдына килтермәгән, ә бары тик үҙ нәҫеленең үткәнен яҙма рәүештә балаларына һәм ейән-ейәнсәрҙәренә аманат итеп ҡалдырырға ғына теләгән. Үҙ яҙмаларын атаҡлы тарихсыбыҙ, күренекле шәхесебеҙ, үкенескә күрә, баҡыйлыҡҡа күскән Әнүәр Әсфәндийәровҡа уҡытып өлгөргән апай. Кәмәлек башҡорттары тарихын документаль нигеҙҙә ныҡлы өйрәнгән Әнүәр Закир улы автор яҙмаларының художестволы тәбиғәтен дә тойған, шуғалыр, минең ҡарамаҡҡа тәҡдим иткән. Яҙмаларҙың ҡулыма килеп эләгеүенең ҡыҫҡаса тарихы шулай. Мин әҫәрҙе мөхәррирләп, китап итеп сығарырға ярҙамлаштым.**

**Кәмәлек буйы башҡорттары йәшәгән төбәк Волганың һул яҡ ярында урынлашҡан. Ул ерҙәр менән Башҡортостан аралығында хәҙерге ваҡытта Һамар, Һарытау, Ырымбур өлкәләре урынлашҡан. Тарихта "Волганан - Тубылғаса" тип билдәләнгән төбәк халҡы һаман да Тарихи Башҡортостан сигенә тоғролоҡ һаҡлап йәшәй. Миңә ҡалһа, "Кәмәлек" художник ҡәләме менән түгел, асылда, илһөйәр, телһөйәр замандаш, һәүәҫкәр этнограф ҡулы менән ижад ителгән. Әҫәрҙә төбәктә барған сәйәси ваҡиғалар юҫыҡ сағылыш тапмаһа ла, төп йортонан - Башҡортостандан, милләт булараҡ билдәле кимәлдә дәүләт яҡлауынан, аҫаба еренән, диненән, теленән мәхрүм ителгән төбәк халҡы үҙ асылын тәбиғи үҫеш, эшһөйәрлек, эске никахтар ярҙамында һаҡлап ҡалыуға өлгәшә. Әҫәрҙе икенсе төрлө "Никахтар бәйәне" тип тә атарға мөмкин. Яҙмала төрлө-төрлө никахтар тарихы үҙенсәлекле силсиләне, шәжәрә ағасын тәшкил итә лә инде.**

**Роман тарихи ысынбарлыҡҡа, тормош дөрөҫлөгөнә туп-тура ҡарарға ярҙам итә. Автор үҙ нәҫеле мөхитен дә һәм тотош Кәмәлек буйында барған ваҡиғаларҙы шымартып күрһәтмәй, нисек бар шул рәүешле (ул хатта үҙенең ата- әсәһе хаҡында яҙғанда ла уларҙан фәрештә яһамай) аҡ ҡағыҙға төшөрә. Был авторҙан выждан батырлығы талап иткәне бәхәсһеҙ. Һәр хәлдә, Ғәфиә апайҙың хәҡиҡәткә тоғро ҡалыуы һоҡландыра, сөнки әҙәби әҫәр өсөн генә булһа ла тормош ваҡиғаларын, ундағы геройҙарҙы һылап-һыйпап, күпертеп һүрәтләргә ынтылыу ысынбарлыҡтан тайпылыуға алып килер ине.**

**Ғәфиә Ғәбделхәким ҡыҙы БИШЕВА 1967 йылдан алып Башҡортостандың баш ҡалаһы Өфөлә йәшәй. Йәшәй генә тип әйтеү аҙ булыр, ул күп кенә туғандарын, ауылдаштарын, яҡташтарын үҙенең артынан баш ҡалабыҙға эйәртеп алып килеп, тотош ауыл булып, аралашып көн итәләр. Уның менән ҡорған әңгәмәбеҙ ҙә тап шул ауыл хаҡында барыр.**

# БАШҠОРТЛОҠТО ҺАҠЛАР ӨСӨН КИЛДЕК...



**Ғәфиә апай, был үҙегеҙҙең тыуған яғығыҙ хаҡында әҫәрҙе яҙырға нимә мәжбүр итте?**

- Хәҙер беҙҙең Кәмәлек буйы ауылдарында туған телдә уҡытыу булмағас, йәштәр башҡортса белмәй тиерлек. Был бик үкенесле хәл. Шулай ҙа Кәмәлек буйҙарында ҡасандыр милли тормош шаулап торғаны, йола-традициялар һаҡланыуы, гөрләп туйҙар, "Ухаяҙыр" уйындары, башҡа саралар үтеүе миңә ғәзиз төбәктә йәшәгән халҡыбыҙҙың аяныслы һынауҙарға дусар булыуы хаҡында киләсәк быуындар белһен өсөн, исмаһам, ҡағыҙға ғына яҙып ҡалдырайым, тип тотонғайным был эшкә... Күңелем ҡушҡас, яҙҙым да яҙҙым инде.

**1967 йылда тәүге тапҡыр Өфөгә аяҡ баҫҡанһығыҙ, үҙегеҙҙең артығыҙҙан нисә кешене эйәртә алдығыҙ?**

- Тәүҙә килгәндәрҙең байтағы гүр эйәһе булдылар инде. Бер туған апайым Ғәфүрә, уның балалары Рәүеф, Ринат, Хәниә бында. Ибраһим бабайыбыҙҙың ҡыҙҙары Өфөлә йәшәй. Мәрхүмә Ғәлиә апайыбыҙ Вәхитов Әнүәр еҙнәгә сыҡҡайны, уларҙың балалары үҙ донъяһын ҡорған. Беҙҙең Рәшит менән ҡыҙҙарыбыҙ Фәйрүзә һәм Фәхризә Өфөлә йәшәйҙәр. Ғабдрафиҡ ҡайнағамдың балалары, туғандары ла Черниковкала йәшәй. Ике-өс туғандарҙы, уларҙың балаларын, беҙҙең балаларҙы, ейән-ейәнсәрҙәрҙе ҡушһаҡ, илле-алтмышлап кеше килеп сыға.

**Әгәр ҙә был берләшмәне ауыл исеме менән атаһаҡ, ниндәй ауыл була инде?**

- Революцияға тиклем беҙҙең төбәктә 12 башҡорт ауылы булған. Хәҙер һаҡланып ҡалғандары: Ҡондоҙло, Бөрйән, Мәҡсүт, Ҡаһарман, Ҡатай, Ишембай, Һарыш. Ә Өфөлә тупланып, аралашып йәшәгән ауылыбыҙ Кәмәлек буйынан килгәсебеҙ, Кәмәлек ауылы була инде.

**Башҡортостандың баш ҡалаһы Өфөлә йәшәһәгеҙ ҙә, тыуған яғығыҙ - Кәмәлек буйҙары. Бында күсеп килеп, тыуған яғығыҙҙы етем иттегеҙ тип уйламайһығыҙмы?**

- Бына минең өсөн, ирем, апайым, башҡа өлкәндәр өсөн тыуған еребеҙ Кәмәлек буйы, торған еребеҙ - Өфө. Ә бына бында тыуған балаларыбыҙ, ейән-ейәнсәрҙәребеҙ өсөн тыуған ерҙәре Өфө, Башҡортостан. Был - бер, икенсенән, беҙҙең яҡта күптәнән мәктәптәрҙә туған телебеҙ уҡытылмағас, беҙ Башҡортостанға килеп, балаларыбыҙҙың, ейән-ейәнсәрҙәребеҙҙең туған телен һаҡлап ҡалдыҡ. Улар барыһы ла 20-се Башҡорт гимназияһында уҡыны һәм уҡый. Шуға күрә бында етемлек тураһында һүҙ алып барып булмайҙыр. Киреһенсә, беҙ балаларыбыҙҙы туған телебеҙҙән мәхрүм итмәнек. Әгәр ҙә тегендә тороп ҡалһаҡ, улар туған телебеҙҙән ситләшер ине.

**Барығыҙ ҙа башҡортса матур һөйләшәһегеҙ, быны өсөн һеҙгә һоҡланырға ғына була. Ә бит Башҡортостанда тыуып үҫкән ҡайһы бер башҡорттар һеҙҙең кеүек түгел...**

- Беҙ унда бүленеп ҡалһаҡ та, дин, ғөрөф-ғәҙәт милли булмышыбыҙҙы һаҡланыҡ. 1954 йылға тиклем башҡорт теле уҡытылып килде, Бөрйән ауылында йәшәгән ҡайным уҡытыусы булып эшләгән булған.

**Кәмәлек буйында туғандарығыҙ ҡалдымы, әллә барығыҙ ҙа бында күсеп килдегеҙме?**

- Унда туғандарыбыҙ күп ҡалды. Бөрйәндә - ирем Рәшит яғынан, Ҡондоҙлола атайым яғынан туғандарыбыҙ донъя көтөп тора. Улар менән даими аралашып, күрешеп йәшәйбеҙ.

**Өфө ситтән килеүсене "өф" итеп тормай, тәүге осорҙа ауырға тура килгәндер инде?**

- Иң мөһиме, беҙ эштән ҡурҡманыҡ. Ғәфүрә апайым менән ирем Рәшит фатир алғансы урам һепереүсе булып эшләнеләр. Апайым һуңынан ательеға тегенсе булып эшкә күсте, ирем сантехник булып китте. Хәниәбеҙ троллейбус йөрөтөүсегә уҡып алды ла, пенсияға сыҡҡансы 34 йыл буйы шунда эшләне. Тәүҙә Ғәфүрә апайым өс бүлмәле фатир алғайны, беҙ тәүҙә балалар менән уларҙа йәшәнек. Тимерхан еҙнәбеҙ: "Балаларығыҙҙы сит илгә уҡырға, эшкә ебәрмәгеҙ, башҡорттан башҡа кеше менән ғаилә ҡормаһындар", - тип әйтә торғайны. Уның һүҙе беҙҙең зат өсөн ҡанунға әүерелде.

**Ҡайҙа, кем булып эшләне еҙнәгеҙ?**

- Балта оҫтаһы...

**Тәрән аҡыллы кеше булған ул.**

- Эйе, уның хаҡында романда барыһын да яҙғанмын.

**Әгәр ҙә Өфөгә килмәгән булһағыҙ, бөгөн ҡайҙа һәм нисек йәшәр инегеҙ?**

- Был һорауҙы ирем Рәшиткә бирергә кәрәктер. Сөнки ир ҡайҙа булһа, ҡатыны шунда бит инде. Тыуған яғында кеше нисек булһа ла йәшәй инде ул. Өфөгә килеү уйым райпотребсоюзда эшләгәндә тыуҙы. Йыл һайын уңыш йыйыуға Саратовтан шоферҙар килә. Бер йылды Башҡортостандан килгән машиналар күренде. Беҙ, һатыусылар, бер бүлмәлә ултырабыҙ. Тәҙрәне асып ебәрһәк, машиналарҙан башҡортса йырҙар ишетелә. Тап шул йырҙар миңә Башҡортостанды, Өфөнө барып күреүгә сигнал булып яңғыраны. Шул саҡта отпуск алдым да, өйгә ҡайтып, әсәйемә Өфөнө барып күреп ҡайтыу теләгемде әйттем. Өфөгә юлым шулай асылды...

**Бер осрашҡанда шиғыр ҙа яҙыуығыҙ хаҡында әйткәйнегеҙ, Ғәфиә апай. Әле лә ижад итәһегеҙме?**

- Шиғыр яҙыуым шул кәйефкә ҡарап инде. Ҡайһы ваҡыт хәҙер ҙә сыймаҡлап ҡуям. Туғандарымдың барыһының да тыуған көндәренә бағышлауҙар яҙып бөттөм инде.

**Әҫәрегеҙҙең икенсе өлөшөн яҙырға уйламайһығыҙмы?**

- Икенсе өлөшөн яңынан тыуғас яҙырмын тием.

**Ҡыҙыҡлы әңгәмәгеҙ өсөн оло рәхмәт, Ғәфиә апай!**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

УЙЛЫҒА - УЙ

# ЕР РУХЫНАН...



## халыҡ рухы ярала

**Күңел уйға туймаҫ, тигәндәй, хәҙерге заманда ҡәрҙәштәребеҙҙең шәхси сифаттары, үҙ-ара мөнәсәбәттәре етди уйландыра. Әхлаҡ-әҙәп ҡағиҙәләре, кешенең холҡо, аралашыу, ғәҙәттәр, милли ҡиммәттәр донъябыҙ торошона, ижтимағи тормошобоҙға, халҡыбыҙ йәшәйешенә ҙур йоғото яһай. Әүәл ҡәүемдәштәребеҙгә тәбиғәтте яратыу, киң күңеллелек, ябайлыҡ, баҫалҡылыҡ, сабырлыҡ, түҙемлек, миһырбанлыҡ, асыҡ сырайлылыҡ, әҙәплелек, намыҫлылыҡ, изгелек, яҡшылыҡ, ҡунаҡсыллыҡ кеүек күркәм сифаттар хас ине.**

"Европа һәм Көнсығыш рухы" тигән ғилми хеҙмәтендә немец философы В. Шубарт шуны һыҙыҡ өҫтөнә ала: "Ер рухынан халыҡ рухы ярала. Был рух даими милли сифаттарҙы билдәләй... Тупраҡ ҡәҙрәте ҡан ҡеүәтенән дә ҡеүәтлерәк һәм нығыраҡ". Тимәк, Көньяҡ Уралдың тәбиғәте, хозурлығы, төрлө-төрлө мәғдәнгә, тереклеккә байлығы, физик-географик шарттары башҡорт ҡәүеме асылының этногенетик сифаттарын, үҙенсәлектәрен билдәләй.

Биология фәндәре докторы Әскәт Моҡатанов та башҡорттоң булмышын йәнтөйәгенә бәйләй торғайны. Был, һис шикһеҙ, "Урал батыр" эпосында тасуирланғанса, ерҙә кешеләр шат, рәхәт йәшәһен өсөн изгелекле Урал атабыҙҙың Йәншишмә һыуын һирпеп, бары күреп һокланған балҡып торған ер, тәбиғәт донъяһын мәңге үлемһеҙ яһауына ла бәйлелер. В. Шубарт фекеренә ярашлы, ҡанбабаларыбыҙҙың, ата-олаталарыбыҙҙың ирек һөйөүсәнлеге, үҙаллылығы, ғәҙеллеккә ынтылышы ғәйрәтле, ғәҙеллекте яҡлаусы, игелекле, дәү кәүҙәһе хазина таштарға бай Урал тауына әйләнгән батырыбыҙҙан киләләр. Халҡының күңелендә әҙәмәҫ моң булған Шәйехзада Бабич инанғанса ла:

*Тупраҡ башҡорт бәхетелер,*
*Бәхетенең тәхетелер.*
*Тупраҡ ҡалһа истиҡбал*
*Нурлы, раушан, яҡтылыр.*

Арҙаҡлы шәхес Василий Маркович Флоринский ҙа ғәмәлдә холоҡтоң тыуған ергә, сығышҡа бәйлелеген аңғарта: башҡорттарҙың "үҙҙәренә генә хас һыҙаты - тыумыштан бирелгән әҙәплелек, намыҫлылыҡ, башҡа кешенең кешелек дәрәжәһен хөрмәт итеү һәм ошоно үҙендә һаҡлау". Бында "тыумыштан бирелгән" тигәнгә иғтибар иткәнһегеҙҙер. Шулай итеп, был сифаттар ҡандан, нәҫелдән, беҙҙе солғап алған мөхиттән килә. Йәнә аҡ күңел, ғорурлыҡ, яҡшылыҡ, инсафлыҡ, йомартлыҡ, ҡунаҡсыллыҡ та...

Тарихсы һәм этнограф Руф Гаврилович Игнатьевтың билдәләүенсә: "Ҡунаҡты, хатта дәрәжәле кешене ҡабул итеп, ҡарап, уның күңелен күреп, башҡорт ярамһаҡланыу, ҡуштанланыу хәленә төшмәй, ул үҙенең бөсен һаҡлай һәм үҙен бойондороҡһоҙ тота". Эйе, һоҡланырлыҡ, ғорурланырлыҡ булған әүәлге башҡорт холҡо! Хәҙер иһә хатта төрлө өлкәлә хеҙмәт итеүсе зыялыларыбыҙҙың бихисабы хаяһыҙ, иманһыҙ, игелекһеҙ, ягымһыҙ, түң, тупаҫ, ярамһаҡ... Һут биргән тарихи-ижтимағи тамырҙарын, рухынды һуғарған рухи йәншишмәләрен, үҙ рәүешен, иҫ-аҡылын, ҡиблаң, моңон, телен, исемең булмаһа, нисек иркен тын алырһын, шөһрәт ҡаҙанырһын, үҙеңде һәм халҡыңды танытырһын, исемеңде ил йөрәгенә яҙырһың, тип әйтке килә ундайҙарға...

Үҙенә оҡшаш йән эйәләренән кеше аҡылының, психикаһының һәм ижтимағи тормошоноң юғары үҫеш кимәле, мәҙәнилеккә эйәлеге, мәғәнәле йәшәйеште, матди һәм рухи үҫеште булдыра алыу һәләтлелеге менән айырыла. Әммә хәҙерге заманда кеше күңеленең ҡараңғыланыуы, Тәңре биҙгән тәкәбберҙәрҙең, йәнә бер һүҙҙә, бер тарафта тормаған аумаҡайҙарҙың, бушҡыуыҡ ялағайҙарҙың ишәйеүе нык һағайта. Эйе, ҡыҙғаныҫҡа күрә, кеше ҡиммәтен белмәгәндәр, ҡәрҙәштәрен рәнйеткәндәр, үселәр, боҙоҡтар, уғрылар, аҡса ҡолдары бермә-бер күбәйҙе. Хатта уларҙы йүгәнләр, тыйыр, туҡтатыр әмәл дә, хаким да юҡ, йоғонтоло саралар ҙа күрелмәй. Сөнки бихисаптар ҡорома буялған. Күңел һөрөмөн һыу менән генә йыуып булмай, күпмә йыуһаң да ҡара таш ағармай шул.

Ғилемде, әхлаҡи сафлыҡты данлаған, боҙоҡлоҡто, яһиллыҡты фашлаған әүлиәләй мәшһүр Аҡмуллабыҙ "Замана ғалимдарына" шиғырында әҙәмдең берен-бере кәмһетеүгә ҡомарлығына әсенә:

*Инсафтан бер мыҫҡыл юҡ эшебеҙҙә,*
*Кенә, хәсәт, хаслыҡ тулған эсебеҙгә,*
*Һөнәребеҙ - ҡанығышыу, кәмһетешеү,*
*Үҙ ҡылған эшебеҙ юҡ иҫебеҙҙә.*

"Нәсихәттәр" шиғырында иһә кешеләргә мәңге фәһем булыр өгөт-нәсихәттәрен әйтә:

*Икенсе ҡиммәт нәмә - күңел, тигән,*
*Күңеле боҙоҡ әҙәмдән төңөл, тигән.*
*Боҙоҡҡа ер өҫтөнән аҫты артыҡ,*
*Булмаһа күңел таҙа - күмел, тигән...*
*Етенсе ҡиммәт нәмә - ихлас, тигән,*
*Ихласыҙҙың эше ҡабул булмаҫ, тигән.*
*Аҡыллылар ошо һүҙҙе белһә кәрәк:*
*Иман, аҡыл, әҙәп, ихлас - юлдаш, тигән.*

Намыҫы таҙаларға был фани донъяла ихлас аралашмайынса, фекерләшмәйенсә, бер-беренә шәфҡәт итмәйенсә, мәғәнәле тормош ҡороп, ҡыуанып йәшәү мөмкин түгел. Сөнки ғүмер баҡый һыналғанса, кеше - кешегә иш, ҡулдаш, юлдаш; кеше дарыуы - кеше, кәнәше лә килешә, йылы һүҙе йәнгә рәхәт, йөрәккә им була. Хатта ки яҡшы һүҙ - ярты ырыҫ, яҡшы ниәт - ярты бәхет. Әлбиттә, шул уҡ ваҡытта, һис шикһеҙ, үҙ эшеңде үҙең белеү, үҙеңдең яҡшы исемеңде табыу, үҙеңә үҙең ҡаты булһаң да кешеләргә йомшаҡ, мөләйем, ягымлы, ярҙамсыл булыу үтә лә мөһим. Яҡшы мөнәсәбәтле, рәхимле кешеләр менән ҡатышһаң, күңел асыла, яман менән - йәнең ҡыйыла. Яуыздар, боҙоҡтар, асыу менән үсе күптәр йортобоҙға матди ҙа, рухи ҙа зыян килтерә, йыртҡыстан былайыраҡ ҡотора, йәмғиәткә ҡурҡыныс тыуҙыра. Аралашып, аҡыл менән уртаҡлашып йәшәйек, йәмәғәт!

Алла шайтанынан бәндә шайтаны яманыраҡ икәнен һәр саҡ иҫтә тотайыҡ. Ҡөрьәндә әйтелгәнсә, әгәр һеҙ изгелек эшләһәгеҙ, үҙегеҙ өсөн эшләйһегеҙ, яманлыҡ ҡылһағыҙ ҙа үҙегеҙ өсөн ҡылаһығыҙ. Берәү тура юлдан барһа, үҙе өсөн бара, берәү аҙашһа, үҙенә зарарға аҙаша... Изгелек ҡылғандарға - изгелек һәм өҫтәмә, уларҙың йөҙҙәрен туҙан да, хурлыҡ та ҡапламаҫ. Улар - ожмах әһелдәре, улар унда мәңге ҡалыр. Насар эштәр ҡылғандарҙы хурлыҡ баҫыр, Аллаһы Тәғәләнән һис кем яҡлай алмаҫ! Уларҙың йөҙө ҡараңғы төндең ҡаралығы менән ҡапланған кеүек булыр. Был бәндәләр - тамуҡ кисәүҙәре, улар тамуҡта мәңге ҡалыр...

Ер йөҙөндә әллә кем булып маһайып йөрөмә, һин Ерҙе тишә алмаҫһың һәм тауҙарҙай була алмаҫһың...

Раббың ғәҙел булырға һәм изгелек ҡылырға, яҡындарға бүләк бирергә ҡуша, зина ҡылыуҙан, тыйылғанды эшләүҙән, кешеләргә йәбер-золом ҡылыуҙан тыя. Алла һеҙҙе өгөтләй, моғайын, һеҙ аҡылға килерһегеҙ.

Аҡ күңелдең аты арымай, тигәндәй, ҡәрҙәштәребеҙҙә тәбиғәттән, йәмле еренән бирелгән һоҡланғыс сифаттарын тергеҙеп, яуыҙлыҡҡа, яманлыҡҡа яу асып, яҡшылыҡҡа юл асып йәшәү хәйерле. Урал ата аманатын мәңге хәтерҙә тотоп, изге доға итеп, көн һайын ошо имле һүҙҙәрҙе бөтә йөрәктән әйтеү, күңелдәргә һеңдереү зарур:

*Яҡшылыҡ гелән атым,*
*Кеше бит минең затым,*
*Яманға юл ҡуймайым,*
*Яҡшынан баш тартмайым.*

**Сәлимйән БӘҘРЕТДИНОВ.**

---

ЙӘН ӘРНЕҮЕ

# НИМӘ ЭҘЛӘЙБЕҘ:

## бәхетме, тәхетме, ләхетме?



**Донъяла көн һайын меңәрләгән ваҡиғалар булып тора. Көн һайын телевизорҙан төрлө илдәрҙә барған мәхшәрҙәрҙе күҙәтеп, оло борсолоуға төшәбеҙ. Көн һайын кемдер кемендер юғалта, кемдер кемделер таба...**

Кеше тәбиғәте менән бик тә ҡыҙыҡһыныусан, яңынанды тәьҫораттар көсәп йәшәй торған йән эйәһе. Ә ул тәьҫораттар күберәк йорттарыбыҙ мөйөшөндә урынлашҡан ҡара ҡумталар аша килеп етә беҙгә. Уларға ҡарайбыҙ ҙа, ҡайҙалыр беҙ йәшәмәгән сит ерҙә тормош шундай матур, ҡабатланмаҫ, сәйер тип уйлап, баш әйләндергес хыялдарға сумабыҙ. Ул ерҙәрҙә үҙ тормошоңдо ҡороу ҙа, эшкә урынлашыу ҙа күпкә еңелерәк һымаҡ тойола башлай...

...Теүәл ике йыл элек курсташым һөйгән йәре артынан алыҫ Себер яҡтарына юл тотто. Әллә һөйөүе көслө булды, әллә, күптәр кеүек, Себер яҡтарында аҡсаны көрәкләп алып була, тигәнгә алданды. Ә шулай ҙа донъя беҙ теләгәнсә генә бармай шул. Теге ҡыҙҙың да егетенә булған мөхәббәте тиҙ арала селпәрәмә килде. Ул Себерҙән дә, егетенән дә төңөлөп, тыуған яҡтарына иҫән-һау әйләнеп ҡайтты, һәйбәт кенә бер фирмаға эшкә урынлашты. Себергә сәйәхәтен алама төш кеүек хәтерләй хәҙер...

...Студент саҡтан яҡын дуҫым Мәскәүҙәге бер университетта яҡшы билдәләргә генә өлгәшеп уҡып йөрөнө. Магистратураға ла бер ҡаршылыҡһыҙ уҡырға инеп китте, бик башлы егет ине бит ул. Тик, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, тыуған яҡтарына үҙ аяҡтары менән ҡайта алманы шул. Уҡыған ваҡытта уҡ эшкә урынлашты. Эш менән булып, дәрестәренә даими йөрөй алмай башлағас, уҡыуынан ҡыуылды. Шунан башҡөллө эшкә сумды ул. Интернет селтәрендә "Бәйләнештә" һәр ваҡыт "Мин шул хәтлем арыным, ҡайтҡым килә..." тип яҙғылай ине. Тик, нишләптер, ҡайтырға ла ашыҡманы. Иртәнән кискә тиклем сәйер башлыҡтарына бил бөктө, бахыр. Август айында был яҡты донъянан китеүе тураһында хәбәр алдыҡ. Сәбәптәрен бөгөнгәсә бер кем дә белмәй. Бында, Башҡортостанда, уның тома-һуҡыр инвалид әсәһе япаңғыҙы тороп ҡалды...

...Work and travel бөтә илдәргә билдәлелек яулаған компания. Ошо компанияның өгөтөнә эйәреп, йыл һайын студент халҡының байтағы инглиз телен һыҡлап өйрәнергә, әҙерәк аҡса эшләргә, сит илдәр буйлап гиҙеү бәхетенә өлгәшергә тип, Америка яҡтарына китә. Берәүҙәрҙең ата-әсәһе балаһының хыялына ҡаршы сыҡмайынса, кредиттар ала, машинаһын һата, икенселәре бер юлы ике-өс эштә эшләп, тейешле аҡса туплай. Төркөмөбеҙҙәге бер нисә курсташыбыҙ ана шулай беҙ киноларҙан ғына ҡарап белгән Америкала эшләп, иҫтәре китеп ҡайтҡайны бер ваҡыт. Юҡ, рухланып түгел, киреһенсә, тыуған яҡтарыбыҙҙы һағынып, юҡһынып ҡайтып кергәйнеләр, бисаралар. Сит илдәрҙә Рәсәй халҡын хайуан менән бер рәткә ҡуялар, беҙҙе мәғәнәһеҙ һәм бөтөнләй әҙәп-әхлаҡ нормаларын да белмәгән кешеләр тип күҙ алдына килтерәләр икәнен ишетеп беләбеҙ. Әлеге курсташтарым был фекерҙәрҙе, ҡырын, мыҫҡыллы ҡараштарҙы үҙҙәрендә лә татып ҡарағайны, уфылдауҙары ла шунан ине...

Эйе, йыш ҡына йәштәр бер көн менән йәшәргә өндәгән, "Бөтә нәмәне лә татып ҡара!" тигән девиздар менән йәлеп иткән саҡырыуҙарға алданып, йәйге каникулдар мәлендә, йә уҡыуын тамамлағас, сит тарафтарға юлланырға атлығып тора. Хатта барған илендә ғаилә ҡороп, ғүмерлеккә башҡа ил гражданы булып китеүҙе зарур күргәндәр ҙә йышая башланы. Ҡайһы бер ата-әсәләрҙең: "Минең ҡыҙым француҙға кейәүҙә", - тип ғорурланып һөйләгәненә лә шаһит булған бар. Әммә бындай ялған ғорурланыуҙар, ялтырауыҡтар, аҡсаның алдаҡсы ләззәт икәнен, теләктәрҙең беҙҙе хаталы юлға этәреүен аңлаһын ине йәштәребеҙ. Кеше күңеле һәр саҡ нимәләр эҙләй инде ул, эҙләгәне йә бәхет, йә тәхет, йә ләхет була.

**Ә ШУЛАЙ ҘА...**

**Балалар белем алһын, башлы-күҙле булһын, тип, әллә нисәмә эштә эшләп йонсоған ата-әсәләр ҙә уйланһын ине бер аҙ: балалары, ысынлап та, уҡып йөрөймө, әллә башҡа юлдамы? Күҙ нурылай күреп үҫтергән балаһы уның өмөттәрен аҡлармы, ҡартайған көнөндә таянысы булырмы? Балаларын оло ғилем артынан йыраҡ ҡалаларға, сит ерҙәргә ебәрер алдынан да оҙаҡ итеп уйларға кәрәктер атай-әсәйҙәргә. Әйләнеп ҡайтырмы балаһы үҙенең тыуған яҡтарына, ата-әсәһенә, халҡына хеҙмәт итерме? Ә бит был үтә мөһим.**

**Алһыу ҠЫҘРАСОВА.**

✓ ***Салли тураһындағы иҫтәлектәр уны ныҡ тулҡынландырҙы. Шул уҡ ваҡытта асыуын да килтерҙе: "Нисек улай килеп сыҡты һуң? Саллиға өй алырға ярҙам итергә үҙенә һүҙ биргәйне бит. Ул уны ярата ине, ә ул онотто".***





Владимир МЕГРЕ

# БАЙҘАР ҘА ИЛАЙ

(Кинәйәле хикәйәт)

Джонни ят баланың ул төҙөгән өй янында баҫып тороуына йәне көйҙө, шуға асыуланып һораны:

- Һин бында ни эшләйһең?

Ҡыҙыҡай матур йөҙөн Джонниға бороп, яуап бирҙе:

- Һоҡланып торам.

- Нимәгә?

- Бынау матур һәм аҡыллы өйгә.

- Ниндәй-ниндәй? - тип һораны аңлап етмәгән Джонни.

- Матур һәм аҡыллы, - тип ҡабатланы ҡыҙ.

- Матур өйҙәр була, ә бына аҡыллы өйҙәр булғанын ишеткәнем юҡ. Кешеләр генә аҡыллы булыуы мөмкин, -тине Джонни бик мәғәнәле итеп.

- Эйе, әлбиттә, кешеләр аҡыллы булыуы мөмкин. Ә бына аҡыллы кеше төҙөгән өй ҙә аҡыллы була, - тип ныҡышты ҡыҙыҡай.

- Ә был өйҙә нимәһе аҡыллы?

- Эсендәге стенкаһы бик аҡыллы эшләнгән. Унда кәштәләре бик күп. Төрлө кәрәкле әйберҙәр, уйынсыҡтар теҙергә була.

Ҡыҙҙың шулай фекерләүе Джонниға оҡшаны, ул хатта ҡыуанып китте, ҡыҙыҡай үҙе лә бик мөләйем ине. "Сибәр генә, аҡыллы ла", - тип уйлап ҡуйҙы Джонни. Шуға ғорурлыҡ менән:

- Был өйҙө мин эшләнем, - тине.

Тиҙ генә һорай һалды:

- Ә һинең исемең кем?

- Мин - Салли, миңә ете йәш. Мин бындағы ялсылар өйөндә йәшәйем, сөнки атайым бында баҡсасы булып эшләй. Ул үҫемлектәр тураһында бик күп белә, мине лә өйрәтә. Мин дә хәҙер сәскәләрҙе үҫтерергә, ағастарҙы тәрбиәләргә беләм. Ә һинең исемең кем, ҡайҙа йәшәйең?

- Мин виллала йәшәйем. Исемем - Джонни.

- Тимәк, һин беҙҙең хужаның улы?

- Эйе.

- Әйҙә, Джонни, бергәләп өй уйыны уйнайыҡ.

- Нисек?

- Өлкән кешеләр һымаҡ ошо өйҙә йәшәйек. Һин хужаның улы булғас, бында ла хужа бул, ә мин һинең хеҙмәтсең булам, атайым һымаҡ.

- Улай булмай, - тине Джонни, - хеҙмәтселәр ялсылар йортонда йәшәргә тейеш, виллала хужа үҙенең ҡатыны, балалары менән йәшәргә тейеш.

- Улайһа, мин һинең ҡатының булам, - тине Салли ҡапыл ғына, үҙе һорай һалды: - Мин һинең ҡатының булып торһам буламы, Джонни?

Джонни өндәшмәне, өйгә инде, тирә-яғына ҡараны һәм тышта уны күҙәтеп торған Саллиға иҫе китмәй генә әйтеп ҡуйҙы:

- Ярай, үт бында, ҡатыным булырһың. Өйҙөң эсен матурайтыу тураһында уйларға кәрәк.

Салли өйгә ингәс, Джонниҙың күҙҙәренә һоҡланып ҡарап, иркәләнеп кенә шыбырлап әйтте:

- Рәхмәт, Джонни. Мин һәйбәт ҡатын булырға тырышырмын.

Джонни баҡсалағы бәләкәй өйөнә йыш йөрөй алманы. Саф һауала булыу өсөн тәғәйен ваҡытта ул гел генә баҡсала уйнай алмай ине. Тәнһаҡсылар һәм гувернерҙар оҙатыуында ул йә ҡала паркында, йә Диснейлендта була, йә ипподромда һыбай йөрөй.

Әммә ул мөмкинлек табып, үҙ өйөнә килгәндә, уны һәр саҡ Салли ҡаршы ала ине. Килгән һайын Джонни өйҙәге үҙгәрештәргә иҫе китә. Иң тәүҙә Салли ҡайҙандыр алып килеп иҙәнгә түшәгән балаҫҡа иғтибар итте. Аҙаҡ тәҙрәләрҙә ҡорғандар барлыҡҡа килде, ишекте шаршау биҙәне. Һуңыраҡ бәләкәй генә түңәрәк өҫтәл килеп ултырҙы. Өҫтөндә фотография ҡуя торған буш рам ҡуйылғайны.

- Джонни, һин беҙҙең өйгә һирәк килә башланың. Мин һине көтәм, ә һин юҡ та юҡ. Берәй килгәнеңдә фотоңды алып кил, мин уны ошо рамға ҡуям. Шулай булғанда һине көтөү күңеллерәк буласаҡ.

Өй менән дә, Салли менән дә хушлашырға килгәнендә Джонни фотографияһын ҡалдырҙы. Ата-әсәһе менән улар икенсе виллаға күстеләр.

* * *

Джон Хайцман, мультимиллиардер, үҙ апартаментында түшәктә ятҡанда бәләкәй Саллины, уға бәйле иҫтәлектәрҙе хәтерләп йылмая ине. Ул яңы саҡ аңланы: ҡыҙ бит уны яратҡан. Үҙенең балаларса саялығы менән ихлас һөйгән. Бәлки, ул да яратҡандыр ҡыҙҙы, бәлки, оҡшатҡандыр ғына. Әммә Салли кеүек Джонниҙы башҡаса бер кем дә яратманы. Әле бала саҡ хәтирәләре күңелендә тик йылы хистәр уятты. Уға еңел һәм күңелле булып китте.

Икенсе виллаға күскәс, ун бер йылдан һуң ул Салли менән тағы бер тапҡыр осрашты. О, ул осрашыу! Онотола барған яңы хистәр тәнен тетрәндерҙе. Джон Хайцман хатта түшәгенән ҡалҡына биреп ҡуйҙы. Йөрәге тамырҙары буйлап ҡанды тиҙерәк ҡыуғандай тойолдо. О, ул осрашыу... Ул бит уны онотҡан... Исмаһам, бер тапҡыр булһа ла хәтеренә төшөрмәгән... Әле нәҡ шул уйҙар ғына уны тулҡынландыра башланы.

Бала сағы үткән виллаға ун бер йылдан һуң бер көнгә генә барып киткәйне ул. Оҙаҡ була алманы, ваҡыты тар ине. Төшкә аштан һуң баҡсаға сыҡты, үҙе лә һиҙмәҫтән, акациялар ышығындағы бәләкәй өйө яғына ашыҡты. Ағас ботаҡтарын айырып, бәләкәй аҡланға аяҡ баҫҡас, аптырауынан ҡатып ҡалды. Ун бер йыл элек пластмасса йәшниктәренән эшләнгән өйсөк һаман да үҙ урынында ине. Ә тирә-яғында... Күҙ яуын алырлыҡ сәскә түтәлдәре хасил булған, ишек алдына таҙа ҡом түшәлгән, эскәмйә ултыра. Өй стеналарын үрмәгөлдәр солғап алған. Был эскәмйә булмай торғайны шикелле, тип уйлап, Джонни ишектәге шаршауҙарҙы асып, өй эсенә үтте.

Бында әле генә кемдер булғаны һиҙелә ине. Өҫтәлдә, элеккеләй, уның бала саҡ фотоһы тора. Кәштәләрҙә Саллиҙың уйынсыҡтары матур итеп теҙелгән. Бер тәрилкәгә әле генә йыйып индерелгән емеш-еләк һалынған. Иҙәндә юрған менән ҡапланған һауа тултырылған матрас ята.

Ғәмһеҙ бала саҡтың күңелле мәлдәрен иҫләп, Джон оҙаҡ ҡына торҙо. "Ниңә шулай икән?", тип уйлай ине ул. Уларҙың әллә күпме бына тигән виллалары бар, әммә ошо йәшниктәрҙән эшләнгән өйҙә күңеллерәк тойола.

Тышҡа сыҡҡас, Саллиҙы күреп, тағы шаҡ ҡатты. Ҡыҙ, егеттең хәтирәләрен ҡуҙғатырға ҡурҡҡандай, шым ғына уны күҙәтә ине. Джон Саллиға ҡараны, ҡыҙҙың сикәләре алһыуланды. Ул оялсан ҡарашын түбән эйеп, йомшаҡ бәрхәт тауыш менән иркә генә өндәште:

- Һаумы, Джонни!

Егет тиҙ генә яуап бирмәне. Ул матурайып киткән сибәр ҡыҙға һоҡланып туймаҫтай ине. Саллиҙағы еңел күлдәк уның ымһындырғыс тәнен сорнап, тымыҡ елдә елберҙәй. Ҡыҙҙың тулыланған зифа һынында бала сағынан бер тамсы ла ҡалмаған.

- Сәләм, Салли, - Джон оҙаҡҡа һуҙылған паузаны боҙҙо. - Өйҙә һаман да һин тәртиптә тотаһыңмы?

- Эйе. Мин бит һиңә вәғәҙә бирҙем дәһә. Унда емештәр бар, йыуылған. Аша, улар һинең өсөн.

- Эйеме?.. Миңәме? Әйҙә, улайһа, бергәләп ашайыҡ.

Джон шаршауҙарҙы асып, Саллиҙы алдан үткәрҙе. Ҡыҙ эскә үтеп, сүкәйеп ултырҙы, тәрилкәне егеткә һуҙҙы.

Ултырғыстар юҡ ине. Джон балаҫҡа ултырып, виноград тәлгәштәренә ынтылғанда, абайламаҫтан, Саллиның яурынына ҡағылды. Ҡыҙ ҡапыл уға әйләнеп ҡараны, ҡараштары осрашты, Салли тәрән итеп тын алды. Шуғамылыр, күлдәгенең өҫкө төймәһе ысҡынды, ҡыҙҙың тығыҙ күкрәктәре күренде. Джон Саллиҙы яурындарынан тотоп, иплән кенә үҙенә тартты. Ҡыҙ ҡаршылашманы. Киреһенсә, ялҡынлы тәне менән уға һыйынды. Джон уны балаҫҡа һалғанда ла, ирендәренән иркәләп үпкәндә лә, түштәренә ҡағылғанда ла Салли ҡарышманы...

Салли саф ҡыҙ ине... Уға тиклем дә, унан һуң да Джон ғиффәтле ҡыҙҙар менән енси бәйләнешкә ингәне булманы. Бөгөн килеп, ҡырҡ биш йылдан һуң шул осрашыу иҫенә төшкәс кенә, Джон Хайцман ҡапыл аңланы: ҡатын-ҡыҙ менән бар донъяһын онотоп ҡауышыу ғүмерендә бер тапҡыр ғына булған... Дөрөҫөрәге, ҡыҙҙан ҡатын-ҡыҙ яһау бәхете.

Аҙаҡ улар татлы йоҡоға сумдылар. Уянғас, нимә тураһындалыр һөйләштеләр. Нимә тураһында һөйләштеләр икән? Джон Хайцман һәр һүҙҙе иҫләргә тырышты. Исмаһам, мәғәнәһен булһа ла иҫкә төшөрөргә ине. Иҫләне бит!

Салли, тормош шундай матур, тип ҡыуанды. Атаһы ҡыҙына ер һатып алыу өсөн аҡса туплауын әйтте, шунда, әгәр аҡсалары етһә, өй төҙөйәсәктәрен һөйләне. Дизайнын Салли үҙе эшләйәсәге, төрлө ағастар ултыртып, матурлап, балалары менән шунда бәхетле йәшәйәсәге тураһында хыялланды.

Джон эстән генә ҡыҙға аҡсалата ярҙам итеү тураһында хәл иткәйне. "Ҡара һин уны, бәхет өсөн был ҡыҙға бик күп тә кәрәкмәй, - тип уйлағайны шул саҡта - Ер алырға, өй төҙөргә ярҙам итергә онотмаҫҡа кәрәк".

* * *

Әммә Джон был теләген онотто. Салли тураһында ла онотто. Тормош уны икенсе яҡтары менән мауыҡтырҙы. Яңы яхта, шәхси самолёт алыу башта күңелен елкендерә ине. Финанс комбинациялары уйындары мауыҡтырҙы, атаһының милке миллиардлап артты, ул үлгәс, мираҫ булып уға күсте. Егерме йылға һуҙылды был мауыҡтырғыс хистәр. Башҡа нәмәләргә иғтибар ҙа итмәне, буғай. Шул арала ике тапҡыр өйләнде. Ике ҡатыны ла ғүмерендә иҫ китерлек эҙ ҡалдырманы. Ҡырҡ йәшенән һуң финанс уйындары артыҡ ҡыҙыҡһындырмай башланы, депрессияға бирелеүҙәре йышая барып, тәрән күңел төшөнкөлөгөнә алып килде.

Әммә әлеге мәлдә Джон Хайцман депрессия хәлендә түгел ине. Салли тураһындағы иҫтәлектәр уны ныҡ тулҡынландырҙы. Шул уҡ ваҡытта асыуын да килтерҙе: "Нисек улай килеп сыҡты һуң? Саллиға өй алырға ярҙам итергә үҙенә һүҙ биргәйне бит. Ул уны ярата ине, ә ул онотто". Вәғәҙәләрен, бигерәк тә үҙенә биргәндәрен үтәргә ғәҙәтләнгән Джон Хайцман аңлай ине: кәйефе ҡырылыу бушҡа түгел. Тимәк... Ул өҫтәлдәге кнопҡаға баҫып, секретарын саҡырҙы. Уныһы ингәс, түшәгендә ҡалҡынып ултырған Джон һуңғы ярты йылда тәүге тапҡыр телгә килеп, ауыр тын алып һөйләй башланы:

- Бынан илле йыл элек мин бер виллала йәшәй инем. Адресын аныҡ ҡына хәтерләмәйем. Ул архивта булырға тейеш. Шул виллала бер баҡсасы эшләй ине. Фамилияһы хәтерҙә түгел, архивта барҙыр. Шул баҡсасының ҡыҙы бар ине. Исеме - Салли. Шуның ҡайҙа йәшәүен бел. Был мәғлүмәт миңә иртәнсәккә тиклем кәрәк. Иртәрәк тапһаң, шунда уҡ хәбәр ит. Үтәгеҙ.

Секретарь таң менән шылтыратты. Ул ингәндә Джон Хайцман тәҙрә төбөндә кресло-коляскала ултыра ине. Өҫтөнә ҡарағусҡыл күк төҫтәге костюм кейгән, ҡырынған-йыуынған.

- Сэр, баҡсасы 40 йыл элек эшенән бушатылған һәм күп тә тормай, үлеп ҡалған. Шуға тиклем ул Техас штатындағы ташландыҡ ранчола ике гектар ер һатып алған. Ана шул участкала өй төҙөй башлаған, ләкин төҙөп бөтә алмай, үлеп киткән. Уның ҡыҙы Салли өйҙө төҙөп бөтөп, әле шунда йәшәй. Бына адресы. Әлегә ошонан башҡа мәғлүмәт юҡ. Кәрәк булһа, өҫтәмә мәғлүмәт йыйыласаҡ.

Джон Хайцман секретарь ҡулындағы ҡағыҙҙы алды, иғтибар менән уҡып сыҡты, иплән кенә бөкләп, пинжәгенең эске кеҫәһенә һалды.

- Вертолёт утыҙ минуттан әҙер булһын. Техас штатындағы вилланан биш-ун километр алыҫлыҡта ергә төшөргә тейеш. Шунда машина көтөп торһон. Тәнһаҡсылар кәрәкмәй, водитель булһа, етә. Үтәгеҙ.

**Радик ӨМӨТҠУЖИН тәржемәһе.**

**(Дауамы. Башы 10-11-се һандарҙа).**

***✓ Беҙҙә шөғөлләнгән балалар, дүрт йыл уҡығас, бейеү һәм актер оҫталығы буйынса танытма алалар. Үҙем дә бейеү сәнғәте буйынса белемемде камиллаштырып, юғары белем алыу ниәте менән йәшәйем.***



ИЖАДХАНА

**1961 йылда халыҡтар араһында дуҫлыҡ һәм татыулыҡты нығытыу өсөн Халыҡ-ара театр эшмәкәрҙәре конгресында 27 март Театр көнө тип иғлан ителә. Сибай ҡалаһында ике театр - Арыҫлан Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры һәм "Сулпан" Сибай башҡорт дәүләт балалар театры эшләй. Театр сәнғәтенә хеҙмәт итеүсе төрлө һөнәр эйәләре аҙ түгел, әммә улар араһында актер һөнәрен һайлаусылар театр нигеҙен тәшкил итә. Шуларҙың береһе - Арыҫлан Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театрының йәш актрисаһы Юлия МӨХӘМӘТЙӘНОВАнан ошо юлға нисек аяҡ баҫыуы тураһында һораштыҡ:**

# ҠЫЙЫУҘАР ҺӨНӘРЕ



- Театр юлын һайлармын, тигән уй бөтмәҫ хыялдарымда бөтөнләй булманы. Хатта ул юлдың ниндәй икәнен күҙ алдына ла килтермәй инем. Бәләкәй саҡтан бейергә яратам. Биш йәштән фортепьяноға, алты йәштән бейеү студияһына йөрөй башланым, сәнғәт мәктәбен тамамланым. Киләсәккә һөнәр һайлау мәле еткәс, атайым, театр сәнғәтен һайла, унда бейеүсе һәләтең дә, музыкаль белемең дә кәрәк булыр, оҡшаһа, уҡырһың, оҡшамаһа, үҙең ҡарарһың, тине. Ә минең хыялым бейеүсе булырға! Атайымдың һүҙен йыҡмай, ҡапыл ғына театр юлын һайланым. Сибай сәнғәт колледжында театр бүлеген дүрт йылға бер тапҡыр йыйялар, нәҡ шул йылда яңы төркөм туплана ине. Имтихандарҙы еңел генә тапшырып, уҡырға инеп киттем. Шиғыр һөйләттеләр, проза әҫәренән өҙөк уҡыным, бер мәҫәл һөйләргә тура килде. Йәшермәйем, ул мәлдә яттан һөйләү, тасуири уҡыу һәләтем йомшағыраҡ ине. Әле лә иҫемдә, буласаҡ уҡытыусыларым Вәкил Барый улы Йосопов менән Римма Лоҡман ҡыҙы Йәрмөхәмәтовалар ҙур ышаныс белдерҙеләр, өмөт уяттылар, бейетеп тә ҡаранылар, йырлап та күрһәттем.

Диплом алғас, эшкә ҡайҙа барырға тигән уй борсоманы, күңелем күптән Сибай драма театрына тарта ине. Яратҡан театрымда эшләүемә алты йыл да үтеп китте. Башта уҡ ролдәр булманы, әлбиттә, күмәк сәхнәләрҙә уйнаным. Тәүге ролем Азат Әхмәҙулла улы Нәҙерғолов ҡуйған "Тере тупраҡ" спектаклендә Көнһылыу булды. Шулай яйлап төрлө ролдәр өҫтөндә эшләй-эшләй, булған һәләттәрҙе күрһәтә килә генә хыялдарҙы тормошҡа ашырып була. Нисә роль уйнағанмындыр, һанағаным юҡ. Әлегә уйнаған иң сағыу, ҙур ролем - Анна Батурина пьесаһы буйынса Илсур Ҡаҙаҡбаев ҡуйған "Фронтовичка" спектаклендә Мария Небылица роле. Ике сәғәт ярым сәхнәнән төшмәй уйнайым был спектаклдә. Бөйөк Ватан һуғышы тураһындағы әҫәрҙә һуғышта ҡатнашҡан, аҙаҡ бейеү серҙәрен асыусы педагог ҡатынды, төп героиняны һынландырам.

Репетициялар башланғанда төрлө хафалар бар ине, әммә беҙ ауырлыҡтарҙан ҡурҡмайбыҙ, эшләйбеҙ, һөнәребеҙ шундай - ҡыйыу булыу. Артабан да сәнғәт йүнәлешендә уҡырға уй бар, тик әлегә шәхси бизнесым булғас, ваҡыт яғы тарыраҡ, бәләкәй балалар менән шөғөлләнеү күп ваҡытымды ала. Театрҙағы төп эшемдән тыш, үҙемдең "Созвездие" исемле театр һәм бейеү студиям бар. 60-тан ашыу балаға актер оҫталығы дәрестәре бирәбеҙ, бейеү серҙәрен өйрәтәбеҙ. Беҙҙә шөғөлләнгән балалар, дүрт йыл уҡығас, бейеү һәм актер оҫталығы буйынса танытма алалар. Үҙем дә бейеү сәнғәте буйынса белемемде камиллаштырып, юғары белем алыу ниәте менән йәшәйем, ниңәлер бала саҡ хыялым ташламай артымдан эйәреп йөрөй.

Ғөмүмән, бейеүсе һөнәрем төп эшемдә лә ныҡ ярҙам итә. Мәҫәлән, "Фронтовичка" спектаклендә ул, образға ярашлы, бик тә урынлы булды. Тамашасылар ҙа быны һиҙгәндер, тип уйлайым. Сибай тамашасыһы бик үҙенсәлекле бит ул. Таныш кешеләремде генә әйтмәйем, бөтөнләй белмәгән кешеләрҙең комментарийҙарын уҡыйым, ҡайһылары үҙҙәре килеп әйтә - шулай театр менән тамашасы араһында бәйләнеш барлыҡҡа килә. Театрға ғашиҡтар әллә ҡайҙан күренеп тора бит ул! Улар күп тә түгелдер, бәлки, әммә улар бар!

Сибай тамашасыларына әйткем килә: театрҙы яратығыҙ, спектаклдәргә йөрөгөҙ, сөнки тамашасыһыҙ театр булмай. Ҡасандыр атайымдың кәңәшенә ҡолаҡ һалыуыма ҡыуанам. Атайым үҙе лә ғорурлана ҡыҙы менән, минең өсөн был да бик мөһим.

**Радик ӨМӨТҠУЖИН,**
**А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театрының әҙәби-драматургия бүлеге етәксеһе.**

КӨЛКӨФӨ

# МӨХӘББӘТТЕҢ АЙЛЫ КИСТӘРЕНДӘ...

**Уҡыусы иғтибарына ижадҡа, асылда, шиғыр яҙыуға бәйле бер нисә ҡыҙыҡлы тарих тәҡдим итәм.**

## Физрук булыр инек...

Рәйес Түләк менән Беренсе Эткол урта мәктәбен тамамланыҡ. Ул минән бер йыл алда уҡып бөтөрҙө. Физкультуранан икебеҙҙе лә Хәлис Килдеғошов уҡытты. Физругыбыҙ һуңынан башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булып эшләгән ҡатынына Рәйес менән мине физкультуранан уҡытһа ла, ижадсы булып китеүебеҙ хаҡында әйтеп, "Ҡайҙа һинең шағирҙарың?" тип шаярткан.

Рәйес менән икебеҙҙең бер тышлыҡта "Буранбайҙың яҙған хатын уҡып" тигән китабыбыҙ сығып, Рәйес уҡытыусыбыҙға уны бүләк иткәндә өҫтәмә рәүештә ошо шиғырын яҙып биргән:

*Алайҙа физкультуранан*
*Һин уҡытҡанһың, Хәлис.*
*Шуға бит Әхмәр ҙә, мин дә*
*Шағир булдыҡ нәкәнис.*

*Тик ниндәй бәйләнеш бар һуң*
*Шиғыр менән физрала?*
*Кем быға яуап таба ала?*
*Тапмаҫ яҡын арала.*

*Ә бәйләнеш бар ул, бына*
*Яҡынса һәм һис шикһеҙ.*
*Һин әҙәбиәт уҡытһаң,*
*Физрук булыр инек беҙ.*

Хәлис Минәхмәт улы ла яуапһыҙ ҡалмаған, Рәйескә шиғыр менән үк булмаһа ла, һамағы менән яуаплаған:

*Телең булыу әйтмәй әле һин шағир, тип,*
*Йөрәк булыу әйтмәй әле һин физрук, тип.*

*Әммә ләкин кәрәк беҙгә икәүһе лә,*
*Шағиры ла, беҙгә кәрәк физругы ла.*

*Сәсән була алмаһа ла беҙҙә юл ярыусы бар,*
*"Хәрәкәттә - бәрәкәт"тән сыға шағир, яҙыусылар...*

## Учалыға сәфәр

1996 йылдың йәйендә Башҡортостан Яҙыусылар союзы рәйесе Рауил Бикбаев, Башҡортостан "Китап" нәшриәте директоры Ҡәҙим Аралбаев менән Учалы районына сәфәр ҡылдыҡ. Ҡәҙим ағай һор төҫтәге 9-сы моделле "Лада" менән китаптар тейәп барҙы. Осрашыуҙар үткәреп, ике көн йөрөгәс, Өфөгә ҡайтыр алдынан беҙҙең "Волга"ның тәгәрмәсе эшлектән сыҡты. Запас тәгәрмәс тә алмағанбыҙ. Учалы районы хакимиәтенең ул саҡтағы башлығы Вәкиф Ғәйфуллин беҙгә үҙ ҡулы менән машинаһының запас тәгәрмәсен алып биреп: "Өфөгә юл төшкәндә инеп алырбыҙ әле", - тине.

Хушлашыу мәжлесендә Рауил Төхфәт улы үҙенә хас оригиналлек менән район хакимиәте башлығы Вәкиф Шаһиморат улына шундай һүҙ әйтте:

*Яйыҡ буйҡайҙары бигерәк йәмле,*
*Аҡ тирмәләр унда ҡоророға.*
*Ҡайҙа ғына барһаң, дуҫ-иш кәрәк,*
*Тәгәрмәсен алып торорға...*

Ҡәҙим Әбделғәлим улы, һәр ваҡыттағыса, гөрләтеп йырлап ебәрҙе:

*Ҡаһым түрә менгән һор юрғаның, вай кем,*
*Маңлайында булыр урайы.*
*Ҡаһым түрә фарман биргән саҡта, вай кем,*
*Уң ҡулында булыр ҡурайы...*

Һүҙ әйтергә сират миңә етте. Рауил ағайға еткереп район башлығына маҡтау һүҙе лә әйтә алмам, уның менән түгел осрашыуым, Ҡәҙим ағай һымаҡ моңло итеп халыҡ йырын да башҡарыу мөмкин түгел. Шулай ҙа юмор юлын һайланым да, "Ҡаһым түрә" мотивында, Ҡәҙим ағайҙың ултырып килгән машинаһын күҙ уңында тотоп, йырлап ебәрҙем:

*Ҡәҙим түрә менгән һор юрғаның, вай кем,*
*Маңлайында һаны - "дивәтке".*
*Ошо йырҙы йырлап, Ҡәҙим ағай, вай кем,*
*Китабымды килә тиҙләткем...*

## Коллектив шиғыр

Урамда бер яҡташым осрап, ҡыҙыҡлы ваҡиға хаҡында һөйләп көлдөрөп китте. Элегерәк булған был хәл. Эшселәр ятағындағы бер бүлмәлә дүрт башҡорт егете бергә йәшәгән. Улар төрлө урында һәм төрлө сменала хеҙмәт итеп, бүлмәлә ял көндәрендә генә осраша алған. Бер көн башҡа бүлмәләштәре эштә саҡта бүлмәләге егет күңеленә килгән бер генә шиғыр юлын ҡағыҙға яҙған:

Мөхәббәттең айлы кистәрендә...

Артабан нимә тип яҙырға ла белмәйенсә, уйланып ултырған да, башына һүҙ килмәгәс, ҡағыҙын өҫтәл өҫтөндә ҡалдырып, эшенә киткән. Шул саҡ икенсе бер егет эштән ҡайтып, һыуытҡысты асып ҡараған да, теге ҡағыҙға шундай һүҙҙәрҙе асыуланып яҙып ҡуйған:

Кемегеҙ эсте минең ҡатыҡты?

Уныһы ла ҡырсынып бүлмә буйлап йөрөгән-йөрөгән дә, тышҡа сығып киткән. Өсөнсө егет тә сменаһынан ҡайтып, өҫтәлдәге яҙыуҙы уҡып, берсә етди төҫ алып, берсә көлөп, үҙенең юлын өҫтәгән:

Мин эсмәнем, минән күреп ҡуйма...

Өсөнсө егет тә ашыҡ-бошоҡ тамаҡ ялғаған да, үҙ йомошо менән ҡайҙалыр юлланған.

Ниһайәт, дүртенсе егетебеҙ эштән ҡайтҡан. Өҫтәлдәге яҙыуҙы уҡып, ул да берсә көлгән, берсә етди уйланған да, шиғырҙың дүртенсе юлын теркәгән:

Һеҙҙең менән йәшәү ялҡытты...

Һөҙөмтәлә шундай шиғыр хасил булған:

Мөхәббәттең айлы кистәрендә...
Кемегеҙ эсте минең ҡатыҡты?
Мин эсмәнем, минән күреп ҡуйма.
Һеҙҙең менән йәшәү ялҡытты...

Шундай урынлы һорау тыуа, егеттәрҙең ҡайһыһы шағир булған икән?

- романтик тәүге егетме?
- ҡатыҡын йәлләгән икенсеһеме?
- аҡланырға яратҡан өсөнсө егетме?
- дүртенсе юлды яҙыусымы?

Миненсә, дүртенсе егеттер, нәҡ ул тәүге өсәү яҙған юлдарҙы дөйөмләштереп, дүрт юллыҡты уңышлы итеп тамамлап ҡуйған. Һеҙҙеңсә кем?

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

**✓ Эйе, бөтөн ерҙә лә крандан аҡҡан һыу идеалдан алыҫ тора. Эш уның бик ҡаты йәки бик йомшаҡ булыуында ла түгел, ә сәләмәтлек өсөн хәүефһеҙ булһын өсөн уға хлор ҡушылыуҙа.**



ИНТЕРНЕТТАН



# ҠАРАБОЙҘАЙ ФАЙҘАҺЫ

■ Диетолог Полина Журавлева әйтеүенсә, колбаса үҙе генә түгел, уның тышлығы ла сәләмәтлеккә зыян итә. Бөгөн уның ниндәй төрө генә юк: целлофан, коллаген, фиброз һәм полиамидлы. Уларҙың ҡайһыларын анһат ҡына һыҙырып алып була, ҡайһыларын колбасанан айырып алырлыҡ та түгел. Коллагендан яһалғандары тәбиғи күренһә лә, уларҙы барыбер ашарға ярамай. Бөтөн тышлыҡтар ҙа буяла, нығыраҡ булһын өсөн ҡағыҙ өҫтәүҙәре лә бар. "Колбаса тышлығы ашҡаҙан-эсәк трактында ҡала, йәғни улар бөтөнләй эшкәртелмәй. Шуға ла уларҙы ашарға тәҡдим итмәҫ инем", - ти эксперт.

■ Табип-кардиолог Герман Гандельман ҡарабойҙай деменция үҫеше хәүефен түбәнәйтә, тигән фекерҙә. Әгәр ҙә был ярманы йыш ашайһығыҙ икән, ул холестерин кимәлен 10 процентҡа түбәнәйтәсәк. "Тимәк, был баш мейеһендәге ҡан әйләнешен яҡшырта һәм ҡан тамырҙары деменцияны үҫеүҙән әкренәйтә", - тип билдәләй ул. Гандельман ҡарабойҙай нейрон бәйләнештәре барлыҡҡа килеүгә лә этәргес булып тора. "Һәр хәрәкәт, хәтер ошо бәйләнештәр барлыҡҡа килеүгә бәйле", тигән һығымта яһай ул. Ә бына табип Александр Мясников гемоглобин түбән булғанда ҡарабойҙай ашарға кәрәк тигән фекерҙе уйҙырма тип иҫәпләй. Уның составындағы тимер организм тарафынан эшкәртелмәй. Доктор был осраҡта ит һәм балыҡҡа өҫтөнлөк бирергә тәҡдим итә, сөнки был продукттарҙағы тимер яҡшыраҡ үҙләштерелә.

■ Яҙғы авитаминоз мәлендә организмды витаминдар менән байытыу өсөн яңы ғына һығылған йәшелсә һәм емеш-еләк һуттары ҡулланырға мөмкин. Был турала академик Ройтберг клиникаһы табип-эндокринологы Наталия Тананакина белдерә. Әҙер һуттарға өҫләнлөк бирәһегеҙ икән, составында витаминдар булһын, ә бына тәбиғи шәкәрҙән тыш яһалмаһы өҫтәлгән икән, ундай магазин һутының файҙаһы юҡ. "Витаминдар ҡытлығына еңел ҡарарға ярамай, уларҙың береһе генә етешмәһә лә матдәләр әйләнеше боҙолоуы, хроник сирҙәр барлыҡҡа килеүе, һимереү барлыҡҡа килеүе ихтимал", - ти Тананакина. Табип рационға цитрус емештәре, киви һәм йәшел төҫтәге йәшелсәләр, тәмләткестәр өҫтәргә кәңәш итә. Былар ҙан тыш, еләктәр, сәтләүектәр, ҡуҙаҡлылар, йомортҡа, балыҡ, һөт ризыҡтары организмды файҙалы матдәләр менән тулыландырырға булышлыҡ итә.

■ Көньяҡ Урал дәүләт университеты ғалимдары ризыҡты оҙағыраҡ һаҡларға ярҙам итеүсе һәм сүп булараҡ ташланғас, ике аҙна эсендә сереүсе биоактив пленка уйлап тапҡан. Уның составында аҡһым гидролизаты бар, тап ул ризыҡтың һаҡлау ваҡытын тағы ла 3 көнгә оҙайтырға мөмкинлек бирә. Университеттың "Аҙыҡ һәм биотехнологиялар" кафедраһы доценты Оксана Зинина билдәләүенсә, был аҡһым гидролизатын уҡыу йортонда уйлап табылған технология буйынса яһайҙар. Пленка иһә өс төрлө составтан тора, натрий альгинаты, агар-агар һәм пектин. Уларҙың өсөһөндә лә йәбештереүсе компонент булып глицерин, ә әүҙем компонент булып аҡһым гидролизаты тора. Составы тулыһынса тәбиғи булған был биоактив материал ике аҙна эсендә сереп юҡҡа сыға. Шуға ла ул экологияны һаҡлау йәһәтенән дә файҙалы булмаҡсы.

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# УЛ-ҠЫҘҘАРЫБЫҘҒА...

## иң тәү кәрәк нәмә - иман, тигән

**Илебеҙ халҡының киләсәгенә битараф булмаған яҡташтарыбыҙҙың милләт, тел буйынса һәр төрлө проблемаларҙы ҡуҙғатып, милли тормошобоҙҙо артабан үҫтереү һәм яҡшыртыу буйынса әйткән фекерҙәрен, кәңәштәрен матбуғат биттәрендә яратып уҡыйым. Ошо юҫыҡта эҙләнеп, йылдар буйы өйҙә йыйылып барған гәзиттәрҙе лә йыш ҡына аҡтарырға гәҙәтләнгәнмен.**



Ете йыл элек сыҡҡан "Йәшлек" гәзитенең береһендә "Ысын башҡорт ниндәй булырға тейеш?" тигән мәҡәләгә ҡабаттан юлыҡтым. Зилә Рәхмәтуллинаның "Башҡорттоң кодексы" тип аталған бәләкәй генә китабының йөкмәткеһе тулыһынса билергән ине унда. Һәр башҡорт кешеһендә булырға тейешле 27 гүзәл сифат һаналып киткән. Шуларҙы ныҡ иғтибар менән ҡабаттан уҡып сыҡтым. Ысын башҡорттоң исеме мосолман, йәки милли традицияларға бәйләнгән булырға тейешлеге хаҡындағы талаптан башланып киткән был теҙмәлә артабан илһөйәрлек, телһөйәрлек, эшһөйәрлек, атай-әсәйгә ихтирам, шәжәрәнде белеү, әҙәплелек кеүек сифаттар һаналып китә. Ир-аттың эйәрҙә нығлы ултырыу, йәйәнән атырға, көрәшә белеү кәрәклеге һәм һәр башҡорттоң музыка ҡоралында уйнарға, башҡа телдәрҙе өйрәнеү, һәр саҡ аҡсалы булыу зарурлығына тиклем бар. Боронғо ата-бабаларыбыҙҙа булған, шулай уҡ хәҙерге һәммә башҡортҡа хас булырға тейешле яҡшы һыҙаттарҙы ошо исемлеккә индерергә тырышҡан автор үҙ милләтенең вәкилдәрен һәр саҡ иң яҡшы, бай кешеләр итеп күргеһе килә. Афарин!

Ата-олатайҙарыбыҙҙан күсә килгән һәм артабанғы быуындарыбыҙҙа һаҡланып ҡалырға тейешле булған иң ҡиммәтле милли үҙенсәлегебеҙ хаҡында минең дә һәр саҡ әйтер һүҙем бар. Ҡартатайҙарыбыҙ Аллаһ Тәғәләнең рәхмәте менән мең йыл тирәһе элек Ислам динен ҡабул итеп алған. Әгәр ҙә Октябрь революцияһына ҡәҙәр йәшәгән мәшһүр шағирыбыҙ - мәғрифәтсе Аҡмулла олатайыбыҙҙан шул осорҙа "башҡорт өсөн иң әүәл кәрәк нәмә" хаҡында һорашһаң, һис кенә лә икеләнмәйенсә, "иман", тип яуап бирер ине, моғайын. "Иң әүәл кәрәк нәмә - иман, тигән, Ахирәт эштәренә инан, тигән...", тип башланып киткән уның нәсихәттәре бына шундай хистәргә этәрә.

Үкенескә, "иман" төшөнсәһен дөрөҫ аңламағандарыбыҙ күп. Бәғзе берәүҙәр "Кеше эсмәһә, тартмаһа һәм баҫалҡы булһа - ана шул инде иманлы булыу", тип кенә сикләнә һәм бындай бөйөк төшөнсәне бөтөнләйгә күҙ алдына килтерә алмай. Ә иман - ул фәҡәт Аллаһ Тәғәләгә ныҡлы ышаныу һәм Уға буйһоноу менән бәйле төшөнсә. Һәр мосолман кешеһе мотлаҡ яттан белергә һәм һис икеләнеүһеҙ ышанырға тейешле иман шарты - алты: 1) Раббыбыҙҙың барлығына, берлегенә, Унан башҡа һис бер илаһ юҡлығына ышаныу, 2) Уның фәрештәләренә, 3) бәйғәмбәрҙәренә, 4) китаптарына, 5) Ҡиәмәт көнөндә Ахирәттә ҡабаттан тереләсәккә, 6) тәҡдиргә ышаныу. Ошо хаҡиҡәтте беҙҙең ата-бабаларыбыҙ бик яҡшы белгәнлеген һәм уны быуаттарҙан-быуаттарға бер-береһенә тапшырып килгәнлеген иң беренсе нәүбәттә күҙ уңында тоторға бурыслыбыҙ.

Бына шул бөйөк аманаттың быуындан-быуынға күсеү процесы Октябрь ихтилалына тиклем үк килеп еткән. Эйе, ысынлап та, тик революцияға тиклем генә! Унан, һәр төрлө шауҡымдарға бирелеп, "юҡтырһың да, Алла..." тип икеләнгән саҡтар ҙа булмаған түгел. Хатта, Бөйөк Раббыбыҙҙы хурлауға йүнәлтелгән теләһә ниндәй таҡмаҡтар сығарып һамаҡлауҙарға ла барып еткәнбеҙ бит, әстәғфируллаһ! Шайтан хөсөтөнә бирелеүҙән был, әғүҙубиллаһ (Аллаһҡа һыйынам). Ана шул осорҙарҙа меңәрләгән дин бел-

ҠАТЫН-ҠЫҘ ҠОЛАҒЫНА...

# ҺЫУ МЕНӘН ЙЫУЫНАҺЫҢМЫ?



**Оҙаҡ йылдар инде косметологтар һәм дерматологтар араһында, нимә файҙалыраҡ - битте һыу менән йыуыуымы, әллә был маҡсатта махсус косметик саралар ҡулланыуымы, тигән бәхәс бара.**

Бығаса бихисап косметология клиникалары, һыу битте ҡорота, шуға күрә иртәнге һәм киске процедуралар өсөн мотлаҡ косметик һөт, лосьон йәки тоник ҡулланыу зарур, тип ҡәтғи белдерҙе. Был фекер бит тиреһе ҡороуына бәйле тикшеренеүҙәр һөҙөмтәләре менән ныҡытылып килде. Йәғни гәҙәти крандан аҡҡан һыу менән йыуынғандан һуң бит тиреһе тартылып, "эзбиз" пленкаһы менән ҡаплана. Ҡайһы бер айырым төбәктәрҙәге һыуҙан һуң тирене "эзбиз" пленкаһы урынына тутлы, тоҙло пленка ла ҡаплауы ихтимал. Әгәр йыуынғандан һуң шунда уҡ тукландырыусы йәки дымландырыусы косметик крем һөртһәгеҙ, тире үҙ функцияларын дөрөҫ башҡармаясаҡ. Шуға күрә һыу менән йыуыныу ҡәтғи тыйыла ине.

Әммә XX быуат һуңында косметик һөттөң һөҙөмтәһеҙерәк һәм зыянлы булыуы асыҡлана. Беренсенән, биттәге косметиканы, шул иҫәптән көн оҙоно ултырған саңды иретеп, ул тиренең төпкө ҡатламына бактериялар үтеп инеүен еңеләйтә. Икенсенән, һауыты асылған косметик һөттә һыуыҡтыҡта һаҡламаһағыҙ, ул 3-5 көндән үҙе үк микробтар үрсетмәһенә әйләнә. Өсөнсөнән, биткә таҙартыу өсөн һөртөлгән сараны яҡшы итеп йыуып алмағанда, ул һауа менән ҡатнашып, токсик пленка барлыҡҡа килтереүе һәм уның аҫтында ялҡынһыныу процесы башланыуы ихтимал.

Дерматологтар битте һыу менән йыуырға ярамаған бер нисә сир һәм ваҡытлыса сәбәп бар, тип иҫәпләй. Мәҫәлән, майлы себорея - май биҙҙәре дөрөҫ эшләмәүгә бәйле тире ҡатламдарының ауырыуы. Майлы себореяны дауалағанда битте таҙартыу өсөн махсус препараттар ҡулланыла, шуға күрә дауаланыу осоронда битте һыу менән йыуыу тыйыла. Йәки етди косметологик процедура эшләткәндән һуң тирене ваҡытлыса йыумай тороу хәйерле. Мәҫәлән, гликоль пилингы (химик пилингтың бер төрө) эшләгәндән һуң реабилитация осоронда тирене таҙартыусы һәм һаҡлаусы махсус крем ҡулланыу зарур. Барлыҡ башҡа осраҡтарҙа - ҡоро, майлы, ҡатнаш тире өсөн таҙа һыу ҡулланырға кәңәш ителә. Бөгөн косметологтар һабынға ҡаршы түгел, әммә ғәҙәти һабын урынына үҫемлек майҙарынан һәм үлән экстракттарынан эшләнгән тәбиғи һабынға өҫтөнлөк бирелә.

Ләкин беҙҙең тәнебеҙ биттән генә тормай. Тәнебеҙҙең башҡа өлөштәре менән нимә эшләргә? Мәҫәлән, ҡайҙалыр сәсебеҙҙе йыуһаҡ, улар бала сәсе кеүек йомшарып китә, икенсе урында һаламға әйләнә, ҡайһы берҙә сәстәрҙән шампунды ғүмерҙә лә йыуып бөтөрә алмаҫтай тойолоп китә. Хәҙер көн һайын ингән душ сәсегеҙгә һәм тирегеҙгә нисек тәьҫир иткәнен күҙ алдына килтерегеҙ инде.

Эйе, бөтөн ерҙә лә крандан аҡҡан һыу идеалдан алыҫ тора. Эш уның бик ҡаты йәки бик йомшаҡ булыуында ла түгел, ә сәләмәтлек өсөн хәүефһеҙ булһын өсөн уға хлор ҡушылыуҙа. Халыҡ инде быға өйрәнеп бөткән, хатта уның еҫен дә һиҙмәй. Ә бит хлор - ауырыу тыуҙырыусы бактерияларҙы һәм вирустарҙы ғына түгел, ә... кешенең үҙен дә үлтереүсе матдә. Яйлап ғүмерҙе ҡыҫҡарта ул. Һуңғы тикшеренеүҙәр шуны күрһәтә: душ ингәндә хлор парҙарын даими еҫкәү аллергиянан алып баш ауырыуына, хатта яман шеш ауырыуына сәбәп булыуы мөмкин. Юҡҡа ғына хлор химик ҡорал - иприт һәм фосген сифатында ағыулау газы составына инмәй. Һыу торбаларында хлор санитар нормалар буйынса көйләнһә лә, берәү ҙә коммуналь хеҙмәттәрҙең уны

*✓ Һәр башҡорт кәмендә өс тел белергә тейешлеген дә хуплайым. Шуларҙың береһе - мотлаҡ Ҡөрьән уҡыу менән бәйле булырға тейеш, тигән инаныуҙамын. Изге китабыбыҙҙы уҡый алырлыҡ мөмкинлек һәр кемебеҙгә бирелгән.*

гестәрен - имам һәм мөғәллимдәрҙе аттырып, мәсеттәребеҙҙе емертеп, мәктәптәрҙә дини уҡыуҙы тыйып, кешеләрҙе әүҙем рәүештә атеистик, йәғни динһеҙлек рухында тәрбиәләй башлауҙары сәбәпле, хәҙерге көнөбөҙҙә "иман" тип аталған ошо ҡиммәтле төшөнсәне бөтөнләйгә тиерлек белмәү хәленә килгәнбеҙ ҙә инде. Юғары уҡыу йорттарында тырыша-тырыша атеизм фәненән имтихандар бирҙек, биология дәрестәрендә дарвинизм тәғлиматенә яраҡлаштырып, ябай итеп әйткәндә, маймылдарҙан шәжәрә төҙөүгә тиклем барып етә яҙҙыҡ!.. Был - үкенесле. Ә иң үкенеслеһе - бөгөнгө көн дини асылыбыҙға ҡабаттан ҡайтыу мөмкинлеге бирелгәс тә, ҡылған оло хаталарыбыҙ өсөн Аллаһ Тәғәлә алдында тәүбә итеп, иманға килергә тырышыу урынына, күпселегебеҙ әле булһа динебеҙгә битараф булып ҡала килдебеҙ һәм үҙебеҙ үҙебеҙгә оло ғәҙәлһеҙлек ҡылабыҙ. Ата-бабаларыбыҙ барыһы ла яттан белгән һәм һис икеләнеүһеҙ ысын күңелдән ышанған иман шарттарын белеүсе кешеләребеҙ арабыҙҙа хәҙер бик һирәк ҡалған. Ана шул донъялар боларышҡан йылдарҙан алып, ошоғаса күпселек "дин ғилемен тик мулла ғына белергә тейеш тә, башҡалар һис бер ни аңламайынса һәм белмәйенсә аят уҡыу мәжлестәренә генә барып, бит һыйпап ҡына ултырырға тейеш" тигән төптән хаталы уйҙа.

Әйткәндәй, әлеге "кодекс" проекты авторы Зилә Рәхмәтуллина уҡыусыларҙың кәңәштәре ярҙамында уны тағын да тулыландырыу мөмкинлеген күҙаллаған. Бына ошо мәҡәләне яҙыу өҫтөндә эшләгәндә байтаҡ йылдар дин юлында булған һәм шәриғәт ҡанундарын тәрән белгән тарих фәндәре кандидаты Фуат Сөләймәнов менән дә әңгәмәләштем. Шундай ҡағиҙәләр йыйынтығы берәй ҡасан, ысынлап та, төҙөлгән хәлдә, беҙ унда иң беренсе пункт итеп "Һәр башҡорт алты иман шартын белергә, Ислам дине терәктәрен - фарыз ғибәҙәттәрҙе өйрәнергә, харам менән хәләлде айырырға тейеш", тип яҙып ҡуйырға кәңәш итер инек. Был талаптарҙы боронғо бабайҙар уйлап сығармаған, улар - Аллаһ илсеһе Мөхәммәт с.ғ.с ҡуйған һәм мотлаҡ үтәлергә тейеш булған Ислам диненең нигеҙҙәренән алынған.

Мосолман исеме тигәндән, уны ла беҙ исем өсөн генә йөрөтөргә тейеш түгелбеҙ. Башҡортлоҡ тураһында һүҙ йөрөткәндә динебеҙ хаҡында онотоу йәки милләтебеҙҙе динебеҙҙән айырып ҡарау һис кенә лә килешмәҫ. Динебеҙҙе ниндәйҙер бер айырым кешеләр генә шөғөлләнергә тейешле "хобби" һымаҡ итеп һанау ата-бабаларыбыҙҙың ғөрөф-ғәҙәттәренә һис кенә лә тап килмәй. Милләтебеҙҙең һәр яҡлап гармоник үҫешен теләйбеҙ икән, уның тамыры, иң беренсе нәүбәттә, иман менән һуғарылырға тейеш. Баҡсалағы түтәлгә һәр төрлө ҡиммәтле, файҙалы органик һәм минераль ашламалар һалып та, уға һыу ҡоймаған хәлдә, был түтәлдә һис бер ниндәй емеш үҫтерә алмаған һымаҡ, халҡыбыҙҙың диндән тыш үҫеше хаҡында хыялланыу дөрөҫ булмаҫтыр. Бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт с.ғ.с. хәҙистәрҙә иман килтергән кешелә булырға тейешле етмештән ашыу гүзәл сифатты һанаған. Был - ғәрәптәр өсөн генә төшөрөлгән дин түгелләген барыбыҙ ҙа беләйек. Үҙебеҙҙе ошоғаса мосолман тип һанап йөрөүебеҙ, әлбиттә, бик яҡшы. Әммә һәр мосолман кешеһе мотлаҡ белергә тейешле ана шул минимум хаҡында онотмайыҡ һәм уларҙы мәҙрәсә белеме булған имамдарыбыҙҙан өйрәнәйек! Әгәр беҙ Аҡмуллабыҙ нәсихәттәрендә әйтелгән "иң әүәл кәрәк нәмә"не өйрәнмәйбеҙ һәм уның ҡиммәтле кәңәштәрен тотмайбыҙ икән, ошо данлыҡлы остазыбыҙҙың исемен вуздарға, урамдарға, мәктәптәргә биреүебеҙ, уға һәйкәлдәр ҡуйыуыбыҙҙан һәм "йөҙ шәхес" исемлегенә индереүебеҙҙән дә һис бер ниндәй файҙа булмаясаҡ. Ризаитдин Фәхретдин, Мифтахетдин Аҡмуллаларыбыҙҙың васыяттарын үтәп йәшәгән хәлдә генә беҙ уларҙы ихтирам итеүселәрҙән булып, уларҙың ысын фекерҙәштәре була алабыҙ!

Юғарыла күрһәтелгән талаптар проектының икенсе пунктында "...ысын башҡорт тормошта халҡының лайыҡлы, үрнәк күрһәтерлек улы һәм ҡыҙы булырға тырыша, башҡа милләттәр менән аралашҡанда үҙен абруйлы тота", тигән юлдар бар. Ифрат та дөрөҫ! Шулай уҡ һәр башҡорт кәмендә өс тел белергә тейешлеген дә хуплайым. Шуларҙың береһе - мотлаҡ Ҡөрьән уҡыу менән бәйле булырға тейеш, тигән инаныуҙамын. Изге китабыбыҙҙы уҡый алырлыҡ ғәрәп яҙыуын һәм телен өйрәнеү, ҡыҫҡа ғына мөһим аяттарҙы ятлап алыу мөмкинлеге һәр кемебеҙгә бирелгән.

Элегерәк, мин бала саҡта, аят мәжлестәрендә оло кешеләр барыһы ла тиерлек бер-бер артлы ҡыҫҡаса ғына булһа ла аяттар уҡый торғайны. Хәҙер тик мулланан уҡытып алыу менән генә сикләнеүҙәр һис кенә лә шатландырмай. Мәктәптәребеҙҙә дин дәрестәре уҡытылмай, әлбиттә, әммә был беҙҙең динебеҙҙе өйрәнмәй, ғәфләттә (вайымһыҙлыҡта) йәшәүгә сәбәп булып торорға тейеш түгел. Иң кәрәк ошо ғилемде кистәрен мәсеткә барып булһа ла үҙләштереү фарыз. Бына шул хаҡта ине әйтер һүҙем, ҡәҙерле туғандар. Әссәләмү ғәләйкүм үә рахмәтуллаһи үә бәрәкәтүһ.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

күҙәтеп тороуына инана алмай. Ҡайһы бер осраҡта хәл-торош үҙе үк юғары концентрация һалыуҙы талап итә. Мәҫәлән, яҙғыһын ҡыш буйына яландарҙа, ҡар өҫтөндә тупланған бысраҡ тупраҡ аша һыуға эләгә, бысраныуҙың юғары кимәлен нейтралләштереү өсөн хлор ҡулланыла. Йәки нығ эҫе ваҡытта һыу яткылыктарында бактериялар күпләп үрсей башлай, ошо ваҡытта ла һыуға хлор күпләп һалына.

Әлбиттә, ғалимдар һыуҙы хәүефһеҙ таҙартыу тураһында уйлана. Сөнки кеше 80 процентҡа һыуҙан тора һәм уның сәләмәтлеге туранан-тура һыуҙың сифатына бәйле.

Һыу нигеҙендә тирене тәрбиәләү өсөн бына тигән тәбиғи саралар эшләргә мөмкин. Иң ябайҙары - үҫемлек экстракттарынан эшләнгән боҙ кубиктары. Уларҙы әҙерләү өсөн фильтр аша үткәрелгән таҙа һыу һәм үҫемлек компоненттары кәрәк: майлы тире өсөн - кипкән кесерткән һәм йәшел сәй, ҡоро тире өсөн - роза сәскәләре таждары һәм яңы ғына һыҡтырылған ҡурай еләге һуты, нормаль тире өсөн - кипкән гөлйемеш, ҡатнаш тире өсөн - һоло. Артабан таҙа һыуҙы 80 градусҡаса йылытып (ҡайнатырға ярамай), уны әүҙем ингредиент (1 ҡалаҡ үҫемлек ҡатнашмаһына 1 стакан һыу) өҫтөнә ҡойорға, ҡапҡас ябырға һәм һыуытып, һөҙөргә. Артабан формаларға ҡойоп туңдырырға. Көн дә иртән йыуынғандан һуң ошо кубиктарҙы битегеҙгә ышҡығыҙ: боҙ ҡан әйләнешен яҡшырта, коллаген (тиренең тығыҙлығы өсөн яуап биреүсе аҡһым) синтезын яҡшырта, шешенеүҙе бөтөрә.

Майлы тире өсөн имән ҡайырыһынан һыу төнәтмәһе әҙерләргә мөмкин: 2 ҡалаҡ ваҡланған ҡайырыға бер стакан һыу ҡойорға һәм был ҡатнашманы һыуытҡысҡа алып ҡуйырға кәрәк. Көнөнә бер-ике тапҡыр битегеҙҙең майлы өлөшөн шул төнәтмә менән таҙартығыҙ, ул май биҙҙәренең эшмәкәрлеген әкренәйтә. Төнәтмәне һыуытҡыста бер аҙна тоторға мөмкин, бер аҙна үткәс, яңы төнәтмә эшләргә кәрәк.

*ТАБИП КӘҢӘШЕ*

# МАГНИТ БУРАНЫНАН ҠУРҠҺАҢ...



**Рәсәй фәндәр академияһының йыһанды тикшереү институты мәғлүмәттәренә ярашлы, марттың икенсе яртыһында көслө генә магнит бурандары көтөлә. Был мәлдә күптәр сәләмәтлектәре насарайыуы тураһында белдерә. Ә бына белгестәр әйтеүенсә, магнит бурандары кешегә тәьҫир итмәй һәм был осор госпитализация һәм үлем хәүефе артыуына килтермәй.**

"Реанимацияла күп йылдар эшләйем һәм магнит бурандары мәлендә кешеләрҙең күберәк ауырыуын күргәнем юҡ. Үлем осраҡтары арта тигәне лә уйҙырма", - ти Мәскәүҙең Ворохобов исемендәге 67-се дауаханаһының кардиология һәм реанимация бүлеге етәксеһе Екатерина Кошкина. Магнит бурандары кешегә генә түгел, кардиостимуляторға ла тәьҫир итмәй: бындай көндәрҙә ҡорамалдарҙың эшендә бер тайпылыш та күҙәтелмәй. Табип фекеренсә, пациенттарҙың үҙен насар тойоуы ноцебо эффекты менән бәйле: кешегә һыу биреп, ул ағыуланған тип әйтәһең икән, организм шунда уҡ үҙен ағыуланғандағы кеүек "тота".

"Беҙгә бер ваҡыт гипертоник криз кисергән ҡатынды килтерҙеләр. Магнит бурандары ваҡытында үҙемде гел насар тоям, тине ул. Баҡтиһәң, алдан күҙаллауҙарҙы тыңлап, календарҙа был көндәрҙе билдәләп сыға ла, көтә башлай икән. Иртәнсәк мотлаҡ башы әйләнеп, йөрәге болғанып уяна һәм тиҙ ярҙам саҡыра. Ысынында иһә, ул ике көн дауамында дарыуҙарын эсергә онотҡан булыуы, шул арҡала нығ ҡына көйәләнеүе, етмәһә, йоҡларға ятыр алдынан тоҙло балыҡ ашауы асыҡланды. Шуға ла ҡан баҫымы кинәт күтәрелеп киткән дә инде", - ти табип.

Ә кем дә кем магнит бурандарына әҙерләнә башлаған, уларға тағы ла бер кәңәш: ике ай буйына ҡан баҫымын теркәп барығыҙ, һуңынан был көндәрҙә магнит бурандары булғанмы, юҡмы икәнен тикшерерһегеҙ. Үҙегеҙҙе көсләп ниндәйҙер сиктәргә бикләмәгеҙ, насар уйҙарҙан, күҙаллауҙарҙан азат һәм, әлбиттә, сәләмәт булығыҙ!

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ҺОРАҒЫҘ - АЛЫРҺЫҒЫҘ

Электр лампочкаһы энергияны төрлө йүнәлештә тарата, шуға күрә уның нурҙары хатта ҡатырға киҫәген дә тишеп сыға алмай. Шундай уҡ энергия ҡулланған лазер хатта металды ла тишеп үтергә һәләтле, сөнки уның нуры бары тик бер нөктәгә генә йүнәлтелгән. Ғаләмдәге һәр тулҡын йәиһә тирбәлеш билдәле бер йышлыҡҡа эйә һәм билдәле бер оҙонлоҡтағы S рәүешле һыҙат итеп билдәләнә. Уның оҙонлоғо ни тиклем ҡыҫҡа, тирбәлеш йышлығы шул тиклем юғарыраҡ.

Быны фортепиано ҡылдарында күҙаллау уңышлы: иң юғары ноталарҙы иң ҡыҫҡа ҡылдар бирә, ҡыл ни тиклем шәберәк тирбәлә, нота тауышы шул тиклем юғарыраҡ.

Яҡтылыҡ менән дә шулай. Электр лампаһы бер үк ваҡытта төрлө оҙонлоҡтағы ҙур яҡтылыҡ тулҡындарын бирә. Һәр тулҡын айырым үҙенсәлеккә эйә булғанлыҡтан, ҡайһы берҙәре башҡаларына ҡаршы килеп, уларҙың көсөн кәметә йәиһә бөтөнләй юҡҡа сығара. Һөҙөмтәлә лампочка бер үк ваҡытта төрлө йүнәлешкә ҙур булмаған энергия тарата.

Лазер бөтөнләй башҡаса эшләй. Линзаларҙың ҡатмарлы системаһы арҡаһында ул бер төрлө генә яҡтылыҡ тулҡынын сығара һәм уның көсөн күп тапҡырға арттырып, бер генә йүнәлеште яҡтырта. Электр лампочкаһынан лазерға әйләнеү кешенең башлаған эшенә мөкиббән бирелгәнлеген аңлата. Нимәгәлер нығ бирелһәгеҙ, башҡа бер нәмә тураһында ла уйлай алмайһығыҙ, мейегеҙ лазерға оҡшап китә һәм уйҙарығыҙҙы ҙур энергия менән зарядлай. Энергия менән байытылған уйҙар ҙур көскә эйә ҙур магнит ҡырын генерацияларға, тимәк, уларҙы тиҙ арала матдиләштерергә һәләтле.

Әгәр ниндәйҙер әһәмиәтле эш башҡарырға теләһәгеҙ, аңығыҙҙың энергетик һаҡланыуын тәьмин итегеҙ һәм психик энергияғыҙҙы юғалтыуҙы кәметегеҙ.

Мәҫәлән, ошо китапты яҙғанда мин бөтөн донъянан ситләшеп, биш көн бер ниндәй шылтыратыуҙарға ла яуап бирмәнем, электрон почтаны уҡыманым, бары тик проектты тормошҡа ашырыу менән шөғөлләндем.

Әгәр ошо ваҡытта эшкә йөрөһәм, хатта ике һүҙҙе лә бәйләй алмаҫ инем. Шуға түбәндәге тәжрибәне эшләп ҡарарға тәҡдим итәм: бер ай һәр дүшәмбе бер һүҙ ҙә әйтмәй йөрөп ҡарағыҙ - иртәнән кискә тиклем. Әгәр үҙегеҙгә шундай маҡсат ҡуйһағыҙ, тимәк, телефонға ла яуап бирмәҫкә тейешһегеҙ. Кешеләр һеҙҙең дүшәмбе һөйләшергә теләмәгәнегеҙҙе бик тиҙ аңлап алыр һәм дүшәмбе көн шылтыратыуҙан туҡтар. Бәхәсләшә алам: ошо көндө һеҙ бер аҙналыҡ эшегеҙҙе теүәлләп ҡуя аласаҡһығыҙ. Иғтибар туплау көсө шунда - ул һеҙҙе ҙур энергия менән тәьмин итә.

Әгәр был көндә бер нәмә лә ашамайынса бары тик һыу эсеп кенә торһағыҙ - тағы ла яҡшы. Быға саҡлы бер ваҡытта ла тоймаған көс тойорһоғоҙ. Ни өсөн, тип һорамағыҙ, бары быны эшләп ҡарағыҙ!

Тағы бер тәҡдим: һәр иртән бер генә мәсьәләне хәл итеү бурысын ҡуйығыҙ. Үҙегеҙгә: "Бөгөн мин бер генә мәсьәләне хәл итергә теләйем", - тип әйтегеҙ һәм көн оҙоно ошоға бәйле "осраҡлыҡ"ҡа эйәрегеҙ (был концепцияға һуңыраҡ әйләнеп ҡайтырбыҙ). Башҡа мәсьәләләр иртәгәгә тиклем көтөп торһон. Мейегеҙ лазерға әйләнгәс, тормошоғоҙҙоң нисек үҙгәргәнен күрерһегеҙ!

Был эшкә хәҙер үк тотонорға теләйбеҙ икән, тәү сиратта, иң элек ниндәй хыялығыҙҙы тормошҡа ашырырға теләйһегеҙ, шуны асыҡлағыҙ һәм һайлағыҙ, сөнки лазер булып бер юлы 10 мәсьәләне хәл итеү мөмкин түгел.

Шәхсән төрлө варианттарҙы эшләп ҡараным - һәр категориянан өсәр маҡсатты, бер категориянан биш маҡсатты һ.б., ахырҙа шундай һығымтаға килдем: иң яҡшыһы - бер генә хыял-маҡсатты һайлау. Әгәр бер юлы бер нисә эште башҡарырға һәләтлеһегеҙ икән - үҙегеҙҙең вариантығыҙҙы булдырығыҙ..

**Пьер МОРАНСИ.**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# 7 АПРЕЛЬ - ГЕОЛОГ КӨНӨ

**Был байрамды апрель айының тәүге йәкшәмбеһендә билдәләү йолаға ингән, быйыл ул 7-һенә тура килә. Геологтарҙың һөнәри байрамы СССР Юғары Совет Президиумы Указы менән 1966 йылдың 31 мартында булдырыла. Артабан ул 1980, 1988 йылдарҙа тағы бер ҡат раҫлана һәм 2013 йылда РФ Президенты тарафынан да ҡабул ителә.**

Байрам көнө нәҡ апрель башына тәғәйенләнеүе геология өлкәһе белгестәренең ҡышҡы һыуыҡтар бөтөп, ҡарҙар ирегәндә йәйге ҡыр эштәренә һәм экспедицияларға әҙерләнә башлауына бәйле. Уны 1966 йылда Көнбайыш-Себер нефть-газ табылған провинцияның тәүге яткылыктарын асыуға арнап, академик А.Л. Яншин башланғысындағы бер төркөм билдәле совет геологтары тәҡдим итә.

Кеше борондан ҡаҙылма байлыҡтар менән файҙаланырға өйрәнгән. Боронғо Рустә уны эҙләп табыусыларҙы "рудознатцы" тип йөрөткәндәр, улар тураһында ышаныслы мәғлүмәттәр 15 быуат документтарында осрай. Рәсәйҙең беренсе дәүләт эҙләнеү-разведка учреждениеһы - Мәғдән сығарыу приказы 1700 йылда Петр I ҡарары менән барлыҡҡа килә. 20 йылдан ул Берг-коллегия тип үҙгәртелә, ә 1807 йылда Тау департаментына әүерелә. 1882 йылда Рәсәй империяһының төп дәүләт учреждениеһы - Геология комитеты асыла.

Октябрь революцияһынан һуң төҙөлгән яңы дәүләттә геология эше киң ҡолас йәйә, яңы территориялар тикшерелә һәм яткылыктар табыла. 1946 йылда Сәнәғәт разведкалары үҙәк идараһы һәм Геология комитеты нигеҙендә СССР Геология министрлығы булдырыла, аҙаҡ уның эше РФ Тәбиғәт байлыҡтары һәм экология министрлығына тапшырыла.

Бөгөнгө көндә геология тармағы - Рәсәй иҡтисадының системаһын тәшкил иткән сегмент. Минераль-сеймал комплексы тулайым эске продукты, РФ-ның федераль һәм субъекттар бюджетын, дәүләт һаҡлыҡ фондтарын булдырыуҙа мөһим роль уйнай. Сәнәғәт өлкәләрен үҫтереүгә ҙур өлөш индерә. Рәсәйҙең элек тә, хәҙер ҙә сеймал сверхдержаваһы булып иҫәпләнеүе геологоразведчиктар хеҙмәтенә бәйле.

Рәсәйҙә мәғдән сығарыу эшенең үҫешендә, был өлкәлә белгестәр әҙерләүҙә башҡорттарҙың да роле ҙур булыуын һәр кемебеҙ белә. Атап әйткәндә, Исмәғил Тасимов тигән милләттәшебеҙҙең мөрәжәғәте нигеҙендә булдырылған Тау училищеһы йылдар үткәс, Санкт-Петербург дәүләт тау университетына әүерелә.

Был көндә геолог, геология инженеры, гидрогеолог, геохимик, геофизиктарҙы ҡотлайҙар. Шулай уҡ шартлатыусылар, шахталарҙы ҡаҙып үтеүселәр, физик географтар, геомеханиктар ҙа үҙҙәренең һөнәри байрамы тип иҫәпләй.




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**11-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Аҫҡыс. Галилей. Бикбауов. Диуана. Ләм. Айыт. Ылымыҡ. Янут. Һырғалаҡ. Баҡа. Азов. Ойоҡ. Өлкәр. Огнев. Ожмах. Ҡор. Ҡуян. Муҡса. Оҫта. Ҡына.

**Вертикаль буйынса:** Әҙеһәмов. Балтырған. Манатов. Герб. Ҡоҙғон. Аҙау. Сылғау. Ҡором. Ураҡ. Ватан. Маяҡ. Стена. Саян. Дауытов. Хата. Балыҡ. Атом. Ашыҡ. Айран.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**2 апрель "Амеля"** (Н. Крашенинников, А. Балғазина инсц.). 12+
**3 апрель "Внутри меня цунами"** үҫмерҙәр тарихы. 12.00 12+
**"Килен"** (З. Мусина, З. Бураҡаева инсц.), драма. 16+
**5 апрель "Урал батыр"** башҡорт халыҡ эпосы буйынса ҡобайыр. 12+
**6 апрель "Еҙнәкәй"** (Х. Ибраһимов), музыкаль комедия. 18.00 12+
**7 апрель Премьера! "Бөйрәкәй"** (Т. Ғарипова), драма. 18.00 16+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**2 апрель "Яҙмышымдың икенсе бүлеге"** (Н. Саймон), трагикомедия. 16+
**3 апрель "Аҡһаҡ"** (М. Ғиләжев), драма. 12+
**5 апрель "Чиполлино"** (Дж. Родари), мажаралар. 11.00 0+
**7 апрель "Чиполлино"** (Дж. Родари), мажаралар. 12.00 0+
**"Аҡмулла"** (З. Бураҡаева), ҡисса. 18.00 6+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**5 апрель "Почему весна красна?"** (В. Щербакова). 16.00, 18.00 0+
**6 апрель "Буратино"** (А. Толстой). 12.00 0+
**"Почему весна красна?"** (В. Щербакова). 14.00 0+
**7 апрель Премьера! "Винни-пух"** (Д. Гараева, В. Щербакова). 12.00, 15.00 6+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**1 апрель "Все хорошо, прекрасная маркиза"** концерт. 6+
**2 апрель "Приглашение в театр"** концерт. 6+
**4 апрель "Яҙ килә лә..."** концерт. 6+
**5-7 апрель "Алһыу пантера"** джаз фестивале концерттары. 6+
**7 апрель "Чудесный мир ударных"** ғаилә өсөн концерт. 15.00 0+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**1-2 апрель Премьера! "Ҡоҙалар-ҡоҙасалар"** (Х. Латипова, С. Латипов), музыкаль комедия. 12+
**6 апрель "В Стародавние времена"** (Д. Сәлимйәнов), музыкаль әкиәт. 13.00 6+

## А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**"Тапшырылмаған хаттар"** (С. Әбдрәхимова), трагикомедияһы менән Әбйәлил районы буйлап гастролдәрҙә: **3 апрель -** Ҡужан, **4 апрель -** Ҡырҙас, **11 апрель -** Хәлил ауылында. 16+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**4 апрель "Диләфрүзгә дүрт кейәү"** (Т. Миннуллин), комедияһы менән Салауат театры сәхнәһендә. 16+
**6 апрель "Карауыл! Атай өйләнә?"** (Б. Рацер, В. Константинов), комедия. 18.00 12+
**7 апрель "Золотой осел Насретдина"** (Ш. Казиев), әкиәт. 12.00 0+
**"Әлепле артистары"** (Аманулла), комедия. 18.00 12+

## БР Милли музейы

**2 апрель "Кеше тормошонда дин"** темаһына һөйләшеү. 12.00 18+
**"Билбау үрәбеҙ"**, оҫталыҡ дәресе. 13.00 6+
**3 апрель "Таҫма менән үреү"**, оҫталыҡ дәресе. 15.00 6+
**5 апрель "Сәк-сәк"**, оҫталыҡ дәресе. 16.00 6+
**6 апрель "Башҡорт ҡатын-ҡыҙы тормошо"**, экскурсия. 11.00 6+
**"Тукмас"**, оҫталыҡ дәресе. 12.00 12+
**"Өләсәйем һандығы серҙәре"**, сара. 15.00 6+

АФАРИН!



# "ӨС ТУҒАН, КИНЙӘЛӘРЕ ИШТУҒАН"

**Журналист һәм яҙыусы Мөҙәрис Багаев иҫән сағында үҙен драматург булараҡ та танытып өлгөрҙө. Сибай концерт-театр берекмәһенең "Сулпан" балалар театры уның "Өс туған, кинйәләре Иштуған" әкиәтен сәхнәләштереп, бөгөн тәүге тапҡыр сәхнәгә сығарҙы. Спектакль йәш тамашасыға, йәғни мәктәп уҡыусыларына тәғәйенләнгән.**

Һәр сәхнә әҫәре, уның нигеҙенә һалынған идея тамашасы күңеленә барып етергә тейеш. Әкиәттең асылында белемдең иң ҙур көс икәнлеге ярылып ята.

Ысынлап та, белемле кеше генә барлыҡ ҡаршылыҡтарҙы еңеп сыға. "Көслө - берҙе, белемле меңде еңер" мәҡәленең асылы ла шуға ҡайтып ҡала бит. Өс бер туғандарҙың өлкәне - һунар, уртансыһы солоҡсолоҡ менән ныҡлы мауыға. Кинйәләренең генә бер ниндәй ҙә эше юҡ, ул китапҡа текәлгән. Ағайҙары, һөйгән ҡыҙы ла уның был шөғөлөнән көлә, хатта мыҫҡыл итә. Әммә Иштуған уларҙың көлкөләре "яңырыуы" алда булыуын белгәнлектән, китаптан баш тартмай. Сөнки китапта бар һорауҙарға яуап барлығын яҡшы аңлай. Күп уҡыуы, күп белеүе ағайҙарын бәләнән ҡотҡара, уларҙың баштарын һаҡлап алып ҡала, кәләшле итә, баштарын ергә эйҙертә, ә Иштуғанға тәхеткә үрләү, хан булып китеү мөмкинлеге тыуҙыра.

Әҫәрҙе сәхнәгә Башҡортостандың халыҡ артисы Вәкил Йосопов ҡуйҙы.

- Бөгөн йәштәрҙең, балаларҙың күбеһе мәғәнәһеҙ боевиктар ҡарай, йә булмаһа, компьютерға, замана гаджеттарына төбәлеп, интернет диңгеҙендә йөҙә, - ти әкиәтте ҡуйыусы-режиссер Вәкил Барый улы Йосопов. - Тик донъялағы иң ҙур телевизор экраны ла, икһеҙ-сикһеҙ социаль селтәрҙәр ҙә сәхнә геройҙары менән тамашасы араһындағы бәйләнеште алмаштыра алмай. Шуға күрә лә, был әкиәт аша балаларға китап уҡығанда, белемде даими камиллаштырғанда һәм уны дөрөҫ ҡулланғанда ғына тормошта ниндәйҙер уңыштарға өлгәшергә мөмкин булыуын иҫбатларға тырыштыҡ.

Спектаклдең рәссам-ҡуйыусыһы Луиза Дәүләтбирҙина, композиторҙар - Марат Ғөбәйҙуллин, Азат Исҡужин. Хореограф - Александр Родионов. Әкиәт геройҙарын Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Фәһим Сөнәғәтов, Ишморат Моратов, Морат Амантаев, Урал Атанбаев, Юлдаш Юлдыбаев, Асҡар Зарипов, Зәлиә Ғәлиәхмәтова, Азалия Ялалова, Альбина Байназарова һынландыра. Мауыҡтырғыс тамашаны залдағы балалар төрлөсә ҡабул итте. Тупаҫ хан менән хәйләкәрлеген ҡайҙа ҡуйырға белмәгән вәзирҙән күмәкләшеп көлдө, төп герой Иштуғандың яҙмышы хәл ителгән мәлдәрҙә тулҡынланып, бер аҙға тынып ҡалды. Шуны ла билдәләп үтергә кәрәк: авторҙың әҫәрендә башҡорт халҡының милли колориты ла сағыла.

Залда башлыса балалар ултырҙы һәм улар спектаклде шул тиклем мауығып ҡараны. Был әкиәт мәктәп уҡыусыларына ла, өлкәндәргә лә мотлаҡ оҡшаясаҡ.

Ҡыҙыҡлы спектакль мәртәбәле фестивалдәрҙә еңеү яулаясағына өмөт ҙур.

**Гөлдәр ҠАДАЕВА,**
**Сибай концерт-театр берекмәһенең әҙәби-реклама бүлеге етәксеһе.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҠАЛАҠЛАП ЙЫЙҒАНДЫ...

## табаҡлап түкмә

Улың менән ирешһәң, түрендә ултырып иреш, кейәүең менән ирешһәң, ишек тотҡаһын тотоп ireш.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Йөрәктең йыйырсыҡтары булмай, ул яра йөйҙәренән тора.

**(Колетт).**

Изгелек беҙҙе матурлай, яуызлыҡ йәмһеҙләй - был хәҡиҡәт өсөн мин үтелгән йылдарыма бурыслы.

**(Микеланджело Буонаротти).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Иренең йәберһетеүҙәренән арыған бер ҡатын Уҡытыусыға килә һәм үҙенең хәле тураһында түбәндәгеләрҙе һөйләй:**

**- Ирем яратмай мине. Ул мине гел генә кәмһетә, уныңса, мин насар хужабикә, ҡулымдан бер эш тә килмәй. Иремә һис нисек ярай алмайым...**

**- Уға ярарға тырышма ла... - ти Уҡытыусы. - Һин быяла тәҙрә аша урамға сығырға маташҡан күбәләккә оҡшағанһың. Нисек кенә бәргеләнһә лә, күбәләк быяланы ватып сыға алмаясаҡ. Ләкин ул быны белмәй, шуға ла ул мөмкин булмағанды эшләргә ынтыла. Күбәләктән айырмалы, һин бит иреңә бер нисек тә ярай алмаясағыңды беләһең, ләкин һаман мөмкин булмағанды эшләргә маташаһың...**

**- Улайһа, миңә ни эшләргә һуң? Уның үҙемә насар мөнәсәбәтен нисек үҙгәртергә? - тип һорай ҡатын.**

**- Уның мөнәсәбәтен үҙгәртергә тырышырға ярамай. Ул бит һиндә нимә күрергә теләһә, шуны ғына күрә. Һин үҙеңә булған мөнәсәбәтеңде үҙгәрт. Һиндә һине яратҡан Һинең бар. Уны тыңла. Ул ғына һиңә дөрөҫ кәңәш бирер...**

**Өйөнә ҡайтҡас, ире тағы ҡатынын әрләй, йәберләй башлай. Уҡытыусы кәңәше буйынса, ҡатын быға тиклем таныш булмаған тауышты - Үҙен ишетергә теләп, иренең мыҫҡыллауҙарына иғтибар итмәгәнгә һалыша. Ләкин иренең тауышы һаман да ҡолағына салынып, уның йөрәген ҡанһырата. Ҡатын, ғәҙәтенсә, илар сиккә етеп, ирендәре дерелдәй башлауы була, ҡапыл ҡолағына "Мин һине яратам, һин иң яҡшыһы, иң матуры", тигән тауыш ишетелә. Иренең һәр әренән һуң ҡатындың йән тауышы "Ә мин һине яратам..." тип ҡабатлай. Ошо көндән һуң ҡатындың тормошо үҙгәрә. Ул иренең ҡылығына һәм һүҙҙәренә, мыҫҡыллауҙарына иғтибар итеүҙән туҡтай. Ире лә ҡатынындағы был үҙгәреште күрә. Үҙенең ҡысҡырыуҙарының, туҙыныуҙарының кире ҡаҡлығыуын, ҡатынының уларҙы ишетмәүен һәм шәйләмәүен аңлай һәм... үҙ ҡылығынан үҙе ояла башлай, ауыҙына һыу ҡаба. Ҡатынына иғтибарлыраҡ бағып ҡарап, уның иң матуры икәнен аңлай һәм уға яңынан ғашиҡ була..."**

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

# МИЛЛИ ОПЕРАҒА САҠЫРАЛАР



**Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры күренекле башҡорт композиторы Салауат Низаметдиновтың "Ай тотолған төндә" операһының премьераһын әҙерләй. Сәхнә әҫәре Башҡортостандың халыҡ шағиры, бөйөк яҙыусы һәм драматург Мостай Кәримдең тыуыуына 105 йыл тулыуға бағышлана.**

Театр был операға тәүге тапҡыр ғына мөрәжәғәт итмәй. Спектаклдең беренсе премьераһы 1996 йылда булды. Опера Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһына тәҡдим ителде, 1997 йылда Мәскәүҙә Башҡортостан көндәрендә күрһәтелде. Операның дирижер-ҡуйыусыһы - Рәсәйҙең атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, Башҡортостандың халыҡ артисы, "Алтын битлек" милли театр премияһы лауреаты Валерий Платонов.

"Опера кеше рухының азатлығы хаҡында. Мостай Кәримдең әҫәрендә лә, Салауат Низаметдинов операһында ла асыҡ финал булыуға ҡарамаҫтан, уны бәхетле, хатта фажиғәле итеп эшләргә мөмкин. Беҙҙеке ниндәй булыр, әлегә әйтмәйем, әммә беҙҙең өсөн төп идея - ул азатлыҡ идеяһы", - ти ҡуйыусы режиссер Ләйсән Сәфәрғолова. Башҡортостандың халыҡ артисы Әлфиә Кәримова ырыу башлығы Тәңкәбикәнең улы Аҡъегеттең һөйгәне - Зөбәржәт партияһын әҙерләй. "Туған театрымда яңы постановкала ҡатнашыуым менән бәхетлемен, - тип тәьҫораттары менән уртаҡлашты йырсы. - Милли репертуарҙың тағы бер операһы репертуарҙа лайыҡлы урын алыуына ҡыуанам. Барлыҡ нескәлектәрен дә асмайым, әммә тамашасыға премьера оҡшар тип ышанам".

ТЕЛҺӨЙӘР

# ХИМАЯСЫ ЯЛЛА

**Халыҡта элек-электән оло кешенең һаҡымын хөрмәтләйҙәр. Тәбиғи талантҡа һәм һаҡымға эйә Арыҫлан Мөбәрәков сәнғәттә иҫтә ҡалырлыҡ сағыу образдар һынландырҙы. "Һаҡым" һүҙенең мәғәнәһен юллап, "Башҡорт теленең академик һүҙлеге"н асайыҡ.**

**Һаҡым.** Диалекттарҙа ҡулланылған һүҙ. Алда килтерелгән тәүге миҫалда "олпатлыҡ" тигәнде белдерә. *Шундай уҡ миҫалдарға туҡталайыҡ: Һаҡымын белгән ҡунаҡ. Һаҡым етәксе.* **Икенсе осраҡта "һаҡым"** - "мөһабәт төҫ-ҡиәфәт" тигәндең синонимы. *Мәҫәлән: Һоҡланғыс һаҡым.*

**Химая.** Яҡлау, ҡурсалау тураһында һөйләгәндә, "химая" тигән һүҙ ҙә бик урынлы. *Зәйнәб Биишева әҫәренән миҫал: Тайба әбей ... йәш киленен химаяға алды.*

**Химаясы.** "Химаясы" "авдокат" тигән һүҙҙе алыштыра ала. Миҫал өсөн: Химаясы яллау. Тәжрибәле химаясы.

**Һиммәт. 1.** Һиммәт ул - көслө ынтылыш, ялҡынлы дәрт; тырышлыҡ. *Миҫалға: Ҡош ҡанат менән, ир һиммәт менән оса (Әйтем). Эште һиммәт менән атҡарыу.* **2.** Һиммәт тағы ла "намыҫ, дан" була. *Мәҫәлән: Үҙ һиммәтен һаҡлар аҫыл улдарын тыуҙыра, үҫтерә торор башҡорт халҡы(Ғайса Хөсәйенов).* **3.** "Игелек, йомартлыҡ, ярҙам", тип тә аңлатыла был һүҙ. *Миҫал: Һиммәт күрһәтеү. Һиммәткә рәхмәтле булыу.*

**Шулай итеп, туған телде химаяға алған һәр замандаш үҙ һиммәтен арттырыр.**

**НУРБИКӘ әҙерләне.**
**(Дауамы. Башы 45-се һанда).**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 24012

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән ВӘЛИЕВА,
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "Полиграфия" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (3476) 35-31-02. (453261, БР, Салауат ҡалаһы, Ленин ур., 5/11).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |
| **Матбуғат таратыу** | **252-39-99** |

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
28 март 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 14 сәғәт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 2750
Заказ - 111605